Ф.С. Әминева

# Башҡорт аш-һыуҙары лексикаһы

*Этнолингвистик тикшеренеу*



Өфө-2003

БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ МӘҒАРИФ МИНИСТРЛЫҒЫ

БАШҠОРТОСТАН МӘҒАРИФ КАМИЛЛАШТЫРЫУ ИНСТИТУТЫ

Ф.С. Әминева

# Башҡорт аш-һыуҙары лексикаһы

*Этнолингвистик тикшеренеү*

*Яуаплы редактор: филология фәндәре докторы, профессор М.В. Зәйнуллин*

Өфө-2003

УДК 811.512.141
ББК 81.2 (Баш-4)
А 62

*Башҡортостан Республикаһы мәғариф министрлығы тарафынан раҫланды*

Әминева Ф.С. Башҡорт аш-һыуҙары лексикаһы: этнолингвистик тикшереneү. / Лексика питания в башкирском языке: этнолингвистическое исследование. - Уфа: БИРО, 2003. - 152 с.

Был монографияла башҡорт теленең милли аш-һыуҙары һәм туҡланыу системаһы киң планда тикшерелә. Хеҙмәттә башҡорт милли аштарының атамалары, шулай уҡ уларҙы нисек әҙерләү, һаҡлау, халҡыбыҙҙың аҙыҡ-түлеккә булған мөнәсәбәте, уның табын этикеты лингвистик, этнографик аспекттарҙа ҡарала.

Китап филология буйынса ғилми хеҙмәткәрҙәргә, тарихсыларға, этнографтарға, тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыларына, махсус урта белем һәм юғары уҡыу йорттары студенттарына, ғөмүмән, милли аш-һыу лексикаһы менән ҡыҙыҡһыныусыларға тәғәйенләнә.

*Рецензенттар:*
филология фәндәре докторы, профессор Э.Ф. Ишбирҙин,
педагогия фәндәре кандидаты Х.А. Толомбаев

ISBN 5-7159-0618-0

© Аминева Ф.С., 2003.
© БИРО, 2003.

# И Н Е Ш

Тел ғилемендә теге йәки был милли телдең лексик составын өйрәнеү, уның семантик системаһын асыҡлау, яңы һүз ҡатламдарын асыу, онотолғандарын ҡайтанан тергеҙеү - иң мөһим һәм актуаль мәсьәләләр булып тора. Сөнки тел - ҡиммәтле мәҙәни ҡомартҡы, халыҡтың тарихын, тормош-көнкүрешен, мәҙәниәтен сағылдырған үҙенсәлекле тылсымлы бер көҙгө ул. Шуға күрә һәр милли тел төрлө юҫыҡта, төрлө йүнәлештә, һәр яҡлап ентекле өйрәнелергә тейеш. Ана шундай тикшеренеү һөҙөмтәләренең береһе - терминология, йәғни исем-атамаларҙы өйрәнеү. Телдең терминологик лексикаһын күҙаллау бығаса башлыса бер юҫыҡта - уның яһалыу ысулдарын, семантикаһын тикшереү формаһында ғәмәлгә ашырыла килде. Һуңғы йылдарҙа тормош-көнкүреш терминдары мәҙәни-тарихи һәм этнографик контекстарҙа сағылыш тапты. Был йүнәлеш тел ғилемендә "этнолингвистика" тип йөрөтөлә. Рәсәй фәнендә этнолингвистик тикшеренеүҙәр башында профессорҙар И.Г. Гердер менән И.В. Гумбольдтар тора. Уларҙың хеҙмәттәре һәм фекерҙәре башҡа славян тел белгестәре, атап әйткәндә, Н.И. Толстой, А.Ф. Журавлев, В.В. Ивановтарға артабанғы эҙләнеүҙәр өсөн ғилми нигеҙ була. Үҙҙәренең хеҙмәттәрендә улар этнолингвистиканың тел ғилемендәге мөһим бер йүнәлеш булыуын билдәләп, уның бай мөмкинселектәрен асып бирәләр. Башҡорт тел ғилемендә иһә был тармаҡты өйрәнеүгә әлегәсә тейешле иғтибар бүленмәне, ул махсус тикшеренеү объекты булманы.

Дөрөҫ, ҡайһы бер телселәрҙән тыш (Н. Дмитриев, Ж. Кейекбаев, Н. Мәҡсүтова, Ә. Байышев, Т. Ғарипов, Ф. Хисаметдинова), башҡорт тарихын, бигерәк тә этнографияһын өйрәнеүселәр төрлө осорҙа, төрлө юҫыҡта тормош-көнкүреш, тарихи-мәҙәни терминдарға характеристика биреп китәләр. Әммә был мәғлүмәттәр үтә лә тарҡау һәм тикшеренеү объекты булараҡ тейешле күләмдә һәм кимәлдә түгел. Ошонан сығып ҡарағанда, башҡорт тел ғилемендә этнолингвистиканы фәнни юлға һалыу, үҫтереү зарурлығы күренә.

Нимә һуң ул этнолингвистика? Академик Н.И. Толстой фекеренә таянып, этнолингвистика тигәндән беҙ лингвистка фәненең тел менән тарих, тел менән мәҙәниәт, тел менән халыҡ менталитеты, тел менән халыҡ ижады араһындағы үҙ-ара бәйләнештәрҙе һәм уларҙың төрлөсә сағылышын өйрәнгән йүнәлешен аңлайбыҙ.

Әлбиттә, этнолингвистика күп төрлө терминдарҙы өйрәнә. Улар кейем-һалым, ҡорал-ҡорамал, йорт ҡаралтылары, хужалыҡ кәрәк-яраҡтары, аш-һыу һәм башҡа төр атамаларға бүленә. Һәр төрлө терминдарҙың үҙенсәлекле яһалыш формалары, яңғырашы, мәғәнәүи асылы бар. Шуға күрә һәр төрҙө айырым тикшереү фарыз. Был хеҙмәттә беҙ тик аш-һыу терминдарына ғына туҡталасаҡбыҙ.

Ниндәй аш-һыу әҙерләү, нисек аш мәжлесе ойоштороу, аҙыҡ-түлектең төрө, әҙерләү тәртибе, һыйлау-һыйланыу йолаһы - былар барыһы ла халыҡтың этник һәм мәҙәни тарихы эҙемтәләре. Шуға күрә аш-һыу атамаларын өйрәнеү - бер үк ваҡытта милләттең тарихын

да, мәҙәниәтен дә өйрәнеү ул. Хәзерге ваҡытта халыҡтың этник үҙенсәлектәре материаль һәм рухи культура өлкәһендә әкренләп юйыла, тоноҡлана бара. Әммә аш-һыу терминдары өлкәһендә этнографик үҙенсәлектәр тотороҡлораҡ һаҡлана. Мәҫәлән: кейем-һалым, йорт ҡаралтылары атамалары. Әйтелгәндәрҙән сығып, хеҙмәттең темаһы һәм тикшеренеү объекты билдәләнде.

Эштең маҡсаты - милли аш-һыу лексикаһын этнолингвистик планда яҡтыртыу, был тематик төркөмгә ингән терминдарҙың семантик төҙөлөшөн асыҡлау һәм башҡорт аш-һыуҙарының, табын этикетының фольклорҙа сағылышын күрһәтеү.

Ҡуйылған маҡсатҡа ярашлы, түбәндәге конкрет мәсьәләләр ҡарала:

- башҡорт милли аш-һыу терминдарын классификациялау;
- аш-һыу терминдарының яһалышындағы типик моделдәрҙе һәм айырым алымдарҙы асыҡлау;
- тикшеренеү объекты булған термино-системаның халыҡ ижадындағы сағылышын күрһәтеү һәм шулар аша башҡорт табын этикетының үҙенсәлектәрен яҡтыртыу.

Аш-һыу лексикаһын этнолингвистик йәһәттән яҡтыртыу һәм уны системалы анализлау терминдарҙың яһалыш моделдәрен асыҡлауға, шулай уҡ тел һәм материаль культура араһындағы булған тәрән эске бәйләнештәрҙе күҙ алдына баҫтырырға мөмкинселек бирә.

Тикшеренеү һөҙөмтәләре һәм һығымталары тарихи лексикологияның ҡайһы бер проблемаларын асыҡларға һәм хәл итергә мөмкинселек бирә, башҡорт тел ғилемендәге

перспективалы йүнәлеш булараҡ, этнолингвистиканы артабан үҫтереүгә булышлыҡ итә.

Хезмәттең практик әһәмиәте түбәндәгеләргә ҡайтып ҡала: йыйылған һәм күзәтеү үткәрелгән материалдар артабан башҡорт теленең аңлатмалы, ике телле, этнолингвистик һүзлектәрен төзөүзә файзаланыла ала.

Тикшеренеү һығымталарын төрлө уҡыу йорттарында башҡорт телен уҡытыуза, профессиональ лексика буйынса махсус семинарзар үткәреүзә, шулай уҡ лексикология буйынса уҡыу әсбаптары төзөүзә ҡулланырға мөмкин. Улар башҡа төрки халыҡтарзың тел ғилеме өсөн сағыштырма материал булып та хезмәт итә ала.

Тикшереүзәр нигезендә тарихи, сағыштырма, тасуирлы методтар ята. Шулай уҡ информаторзарзан мәғлүмәт алыу алымы ла киң файзаланыла. Хеҙмәттә структур-семантик һәм тарихи-этимологик анализ да сағыштырмаса зур урын тота.

Фактик материал башҡорт теленең һәм башҡа төрки халыҡтарының аңлатмалы, ике телле, фразеологик, этимологик һүзлектәренән, шулай уҡ халыҡ ижады өлгөләренән, башҡорт языусылары әҫәрзәренән, информаторзар биргән мәғлүмәттәрзән тупланған.

Алда әйтеп үтеүебеҙсә, милли аштарза халыҡтың тарихы, кәсебе, көнкүреше, мәзәниәте, хатта милли үзаңы һәм донъяға ҡарашы сағыла. Шуға күрә башҡорттарзың тарихы һәм мәзәниәте менән ҡызыҡһыныусылар, уларзың милли аш-һыуzарына, туҡланыу-мәжлес йолаларына ла иғтибар биреп, мөмкин тиклем ҡағызға төшөрә килгәндәр.

Башҡорттарҙың милли аш-һыуҙары тураһындағы тәүге мәғлүмәт XIII быуатҡа ҡарай. 1253 йылда француз короле Людовик IX ҡушыуы буйынса монголдарҙың ханы Мегуға Вильгельм де Рубрук етәкселегендәге дипломатик миссия ебәрелә. Ул сәйәхәттән В. Рубрук үҙе үткән ерҙәр һәм илдәр тураһында бай тарихи, этнографик һәм географик материалдар килтерә. Ул урта быуат Европа сәйәхәтселәре араһынан беренсе булып башҡорт ерҙәренең теүәл сиктәрен билдәләй, уларҙың тормош-көнкүренешен тасуирлай. Рубрук бик тәфсилләп башҡорттарҙың милли эсемлеге ҡымыҙ һәм уны яһау ысулы тураһында яҙа. [18. 74-75].

Шулай ҙа башҡорттарҙың милли аш-һыуҙарына бәйле боронғо мәғлүмәттәр бик һай һәм ярлы. Мәҫәлән, XVII быуатҡа ҡараған "Книга Большому Чертежу" тигән китапта "башҡорттарҙың ашамлығы - бал, йәнлек һәм балыҡ", тип кенә әйтелеп киткән. Ә ул замандарҙа башҡорттар, күсмә халыҡ булараҡ, башлыса ит һәм һөт ризыҡтары менән туҡланған.

XVIII-XIX быуаттарҙа башҡорт аштары һәм туҡланған ризыҡтары хаҡында мәғлүмәттәр күбәйә һәм киңәйә бара. Быға Рәсәй Академияһы эшмәкәрлегенең әүҙемләшеүе сәбәпсе була. Төрлө тарихи, географик, этнографик йәмғиәттәр барлыҡҡа килә һәм улар Рәсәйҙә йәшәгән халыҡтарҙы өйрәнеү эшен киң йәйелдерә. Яңы барлыҡҡа килгән журналдарҙа, йыйынтыҡтарҙа теге йәки был милләттәр хаҡында, шул иҫәптән башҡорттар тураһында ла, күпләп мәҡәләләр, юлъяҙмалар баҫыла.

Уларза башҡорттарзың туҡланыуы һәм милли аш-һыузары хаҡында ла һүз күтәрелә.

Башҡорттарзың тарихы, этнографияһы, көнкүрешенә ҡағылышлы ҡиммәтле һәм сағыштырмаса киң (ул заман өсөн) мәғлүмәттәрзе беренселәрзән булып рус тикшеренеүсеһе И.Г. Георги бирә [5.24]. Ул үзенең "Описание всех обитающих в Российском государстве народов" тигән китабында башҡорт милли аш-һыузары тураһында ла язып үтә. 1769-1770 йылдарзағы академик экспедиция ағзалары П.С. Паллас, И.И. Лепехин, Н.С. Попов юлъязмаларында ла башҡорт милли аш-һыузары хаҡында мәғлүмәттәр осратырға мөмкин. И.И. Лепехин әйтеүенсә, мәсәлән, башҡорттар йәй айзарында башлыса һөт ризыҡтары менән туҡлана [11.43]. П.С. Паллас та башҡорттарзың ғәзәттә ит һәм һөт ашамлыҡтарын ҡулланыуын, ә икмәктең бар урында ла файзаланылмауын билдәләй [16.98]. Пермь башҡорттарының туҡланыуы хаҡында Н.С. Попов: "Улар иттән тыш, өлөшләтә икмәк ашай, йәйгеһен ҡымыз эсә, ә ҡыш көнө һөттән әсе бал яһай," - тип яза [17. 16].

1851 йылда "Оренбургские губернские ведомости" журналында рус языусыһы В. Зефировтың "Взгляд на семейный быт башкирца" тигән очеркка тартым юлъязмаһы басылып сыға [20. 4]. Унда автор Өфөгә китеп барышлай бер ауылда Абдулла исемле башҡортта туҡталыуын һәм шунда күргәндәрен бәйән итә. Был юлъязма этнографик характерза булыуы менән ҡиммәт. В. Зефиров зур һоҡланыу менән башҡорттарзың ғаилә

йолаларын тасуирлай. Беззең өсөн бигерәк тә уның ашһыу әзерләү, табын йолаһына бәйле язмалары ҡыҙыҡлы. Ул тәү башлап башҡорттарзың милли ашы бишбармаҡ әзерләү һәм уны табында ҡулланыу тураһында бик ентекле мәғлүмәт бирә.

XIX быуаттың 50-се йылдары азағында - 60-сы йылдар башында башҡорттарға ҡағылышлы ике мөһим этнографик хезмәт донъя күрә. Уларзың береһе - В.М. Черемшанскийзың "Описание Оренбургской губернии в хозяйственно-статистическом, этнографическом и промышленном отношении" тигән китабы, икенсеһе - И. Игнатовичтың "Башкирская Бурзянская волость" исемле мәҡәләһе. Уларза башҡорт этнографияһы буйынса күп кенә ҡыҙыҡлы күзәтеүзәр килтерелә.

1890 йылдарза башҡорттарзың этник тарихы, ғөрөф-ғәзәттәре, йолалары хаҡында күзәтеүзәр һәм тикшеренеүзәр бермә-бер арта. Шулар араһынан Д.П. Никольскийзың хезмәттәрен айырым билдәләп үтергә кәрәк. Шул осорза Пермь губернаһының Екатеринбург һәм Шадринск өйәззәрендә земство врачы булып хезмәт иткән Д. Никольскийзың башҡорттарзың көнкүреше, йолалары менән яҡындан танышырға мөмкинселеге була. Тикшеренеү даирәһен киңәйтеү өсөн ул күрше Верхнеуральск өйәзен дә йөрөп сыға. Шул күзәтеүзәр һәм тикшеренеүзәр нәтижәһендә "Из поездки к лесным башкирам" (Землевладение. Т. II, кн. 4. М., 1895) һәм "Башкиры. Этнографическое и санитарно-антропологическое исследование" (СПб, 1899) тигән хезмәттәре языла.

Ошо уҡ осорза, атап әйткәндә, 1895 йылда беззең темаға туранан-тура ҡағылышлы булған башҡорт милли аштары тураһында тәүге махсус хезмәт донъя күрә. Доктор В. Арнольдов имзаһы менән баҫылған был мәҡәлә "Пища башкир" тип атала [1.520-521]. Иҫкәрмәнән аңлашылыуынса, ул В. Арнольдовтың Ҡазан врачтар йәмғиәте алдында яһаған докладынан алынған.

Мәҡәләлә автор башҡорттарзың туҡланыу рационында ит, һөт, иген азыҡтарының өҫтөнлөк итеүен билдәләй һәм уларзан ниндәй аш-һыу әзерләнеүен тәфсилләп бәйән итә. Бигерәк тә бында икмәк, бутҡа бешереү, бишбармаҡ әзерләү, ҡаҡ ҡойоу, әсе бал яһау тураһындағы мәғлүмәттәр ҡыҙыҡлы.

XIX быуаттың икенсе яртыһында үз халҡының милли аштары тураһында башҡорттарзан сыҡҡан ғалим-тикшеренеүселәр П.С. Назаров, Б.Г. Юлуев, М. Байышевтар бай һәм ҡиммәтле мәғлүмәттәр килтерә. Милли йолаларзы, ғөрөф-ғәзәттәрзе үз күззәре менән күреп үҫкән һәм зур ғилем алған был талантлы шәхестәрзең язмалары, әлбиттә, ысынбарлыҡты нығыраҡ һәм киңерәк сағылдырыу менән айырыла. Мәҫәлән, П. Назаров үзенең "К этнографии башкир" тигән зур ғына мәҡәләһендә [15. 164-192] ябай һәм урта хәлле башҡорт ғаиләһенең көндәлек туҡланыу рационына ентекле анализ яһай, байрамдарза әзерләнгән аш-һыузарзы (бишбармаҡ, махан, ҡазы) барлай, башҡорт табыны этикеты тураһында ҡыҙыҡлы материалдар бирә.

Әлбиттә, үрзә атап үтелгән тикшеренеүселәрзең хезмәттәре ҡиммәтле этнографик сығанаҡтар булып тора.

Әммә шуны ла әйтергә кәрәк: улар айырым төбәк башҡорттарының көнкүрешен һәм йолаларын яҡтыртыуға ғына ҡоролғандар.

Ә бит һәр төбәктең, һәр ырыузың үҙҙәренә генә хас этнографик үҙенсәлектәре бар. Башҡорттар тураһында тулы мәғлүмәт алыу өсөн һәр төбәкте тикшереп, дөйөм һыҙаттар, айырмалыҡтарҙы табыу талап итәлә ине. Быңдай ҡатмарлы эшкә XX быуат башында рус этнографы С.И. Руденко тотона. 1905-1907, 1912-1915 йылдарҙа ул бөтә Башҡортостан буйлап йөрөп, бик бай һәм ҡиммәтле материал туплай. Тикшеренеүсе үҙ яҙмалары менән генә сикләнмәй, башҡорттар тураһында уға тиклем яҙылған һәм баҫылған бөтә сығанаҡтарҙы ентекләп өйрәнә. Һөҙөмтәлә "Башкиры" тигән бай йөкмәткеле ҙур монография тыуа. Ул беренсе тапҡыр 1925 йылда баҫылып сыға һәм 1955 йылда иһә тулыландырылған икенсе баҫмаһы донъя күрә [19. 10]. Был монографияларҙа төрлө ырыу башҡорттарының көнкүреш һәм мәҙәни үҙенсәлектәре киң планда ентекле тасуирлана. Уларҙағы айырмалыҡтарҙы С.И. Руденко Башҡортостан территорияһындағы этник процестарҙың ҡатмарлылығы менән аңлата.

Китапта башҡа этнографик күренештәр менән бергә башҡорт милли аш-һыуҙары ла ентекле тикшерелә. Был мәсьәләгә тулы бер бүлек бағышлана. Үҙенең күҙәтеүҙәренән сығып һәм боронғораҡ яҙмаларға таянып, С.И. Руденко башҡорттарҙың туҡланыу рационында файҙаланылған аҙыҡтарҙы бер нисә төркөмгә бүлә: үҫемлек аҙыҡтары, ит аҙыҡтары, һөт аҙыҡтары. Артабан

ул һәр төркөмгә ингән ризыҡтарзы һәм аш-һыузарзы ентекле тасуирлай, уларзы әзерләү һәм һаҡлау ысулдары менән таныштыра.

"Башҡорттарзың туҡланған ризыҡтары ярайһы уҡ күп төрлө. Уларза бер юлы төрлө райондарза, ултыраҡ көнкүрешкә лә, күсмә тормошҡа ла ҡағылышлы азыҡ-түлектәрзе осратырға мөмкин. Үз-ара аралашыу процесында бер төбәккә хас аш-һыузар икенсе төбәктәргә үтеп ингән һәм, шуға күрә, теге йәки был аш-һыузы әзерләү һәм ҡулланыу буйынса ҡырҡа айырылып торған райондар юҡ. Шулай за төбәк үзенсәлектәре лә ярайһы уҡ асыҡ күренә", - тип һығымта яһай тикшеренеүсе [18. 134].

С.И. Руденконан һуң байтаҡ йылдар башҡорттарзың милли йолалары, көнкүреше, шул иҫәптән аш-һыу темаһы менән махсус шөғөлләнеүсе тикшереүселәр булмай. Тик 1958 йылдан һуң, Тарих, тел һәм әзәбиәт институтында этнография һәм антропология бүлеге асылғас ҡына, башҡорттарзың йолалары, көнкүреше буйынса тикшеренеүзәрзең яңы, етди этабы башлана. Был ғилми йүнәлештең башында үзебеззә үҫеп сыҡҡан ғалимдар Р.Г. Кузеев, Н.В. Бикбулатов, Ә.З. Әсфәндиәров, С.Н. Шитовалар тора. Уларға һуңыраҡ йәшерәк тикшеренеүселәр М.Г. Муллағолов, Р.М. Йосопов, Ф.Ф. Фатыхова һ.б. ҡушыла. Уларзың ғилми тикшеренеүзәре һөзөмтәһе буларак байтаҡ әһәмиәтле ғилми хезмәттәр донъя күрзе. Бына шуларзың ҡайһы берзәре: Кузеев Р.Г., Бикбулатов Н.В., Шитова С.Н. "Зауральские башкиры: этнографический очерк быта и культуры в XIV-XX вв."; Әсфәндиәров Ә.З. "Хозяйство башкир в первой половине

XIX в"; Шитова С.Н. "Материальная культура башкир бассейна р. Юрюзани и среднего Ая"; Бикбулатов Н.В., Фатыхова Ф.Ф. "Семейный быт башкир XIX-XX вв."; Кузеев Р.Г. "Историческая этнография башкирского народа"; Янгузин Р.З. "Хозяйство башкир дореволюционной России".

Атап үтелгән хезмәттәрзең барыһында ла башҡорт милли аш-һыузары тураһында байтаҡ ҡиммәтле материалдар килтерелә. Әммә улар этнографик характерза. Аш-һыу терминдарын лингвистик йәһәттән махсус рәүештә С.Ғ. Ғилманова тикшерә һәм бер нисә етди мәҡәлә баҫтыра [4].

Был хезмәттәге беззең маҡсатыбыз - аш-һыу терминдарын киңерәк планда, этнолингвистик йүнәлештә тикшереү һәм монографик планда яҡтыртыу. Шул маҡсатҡа ярашлы һәр бүлек аҙағында тейешле һығымталар яһала.

## I БҮЛЕК
## БАШҠОРТ МИЛЛИ АШ-ҺЫУ ТӨРҘӘРЕ

Инеш өлөштәге күҙәтеүҙәрҙән күренеүенсә, башҡорт милли аш-һыуҙары төрлө осорҙа, төрлө авторҙар тарафынан аҙмы-күпме тикшерелгән, тема буйынса ҡайһы бер айырым хеҙмәттәр ҙә яҙылған, әммә милли аш-һыуға ҡағылышлы бөтә проблемалар ҙа асыҡланған, бар мәсьәләләр ҙә хәл ителгән тип әйтеп булмай. Тикшеренеүселәрҙең күҙ уңынан ситтә ҡала килгән мәсьәләләрҙең береһе - башҡорт милли аш-һыуҙарын классификациялау, йәғни аш-һыуҙарҙы (тимәк, уларҙың терминдарын да) теүәл бер системаға һалыу. Этнолингвистиканың этнография фәне менән үтә тығыҙ бәйләнештә булыуынан сығып, беҙ был мәсьәләгә яҡындан килергә һәм ентекләберәк туҡталырға тейешбеҙ. Сөнки, алда әйтелгәнсә, милли аш-һыуҙар системаһы, туҡланыу йолалары халыҡтың көнкүрешен генә түгел, уның материаль һәм рухи культураһын да, шул иҫәптән тел байлығын да ғәйәт теүәл сағылдарған үҙенсәлекле көҙгө ул.

XVIII-XIX быуат тикшеренеүселәре башҡорттарҙың туҡланыуы һәм милли аш-һыуҙары тураһында төрлөсә мәғлүмәт бирә. Берәүҙәре ризыҡтарҙың наҡыҫлығы һәм аш-һыу төрҙәренең ярлылығын билдәләй. Мәҫәлән, ул осорҙа И.И. Лепехин әйтеүенсә, башҡорттар йәйгеһен тик һөт кенә ҡулланған [11. 55]. П.С. Паллас иһә халыҡтың рационында, һөт ризыҡтарынан тыш, ит аҙыҡтарының булыуын да күрә һәм шул уҡ ваҡытта икмәктең һәр урында ла ҡулланылмауы тураһында яҙа [16. 650-651].

Башҡорттарҙың көндәлек туҡланыу рационын П.К. Назаров май һәм ҡаймаҡ ҡушып ашалған көлсәгә, ҡыҫыр (итһеҙ) һалмаға һәм бутҡаға ҡайтарып ҡалдыра [15. 192]. Ҡайһы бер хеҙмәттәрҙә, киреһенсә, башҡорттарҙың туҡланыу ризыҡтарының, милли аш-һыуҙарының байлығы һәм төрлөлөгө һыҙыҡ өҫтөнә алына.

Башҡорттарҙың милли аш-һыуҙары тураһында үткән быуатта теркәлгән мәғлүмәттәрҙең төрлө-төрлө, ҡайһы берҙә хатта ҡапма-ҡаршылыҡлы булыуҙарының үҙ сәбәптәре бар. Беренсенән, был тема менән бер тикшеренеүсе лә, бер сәйәхәтсе лә махсус рәүештә, эҙмә-эҙлекле шөғөлләнмәгән. Аш-һыуҙарға ҡағылышлы яҙмалар юлайҡанлы, ниндәйҙер күҙәтеүҙәргә өҫтәлмә мәғлүмәт булараҡ ҡына теркәлгән. Икенсенән, сәйәхәтселәр үҙ күҙҙәре менән күргәндәрҙе генә ҡағыҙға теркәгәндәр, үҙ күҙәтеүҙәренән башҡа тикшеренеүселәрҙең яҙмалары менән сағыштырмағандар. Һөҙөмтәлә ярлы башҡорт тормошон күҙәтеүселәр уның ниндәй ауыр көн итеүен, аш-һыуының наҡыҫ, ябай, бер төрлө булыуы хаҡында яҙып ҡалдырғандар. Хәллерәктәргә тап булғандары иһә, һәүетемсә ҡунаҡ булып, уларҙың байрам аштары менән яҡындан танышҡандар, аш-һыуҙарының ярайһы уҡ төрлө һәм үҙенсәлекле булыуын билдәләгәндәр (мәҫәлән, В. Зефиров). Ә инде бай башҡорт ғаиләһендә туҡталғандар, ғарҡ булғанса туйынып, табындағы муллыҡҡа хайран ҡалғандар һәм шул күренеште ҡуйын дәфтәрҙәренә теркәгәндәр.

Шулай за ул язмалар, үззәренең төрлө ҡараштарзы сағылдырыуына ҡарамаҫтан, башҡорттарзың туҡланыу ризыҡтарының өс төргә бүленеүен асыҡлай:

1) һөт аштары;

2) ит аштары;

3) үҫемлек аштары.

Бөгөн дә күп кенә тикшеренеүселәр үззәренең хезмәттәрендә ошо дөрөҫ, әммә тар йүнәлештән сығып эш итә. Милли аш-һыу төрзәренең сиктәрен киңәйтеүсе С.И. Руденко була. Әйткәнебезсә, С.И.Руденко бар башҡорттарға хас булған йолаларзы, көнкүрешен һәм уның элементтарын, шул иҫәптән туҡланыу системаһын да, беренсе булып дөйөмләштереп тикшерә һәм монографик планда яҡтырта.

Ул башҡорттарзың аш-һыуға ҡағылышлы туҡланыу ризыҡтарының төп өс төргә (һөт, ит, үҫемлек) бүленеүен танып, уларзы бығаса ҡағызға теркәлмәгән яңы төркөмдәр, төркөмсәләр һәм элементтар менән байыта. Мәҫәлән, уға тиклемге хезмәттәрзә "үҫемлек ризыҡтары"н тик игендән әзерләнгән аш-һыузарға ҡайтарып ҡалдырһалар, С.И. Руденко башҡорттарзың туҡланыу рационында ҡыр үҫемлектәренең дә зур урын тотоуын билдәләп, уларға киң генә күзәтеү яһай. Ит ризыҡтарына ул, шулай уҡ, яңы төркөмсә - ҡыр йәнлектәре һәм ҡош-ҡорттарзан әзерләнгән аш-һыузарзы индерә. Йәнә балыҡсылыҡ һәм балыҡ аштары, татлы ризыҡтар, эсемлектәр тураһында ҡызыҡлы мәғлүмәттәр килтерә.

Әммә С.Руденконың башҡорт аш-һыузары тураһындағы күзәтеүзәре бөтә яҡлап ҡәнәғәтләндерерлек

кимәлдә түгел. Хәйер, тикшеренеүсе үз алдына был маҡсатты ҡуймаған да. Ул башҡорт халҡына дөйөм этник характеристика бирә, ә халыҡтың туҡланыу йолаһын, аш-һыу системаһын этнографик элемент булараҡ ҡына күзаллай. Шуға күрә бында байрам-йола аштары тураһында һүз юҡ, йәшелсә һәм унан әзерләнгән ашамлыҡтар телгә алынмай, ә башҡорттоң борон-борондан төп ҡәзерле ризыҡтарының береһе булған һәм бөгөнгө көнгәсә үзенең шифалы сифаттары менән донъяны хайран иткән бал тураһында аш-һыу бүлегендә бер ни әйтелмәй.

Күреүебезсә, башҡорт милли аш-һыуҙарына дөйөм күзәтеү үткәрелгән, әммә, тикшеренеү объекты булараҡ, уның төрҙәрен асыҡлау эше башҡарылмаған. Ә бит жанр тәбиғәтен төптән тикшергәндә (милли аш-һыуҙы шартлы рәүештә этнографик жанр тип ҡарарға мөмкин), уның төрҙәргә бүленеү мәсьәләһен, йәғни классификацияһын ситләтеп үтеп булмай. Сөнки билдәле фольклорсы һәм этнограф В.Я. Пропп әйтеүенсә, "материалға яҡындан килеү өсөн классификация төп шарт, нигеҙ булып тора"*[4. 147]*.

Жанрҙы эске төркөмдәргә айырыу ҡатмарлы мәсьәләләрҙең береһе. Бында иң ҡыйынлыҡ тыуҙырғаны - төркөмләү өсөн нигеҙ итеп алырҙай дөрөҫ принцип табыу. Классификация ентеклерәк булған һайын принциптарҙың да ишәйеүе ихтимал. Башҡорт аш-һыуҙарын ниндәй принциптарға таянып бүлергә мөмкин? Мәсьәләгә яҡыныраҡ киләйек.

Билдәле, һәр милли аш-һыу көндәлек һәм байрам-йола аштарына бүленә. Был, әлбиттә, башҡорт кухняһына

ла ҡағыла. Баштан уҡ шуны әйтергә кәрәк: халыҡтың көндәлек туҡланыу ризығы күп төрлөлөгө, әҙерләү процестарының ябайлығы менән айырыла. Байрам-йола аштары иһә үҙҙәренең тәғәйенләнеше, ризыҡтарының сифаты, әҙерләү процестарының ҡатмарлылығы менән үҙенсәлекле.

Һәр халыҡтың туҡланған ризыҡтары, ашы иң тәүҙә уның борондан килгән традицион кәсептәренә бәйле. Ә халыҡ кәсебе иһә туранан-тура ул йәшәгән төбәктең ландшафтына, тәбиғәт шарттарына барып тоташа. Башҡорт иле донъяның иң гүзәл, иң бай, йәшәү өсөн иң ҡулай урынында - Урал буйында урынлашҡан. Унда мәғрүр урмандар ҙа, киң далалар ҙа, шаулы йылғалар ҙа, тоноҡ күлдәр ҙә бихисап. Йәғни бында һәр төрлө кәсеп өсөн бөтә уңайлы шарттар бар. Башҡорттар быны оҫта файҙаланған. Үҙ кәсептәрен дә шул шарттарға ҡулайлаштырған: һунарсылыҡ иткән, солоҡ ҡараған, мал аҫраған, балыҡ тотҡан, емеш-еләк йыйған, һуңғараҡ ер һөрөп, иген иккән. Шулай итеп, халыҡтың йәшәйешен тәьмин иткән кәсептәр: малсылыҡ, игенселек, һунарсылыҡ, солоҡсолоҡ булған. Уларҙың төп ейгән ризыҡтары һәм аш-һыуҙары, йәғни туҡланыу системаһы тап ана шул дүрт мөһим кәсепкә бәйле формалашҡан. Уларҙы айырым ҡарап үтәйек.

## § 1. МАЛСЫЛЫҠ КӘСЕБЕНӘ БӘЙЛЕ АШ- ҺЫУҘАР

Малсылыҡ кәсебенә бәйле ризыҡтарҙы һәм уларҙан әҙерләнгән аш-һыуҙарҙы ике төргә бүлергә мөмкин: ит аштары, һөт аштары.

Ит азыҡтары. Башҡорттарзың борондан килгән төп традицион кәсебе - малсылыҡ. Беззең ҡан бабаларыбыз бигерәк тә йылҡы малын һәм ҡуй-һарыҡты үз иткән. Һыйыр малын башлыса һөт алыр өсөн аҫрағандар. Кешенең байлығы ла тап ана шул йылҡы һәм ҡуй һанына ҡарап баһаланған. Төрлө язма сығанаҡтарзан күренеүенсә, урта хәлле башҡорт 40-50 йылҡы, 100-200 һарыҡ тотҡан. Байзарзың иһә йылҡы көтөүе 300-500 баш, ә һарыҡтары 800-1000-гә барып еткән.

Йылҡы аҫрау ифрат файзалы кәсеп булған. Уның итен ашағандар, һөтөнән ҡымыз әзерләгәндәр, тиреһен эшкәртеп, төрлө һауыт-һаба яһағандар. Күсеп йөрөүсе халыҡ өсөн күн һауыттар ифрат уңайлы булған. Улар бәрелмәгән, ватылмаған, аҫып йөрөгәндә атҡа уңайһызлыҡ тыузырмаған.

Башҡорттарзың малсылыҡта йылҡыға өҫтөнлөк биреүенең сәбәбе йәнә ул малдың әрһез булыуында. Йылҡы йыл әйләнәһенә азыҡты үзенә үзе тапҡан: йәйгеһен иркен далала, йәшеллектә юшаһа, ҡышын тояҡтары менән ҡарзы тибеп, көззән ҡалған үлән менән туҡланған. Йәнә лә ат хужалыҡта алмаштырғыһыз транспорт сараһы булараҡ та ҡәзерләнгән. Күсмә халыҡ - ул һыбай йөрөүсе халыҡ. Менге өсөн ат иң ҡулайлы хайуан: йүгерек тә, талымһыз за, йыуаш та, тоғро ла. Шуға күрә һәр заманда ла башҡорт атын ҡәзерләгән. Атҡа булған мөнәсәбәт халыҡ ижадында ифрат зур урын алған. Унда ир-егет менән ат һәр саҡ йәнәш ҡуйыла, айырылғыһыз ике йән итеп һүрәтләнә. "Ҡайза ла ғына

бармай, низәр күрмәй ир-егеткәй менән ат башы", - тип юҡҡа ғына йырланмаған халыҡта.

Йылҡы итенең туҡлыҡлы булыуынан тыш, уның зур файзаһын, шифаһын, ҡиммәтле ризыҡтар әзерләү мөмкинселегенең күплеген башҡорттар бик борондан белгән. Шуға ла йылҡы итенән әзерләнгән аш-һыу халыҡта әлегәсә иң ҡәзерле һәм ҡиммәтле һанала.

Башҡорттарза йылҡы итенән әзерләнгән иң ҡәзерле азыҡ - бишбармаҡ. Ул шулай уҡ һарыҡ һәм һыйыр итенән дә бешерелә. Төрлө урында уны хәзер төрлөрәк бешерәләр, әммә төп әзерләү ысулы бер типтараҡ. В.А. Арнольдов XIX быуаттағы башҡорттарзың бишбармаҡ әзерләү процесын былa нисек тасуирлай: "Ит ашамлыҡтары әзерләүзе ғәмәлдә бер типҡа ҡайтарырға мөмкин: һөйәкле ит йәки йылҡы майы менән ите тултырылған эсәктәр ҡазанға һалына һәм бешерелә. Бешеп еткәс, улар ҡазандан алына. Эсәктәр ваҡ киҫәктәргә турала, ит һөйәгенән айырыла. Һуған турап һалына, борос ҡушыла, картуф һалына. Әгәр бешкән картуф булһа, ул да һалына. Быларзың өҫтөнә ҡуйы һурпа (һөзлөк) ҡойола. Ҡазандағы һөзөлгән һурпаға һалма һалына. Һалма былай эшләнә: йомарланған ҡамырзан бәләкәй киҫәктәр өзөп алына һәм йәлпәштерелә. Ҡамыр ҡулға йәбешмәһен өсөн хужабикә бармаҡтарын йыш ҡына онлап тора.

Һалма бешкәс, уны һөзөп алалар һәм әзерләнгән иткә ҡушалар. Ҡалған һурпаға ҡорот ҡушалар һәм уны ит менән һалманы ашап бөткәс, бәләкәй ағас кәсәләргә һалып бирәләр.

Ошо рәүешле әзерләнгән азыҡ түбәндәге тәртиптә ашала. Иң әүәл һөйәкле иттәр таратыла. Әгәр зә ғаилә зур булһа, йәки табында ҡунаҡтар ултырһа, һәр кем үзенә тейгән өлөштөң иң тәмлерәк ерен үзе янында ултырғандарға өләшә. Иң әүәл хужа башлай һәм ҡулы менән иң ҡәзерле ҡунаҡтың ауызына һала. Бынан һуң баяғы иттән һәм эсәктәрзән әзерләнгән, һөзлөк менән тәмләтелгән бишбармаҡ тип аталған азыҡ килтерелә. Быны ла иң әүәл хужа ашай башлай. Ауызына ҡапҡанын йотҡас, ҡунағын һыйлай һәм шунан һуң азыҡҡа ҡулдары менән башҡалар ынтыла. Ашау мәлендә хужа бер йоланы үтәй: хезмәтсеһен саҡырып ала ла, үзенең ҡәнәғәтлелеген белдереп, майлы итте услап уға һоғондора, маҡтау һүззәре әйтә. Шунан һуң хезмәтсе үзенең урынына китә һәм ҡунаҡтарзы тәрбиәләй. Артабан һалма бирелә. Уны ашап бөткәс, ҡоротланған һурпа таратыла. Артып ҡалған иттәр күстәнәскә өләшелә" (1. 520-521).

Башҡорттарзың бишбармаҡ әзерләүенә 1851 йылда В. Зефиров та шаһит була. Был күренеште бына ул нисек тасуирлай: "Бына киске аш та әзер булды. Самауырзы алғас та һис тотҡарлыҡһыз безгә таныш булған башҡорт ашы бишбармаҡты килтерзеләр. Был, белгегез килһә, ҡәзимге бешкән һарыҡ ите, һалма һалынған һәм һуған менән тәмләтелгән. Ябай ғына һымаҡ, тик шуны белегез: ниндәй тәм һәм рәхәтлек! Бигерәк тә хужа итте ваҡ ҡына итеп турап, ҡунағына хөрмәт күрһәтеү ниәте менән услап алып, һинең ауызыңа һалған саҡта! Мин был рәхәтлекте инде һүз менән аңлата алмайым. Аңға һыймаҫлыҡ ләззәт. Ҡунаҡҡа инде аз ғына тырышып, ҡабылғанды йоторға һәм

хайуанға шундай тәмле ризыҡ биргәне өсөн рәхмәт уҡырға ғына ҡала.

Был киске аш барышында ла шулай булды. Абдулла айырым тәрилкәгә итте тураны, уның өҫтөнә һалма һалды, һөзлөк ҡойзо һәм ашау башланды. Хужа һөйәкле итте өлөштәргә бүлде. Икеһен ике бисәһенә, икәүһен, башын күтәрмәй генә, исемләп ике улына һондо. Үзе бишенсеһенә тотондо. Шул минутта минең хәтергә Пушкиндың бер шиғыры иҫкә төштө һәм мин уны былайыраҡ тәржемә иттем:

Абдул ултырзы йөзөн баҫып,
Ауызында итле һөйәк борҡой ине.

Әйтәйек, ауызза итле һөйәк борҡомай, тотәмәй, әммә уҡыусы мин нимә әйтергә теләгәнемде аңлағандыр. Шуныһы еткән!" (20.6).

Бишбармаҡ бешереү ысулы бөгөнгө көндә лә шул уҡ формала һаҡланған. Бына, мәҫәлән, Хәйбулла районы Уфимский ҡасабаһында йәшәүсе Йомабикә Мырзабаеванан алынған мәғлүмәт: "Бишбармаҡ - халҡыбыззың иң боронғо милли ашы. Уны көн һайын бешермәгәндәр. Оло ҡунаҡ йыйғанда инде табын бишбармаҡһыз булмаған. Бишбармаҡты, ғәзәттә, йылҡы итенән бешерәләр. Әммә һарыҡ ите лә, һыйыр ите лә ҡулланыла. Бешереп алынған итте бер ҡабым зурлығында турап, өҫтөнә һурпа һөзлөгө ҡойоп, йылы урынға ҡуялар. Ит бешкән һурпаның бер өлөшөн азаҡ ҡоротлап биреү өсөн бүлеп ҡойоп алалар. Ҡоротлап бирелгән һурпаға борос, һуған һалырға мөмкин. Һимез һурпа яратҡандарға алдан уҡ һөзөп алынған

һөзлөктө өҫтәйҙәр. Ҡыш көнө ундай һөзлөк бик файҙалы, ул өшөтмәй.

Һалманы башҡорттар ваҡ итеп, дүрткелләп ҡырҡа. Ҙурлығы 1 $см^2$ самаһы була. Эрерәк ҡырҡҡандар ҙа бар. Һалманы һурпала бешерәләр. Ҡоротлап бирелгән һурпала һалма тәме сығырға тейеш түгел. Һалма бешкәс, һөҙөп алып, өҫтөнә һөҙлөк ҡойоп, йылы урынға ултырталар. Өҫтәлгә биргән саҡта һалманы ите менән бергә һалып бирәләр. Борон башҡорттар һалма аҫтына һимеҙерәк ит йәки ҡаҙылыҡ һалып, ҡул менән һоғондорғандар. Хәҙер инде һалма менән итте матурлап һалып, өҫтөнә һуған һәм башҡа тәмләткес үләндәр менән биҙәйҙәр. Бишбармаҡҡа бер ваҡытта ла картуф йәки кишер һалмайҙар. Бишбармаҡ ул боронғо аш, картуфты белгәнгә тиклем бешергәндәр уны. Һуған йәки башҡа тәмләткестәр менән биҙәү аштың үҙенсәлеген үҙгәртмәй. Ә картуф йәки кишер һалыу бишбармаҡ ашының үҙенсәлеген боҙа. Милли аш әҙерләгән саҡта уның төп үҙенсәлеген һәр саҡ һаҡларға кәрәк".

Күреүебеҙсә, бишбармаҡ халҡыбыҙҙың борондан килгән традицион милли ашы. Уның үҙенсәлекле бешерелеү ысулы бөгөнгө көнгә тиклем тотороҡло һаҡланған. Бишбармаҡ - ҡунаҡ ашы. Башҡорттарҙа иң ҡәҙерле кешеләргә әҙерләнә торған йәнә бер ашамлыҡ бар - ул <u>ҡаҙы йәки ҡаҙылыҡ</u>. Ул да бик борондан килгән ҡәҙерле һый - хөрмәт ризығы. Был ашамлыҡ тик йылҡы итенән һәм эс майынан әҙерләнә. Ҡаҙы һәм уны әҙерләү ысулы тураһында ла үткән быуаттан ҡалған яҙмалар бар. Уның тураһында П.С. Назаров, мәҫәлән, бына ниндәй мәғлүмәт бирә (мәғәнәһен боҙмаҫ өсөн уны оригиналда

бирәбез): "Самым лакомым и почетным куском здесь является так называемая кобылья колбаса, по вкусу напоминающая свинину; она изготавливается так: кишки начиняются кобыльим жиром, предварительно просоленным, затем в кишку пропускаются мелко нарезанные куски мяса, и колбаса коптится. В таком виде ею запасаются на зиму, а летом она хорошо сохраняется" (15. 185).

П.С. Назаров язып ҡалдырған был мәғлүмәт ғәмәлдә дөрөҫ. Эйе, ҡазы ул йылҡының эсәккә тултырылған һәм ҡаҡланған эс майы. Әммә П. Назаров уны әҙерләүҙең үҙе күргән бер ысулын ғына яҙа. Ә ҡазы әҙерләүҙең йәнә бер нисә тәртибе бар. Мәҫәлән, <u>ҡабырғалы ҡазы</u> йәки <u>ҡаҙылыҡ</u> эс майынан түгел, ә майлы ҡабырға итенән яһала. Ҡабырғаның һимеҙ еренән оҙон киҫәктәр телеп алына, тоҙланыла һәм эсәккә тултырыла. Эсәктең ике яғы ла еп менән бәйләнә һәм шул килеш ҡояшҡа эленә, ай самаһы киптерелә. Былдай ныҡ ҡаҡланған ҡазыны оҙаҡ һаҡларға һәм аҙаҡ сей килеш тә ашарға мөмкин булған. Ҡаҡланған ҡабырғалы ҡазы боронғо замандарҙа оҙайлы юлға сыҡҡандарҙың, бигерәк тә яугирҙәрҙең алыштырғыһыҙ азығы булған.

Ҡазының икенсе төрө тик эс майынан ғына яһала. Ул инде ҡаҙылыҡ тип йөрөтөлмәгән.

Ҡазы әҙерләүҙең традицион ысулы бөгөнгө көндәрҙә ҡайһы бер төбәктәрҙә үҙгәреш кисергән. Үҙәренең яғында ҡазы әҙерләү ысулы тураһында бына ниндәй мәғлүмәт бирҙе Әлшәй районы Раевка ҡасабаһында йәшәүсе Рузилә Зиннур ҡыҙы Ҡотлогилдина: "Ҡаҙылыҡ өсөн һимеҙ һум ите

(йылҡы ите булһа, бигерәк тә һәйбәт) алына. Итте ваҡлап турағыз за тоз, борос һибеп, улар һеңһен өсөн яҡшылап аралаштырығыз. Итте эмаль кәстрүлгә һалып бер тәүлеккә һалҡынға ҡуйып тороғоз. Ҡазылыҡ өсөн алынған эсәкте яҡшылап йыуығыз за бер яҡ башын бәйләгеҙ. Әзер ит менән эсәкте тултырығыз. Тултырғанда ҡара ит менән майлы ит киҫәген йәки ит майын аралаштырып һалығыз. Шуны иҫәпкә алырға кәрәк: эсәккә тултырылған иттең майы 30% тәшкил итергә тейеш. Итте тултырғас, эсәктең башын нығ итеп бәйләгез ҙә 2-3 айға һалҡын ҡараңғы урынға элеп ҡуйығыз. Әгәр тултырылған ит ныҡ майлы булһа, артыҡ майы ағып сыҡһын өсөн бер нисә урындан тишегез.

Әзер ҡазылыҡты әкрен генә ҡайнатып бешерегез. Ҡайнап сығыуға бер нисә урындан тишегез. Бешкән ҡазылыҡты эҫе көйө лә, һалҡын сағында ла ашарға мөмкин. Уны иң ҡәзерле ҡунаҡтар өсөн һаҡлайзар".

Йәнә лә бер ҡәзерле ҡунаҡ ашы - <u>тултырма</u>. Ул, ғәзәттә, мал һуйған көндә әзерләнә һәм һуғым ашының бер мөһим компоненты булып тора. Һуғым ашына килгән һәр кемгә унан өлөш бүленә.

Тултырманы әзерләүзең традицион ысулы түбәндәгесә: малдың үпкә-бауырын, йөрәген эшкәрткәс, ит турағыстан үткәреп йәки ваҡ ҡына турап, һуған, һарымһаҡ, ҡара борос ҡушып, йомортҡа һытып ҡатнаштыралар за, һурпа өҫтәп, бойзай йәки дөгө ярмаһы һалып, (элегерәк ярма ҡулланылмаған), эсәккә тултыралар. Эсәктең осон нығ итеп бәйләйзәр. Ләкин ҡатнашма тығыз итеп тултырылмай. Дөгөнөң бешкәндә

бүртеүен иҫәпкә алып, фаршты бушағыраҡ итеп тығалар. Ҡайнап бүртә башлағас, сәнске осо менән тишеп, һауаһын сығараһың. Тултырманы ҡазандан ит бешеп етерзән саҡ ҡына алдараҡ алаһың.

Ҡайһы бер урындарза тултырманы эс-бауырзан түгел, ә иттән һәм ярманан ғына ла яһайзар. Бына ниндәй рецепт тәҡдим итте безгә Раевка ҡасабаһында йәшәүсе үрзә атап кителгән информатор Рузилә Ҡотлогилдина: тултырма өсөн 1 кг ит, 150 г дөгө, 3-4 баш һуған, 1/2 стакан һыу, самалап тоз, борос алына. Йылҡы итен сапҡылап ваҡлағыз. Уға туралған һуған, йыуып һарҡытылған дөгө, тоз, борос, йылы һыу һалып болғатығыз. Әзер фаршты эсәккә тултырығыз. Ҡайнап торған ҡазанға һалып, талғын утта бешерегез. Эсәк ярылмаһын өсөн, бер-ике урындан тишегез. Фарш өсөн дөгөнө айырып бешереп тә ҡушырға мөмкин.

Тултырма әзерләүзең, күрәһең, озайлы тарихы бар. Ул башҡорттарза ғына түгел, башҡа төрки халыҡтарза ла осрай. Этнографтар С.Н. Шитова менән Р.Ғ. Ғәзелгәрәева уның таралыу ареалын тикшергәндәр һәм тултырма кеүек ашамлыҡтың татарзарзың (тултырма), сыуаштарзың (тултырмаш), мордва һәм марийзарзың туҡланыу рационында ҡулланылыуын язалар. Тултырманың элегерәк үзбәктәрзә, ҡырғыззарза, ҡазаҡтарҙа булғанлығын иҫәпкә алып, улар был ашамлыҡтың тамырзары Урта Азия мәзәниәтенә барып тоташа, тигән фекер әйтәләр. Әлбиттә, бының менән тулыһынса килешеп булмай, әммә бәхәсләшергә лә урын юҡ. Шуны ғына онотмаҫҡа кәрәк: тултырма - һис һүзһез малсылыҡ менән шөғөлләнеүселәр

ризығы һәм төп кәсебе шул булған башҡорттар өсөн ул милли ашамлыҡ, хөрмәтле ҡунаҡ ризығы.

Күреүебезсә, башҡорттарзың иң ҡәзерле, иң тәмле деликатес азыҡтары - ҡазы,тултырма - эсәктәргә тултырып әзерләнә. Шуға күрә эсәктәрзе ташларға ашыҡмағандар. Артабан да файзаланыу маҡсатында уларзы йыуғандар, эҫе һыу менән бешекләгәндәр һәм тозлап, ҡояшҡа элгәндәр. Кипкән эсәкте кәрәк саҡта бер нисә көн һыуза тотоп ебеткәндәр, шунда ул элекке һығылмалы формаһын алған. Яңы алынған, кипкән йәки ебетелгән эсәктәрзән бәләкәй бәлештәр (бөкөрөй, самбуса) бешергәндәр.

Эре малдың (бигерәк тә йылҡының) туҡ эсәге (йыуан эсәге) лә туҡлыҡлы, ҡәзерле ризыҡтарзан һаналған. Майлы яғы эскә әйләндерелгән, етди эшкәртелгән туҡ эсәк халыҡта "ҡарта" тип атап йөрөтөлә. Һаҡлау өсөн ҡартаны ла ҡояшта ҡаҡлағандар. Ҡунаҡ килгәндә уны аш менән ҡазанда бешергәндәр, табындарға киҫәкләп өләшеп биргәндәр.

Һуғым һуйғанда, йола буйынса, йәнә ҡурзаҡ әзерләнә. Исеменән аңлашылыуынса, "ҡурыу" - ул эс майында ҡурылған эсәк-бауыр. Ҡурзаҡ мал һуйылғас та, ит бешкәнсә үк, эсәк-ҡарын эшкәртеүселәргә, һуйыусыларға хөрмәт күрһәтеү йәһәтенән әзерләнә. Өҫтәлгә эҫе килеш бирелә.

Башҡорттарза "йүрмә" тип йөрөтөлгән тағы ла бер байрам ашамлығы бар. Ул бигерәк тә Ҡурған башҡорттарында киң таралған. Әзерләү ысулы ҡатмарлы түгел: таҫма һымаҡ итеп теленгән озонса ит киҫәген эс

майы менән төргәндәр һәм улар таралмаһын өсөн тыштан ас эсәк менән уратып сыҡҡандар. Был ашамлыҡ үзенең формаһы менән генә түгел, ә үзенсәлекле тәме менән дә айырылып, табынға өҫтәмә йәм биргән. Йүрмәнең борондан килгән традицион ашамлыҡ булыуын уға бәйле тыуған мәҡәл дә раҫлап тора: "Йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә". Йөрөгән, хәрәкәт иткән кеше йәшәргә йүн таба, тигәнде аңлатҡан был мәҡәл ни ҡәҙәр борондан килһә, уға бәйле ашамлыҡ, йәғни йүрмә, тағы ла боронғораҡ булып сыға.

Башҡорттарза боронғо ит аштарының береһе махан тип аталған. Уның тураһында XIX быуаттан ҡалған мәғлүмәттәр бар. П.К. Назаров, мәҫәлән, бына низәр яза: "Я нарочно не говорил до сих пор о двух национальных блюдах - махан и бишбармак, так как, будучи мясными, они готовятся только в особенных случаях, а именно: в праздники и при приезде почетных гостей; притом, сама церемония, которой они сопровождаются, заслуживает того, чтобы поговорить о ней отдельно.

"Махан", по-русски - просто мясо, готовится так: незадолго перед едой режется баран, из него вынимаются легкие, кишки, желчный и мочевой пузыри, testicnuli, и, затем, разрезав его на более мелкие куски, варят в продолжении нескольких часов. Будет ли этот праздник или приезд почитаемого гостя, башкир никогда не будет есть махан один; он приглашает первым долгом муллу, а затем и других уважаемых лиц, и горе тому, кто обойдет кого-нибудь приглашением: этим он сделает обиженного заклятым врагом своим; бывали, и не так давно, случаи кровной мести за подобное оскорбление.

Когда мясо сварится, пол в кибитке устилается кошмами, для гостей кладутся подушки, каждому по одной, а самому почетному, место которому назначается напротив двери, дается две. Сначала все сидят поодаль центра, куда подадут махан и где разостлана скатерть. Скоро приходит хозяин с тазом, кумганом с водой и полотенцем и, начиная справа, подает каждому умывать руки. Обойдя всех, он приглашает продвинуться к центру. Гости, совершив краткую молитву, садятся в тесный круг, а остальное место в кибитке предоставляется публике, в которой на этой случай недостатка не бывает. Наконец подается и самый махан в большой деревянной чашке, по краям которой насыпана соль кучками - по числу гостей. Кто-нибудь из присутствующих берет нож и начинает резать мясо, причем, если кто-нибудь уселся в круг из незваных гостей, то нож берется у него, а потом возвращается ему с воткнутым куском мяса, - это считается величайшим стыдом.

Во время резания мяса хозяин или кто-нибудь из присутствующих - это безразлично, предлагает почетному гостю грудинку. Верхом невежества было бы, если бы гость сразу приступил к еде: он должен сначала дать по кусочку двоим рядом с ним сидящим, а затем следующим двоим. То же самое повторяется с другим лакомым кусочком - печенью с жиром. С этого момента начинается пиршество: каждый берет себе любой кусок и ест его, причем лучшую часть последнего кладет в рот гостю, или тому, кому пожелает. А режущий мясо то и дело раскрывает рот, куда ему кладутся куски. Время от

времени кто-нибудь из присутствующих подманивает пальцем кого-нибудь из своих знакомых, и тот, через тесное кольцо гостей, опираясь на руки сидящих в кругу, и при слове "сугун" открывает рот, куда ему вкладывается горсть или целая пригоршня мяса. Сам хозяин либо стоит около двери, либо хлопочет по хозяйству. Его время от времени также приглашают на сугун. Наконец, мясо съели, чашку убрали. Хозяин подает крайнему чашку с бульоном. Отхлебнувший нескольких раз, передает чашу соседу, таким образом, она обходит весь круг, до тех пор, пока в ней не останется ни капли; тогда подается другая чашка, и так до тех пор, пока не выпьют всего бульона. Затем приходит хозяин и вновь обносит гостей кумганом с горячей водой, которой полощут рот и моют руки. Затем выносится тапан (большая посудина), и гостям предлагается по чашке кумыса (15. 182-183).

Махан тураһында үз язмаларында рус языусыһы Д.М. Мамин-Сибиряк та телгә ала: "Джаик украдет лошадь и устроит пир для всех. Хорошо поесть горячего махана (вареное лошадиное мясо), салмы (лапши с лошадиным мясом) и бишбармак (вареное лошадиное мясо с клецками).

... Лошадиное мясо было сварено в двух котлах. Это и был махан. Вместо десерта были поданы лошадиные кишки, начиненные лошадиным жиром. Последнее лакомство могли есть только одни башкиры, потому что оно напоминало колбасу из гуттаперчивого пожарного рукава" (12. 158).

Был язмалар боронғо милли ашыбыз махан һәм уны әҙерләү ысулы менән таныштырып ҡына ҡалмай, ә

башҡорттарзың боронғо һыйланыу йолаһы, туҡланыу тәртибе, табын этикеты тураһында ҡиммәтле этнографик мәғлүмәттәр биреүе менән дә әһәмиәтле. Махан, башҡа ҡунаҡ аштары кеүек, туған-тыумаса, дуҫ-иштәр менән аралашыу, яҡынайыу, йола һаҡлау ысулы ла булған. Быndай табындарға халыҡ ашау өсөн генә түгел, ә һөйләшеү, кәңәшләшеү, күңел асыу өсөн дә йыйылған. Шулай итеп, ҡунаҡ аштары ла этнос тормошонда әһәмиәтле роль уйнаған.

Үрзә әйтелгәндәр барыһы ла ҡунаҡ аштары тураһында булды. Ит ҡушып бешерелгән көндәлек аш-һыузар за бихисап. Шуларзың ҡайһы берзәренә, тик башҡорттарға ғына хас булғандарына туҡталып китәйек.

<u>Боламыҡ</u> - элегерәк башҡорттарзың иң популяр азыҡтарының береһе булған. "Самым распространенным мясным кушанием основной массы башкир был боламыҡ - жидкий заправленный мукой отвар мяса с накрошенным в него сыром (ҡорот)", - тип яза был ашамлыҡ тураһында С.И. Руденко (19. 31-32).

Беззеңсә, боламыҡ ул - ҡорот менән тәмләтелгән, он менән ҡуйыртылған итле һурпа. Күрәһең, ул әзерләү ысулының ябайлығы, туҡлыҡлығы менән хужабикәләр иғтибарын үзенә тартҡандыр.

<u>Туҡмас</u> - бөтә төбәктәрзә лә киң таралған ашамлыҡ. Ул төрлөсә әзерләнә, шулай за һарыҡ итенә өҫтөнлөк бирелә. Ит киҫәктәре талғын утта бешеп сыҡҡас, йыйып алына һәм йылы урынға ҡуйыла. Бишбармаҡ һалмаһынан айырмалы рәүештә, туҡмас һалмаһы 5-6 см самаһындағы йоҡа таҫмалар рәүешендә киҫелә. Һалма һалыр алдынан

һурпала бер аз кишер, картуф бешерелә. Һалма һалынғас, туралған һуған, тәмләткестәр өҫтәлә. Аш әҙер булғас, ит турала һәм табынға һалмаһы, һурпаһы, ите менән бергә бирелә.

Айырым төбәктәрҙә, мәҫәлән, Ишембай, Стәрлебаш райондарында, "өс таған" бешерелә. Ул былай әҙерләнә: таҙартылған, йыуылған ҡош итен талғын утта бешерәләр. Ит бешкәнсе сөсө ҡамырҙан һалма әҙерләнә. Уны тоҙ һалынған һыуҙа айырым бешереп алалар. Итле һурпала эре килеш картуф, кишер бешерелә. Барыһы ла бешеп сыҡҡас, тәрилкәгә иң әүәл һалма, шунан ит һалына, сеүәтә тирәләй картуф, кишер киҫәктәре ҡуйыла, һуған һалына. Быларҙың өҫтөнә эҫе һурпа ҡуйыла.

Был ашамлыҡты элегерәк өс таған өҫтөнә ултыртылған суйын ҡаҙанда бешергәндәр. Исеме, күрәһең, шунан киткән.

Иттән һәм эсәк-ҡарындан йәнә төрлө бәлештәр (самбуса, сумса, ҡыҫтыбый һ.б.) әҙерләнгән һәм әле лә улар башҡорттарҙың көндәлек туҡланыу рационында ярайһы ҙур урын алып тора. Улар тураһында һүҙ алдараҡ булыр.

Тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, ит аҙыҡтары башҡорттарҙың төп туҡланыу ризығы булған, йәғни башҡорт итһеҙ көн итмәгән. Ит ҡунаҡ табынының иң түрендә булған.

ҺӨТ АҘЫҠТАРЫ. Борон-борондан малсылыҡ менән кәсеп иткән башҡорт халҡы һыйыр малын башлыса һөт аҙыҡтары әҙерләү өсөн тотҡан. Һыйырҙы башҡорттар бик

борон замандарза уҡ ҡулға эйәләштергән. Был турала иң тәүге Кешелек донъяһы тормошон сағылдырған "Урал батыр" эпосында ла әйтеп үтелә. Урал үзе менән көрәшкә сыҡҡан үгеҙгә былай ти:

Мин дә әрәм итергә,
Үгеҙ, һине тырышмам,
Яфаланып, көс түгеп,
Һинең менән сайҡашмам.
Донъяла һин кешенән
Көслө юғын танырһың, -
Үҙең түгел, тоҡомоң менән
Кешегә ҡол булырһың!

Әгәр "Урал батыр" эпосы бынан 2000-4000 мең йыл элек тыуған тип ҡарайбыз икән, тимәк, халҡыбыҙҙың һыйыр малы менән дуҫлашыуы ана шул алыҫ заман төпкөлөнә ҡайтып ҡала. Шул дәүерҙәрҙән алып башҡорт халҡы өсөн һыйыр төп йәшәү сығанаҡтарының береһенә әүерелгән. Бөгөнгәсә ул йорттағы иң ҡәҙерле, иң хөрмәтле мал булып һанала. Уның һөтөнән организмға кәрәкле тиҫтәләгән ризыҡтар әҙерләнгән. Шуға күрә халыҡ һыйыр һөтөн ҡәҙерләп һәм хөрмәтләп, унан әҙерләнгән бар ризыҡтарҙы ла бер дөйөм исем менән "Аҡ" тип йөрөткән. Аҡ - ул сафлыҡ, паклыҡ, яҡтылыҡ, яҡшылыҡ символы. Шуға күрә һәр бер юлға сығыусыны аҡ (һөт, ҡатыҡ,ҡымыҙ. айран) эсереп озатҡандар, юлдан ҡайтҡандарҙы аҡ һоноп ҡаршы алғандар. Ул йола бөгөн дә һаҡлана. Мәҫәлән, республикабыҙҙың көньяҡ-көнсығыш райондарында егеттәрҙе әрмегә озатҡанда аҡ эсерәләр һәм

икмәк тешләтәләр. "Барған юлың яҡты, ниәтең яҡшы, тамағың туҡ" булһын, тигән мәғәнә һалынған был йолаға.

Башҡорттарҙа һөттән ниндәй милли ризыҡтар әҙерләнә һуң? Шуларҙы барлап үтәйек. Әйтергә кәрәк, был ашамлыҡтар туҡлыҡлы ла, витаминдарға ла бик бай.

Ҡатыҡ - башҡорттарҙың һәр урында ла киң файҙаланылған һәм яратып ҡабул ителгән хөрмәтле ризығы. Ул былай әҙерләнә: һөттө талғын утта ҡайнатаһың. Ҡайнап сыҡҡас, һыуытырға ҡуяһың. Яңы һауған һөт кимәленә еткәс, ойотҡо (алдараҡ әҙерләнгән, әсеп барған ҡатыҡ өлөшө, 1-2 стакан самаһы) һалаһың да йылы ергә ултыртаһың. Ойоп сыҡҡас та, өҫкә ҡалҡҡан һыуын ала биреп, һалҡынға (иң яҡшыһы баҙға) ҡуяһың. Шул саҡта ҡатыҡ бауырланып тора, тәме лә үҙенсәлекле була. Ҡар баҙы, йәғни ҡара тупраҡ артыҡ еҫтәрҙе һурып ала, татлы ер еҫе индерә. Ундай ҡатыҡтың эркете лә ҡуйы, ҡорото ла йомшаҡ һәм тәмле була.

Ҡатыҡ - көндәлек ризыҡ. Уны оҙаҡ һаҡлап булмай, 2-3 көндән ул әсей, күбей башлай. Әммә был күренеш ризыҡтың юҡҡа сығыуын аңлатмай. Аҡыллы башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары әсегән ҡатыҡты бер һауытҡа (мискәгә) йыйып, тағы ла бер нисә көн әсетеп, эркет яһағандар. Күпереп әсегән ҡатыҡ (эркет) йәнә бер ҡәҙерле һәм ҡиммәтле ризыҡ - ҡорот яһау өсөн ҡулланылған. Ул былай әҙерләнгән: эркетте талғын ғына утта ҡайнаталар. Ҡайнатҡан саҡта оҙон һаплы ижау менән өҙлөкһөҙ һапырып, төйөрөн яҙып, ташып китергә юл ҡуймай торорға кәрәк. Ҡапыл ҡайнатырға ярамай, эреп китеүе ихтимал. Ул саҡта ҡорот килеп сыҡмай. Даими рәүештә

һапырып, төйөрһөз генә ҡайнатып алғандан һуң, һыуытырға ултыртаһың һәм һыуынып сыҡҡас, киндер йәки таҫтамалдан тегелгән тоҡҡа ауҙараһың. Тоҡто ылашҡа элеп ҡуяһың. Эркет һарҡа башлай, йәғни тамсылап аға. Тоҡсай аша аҡҡан ҡорот һыуы "эркет һыуы" тип атала. Элек-электән башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары эркет һыуы менән сәс йыуғандар. Шуғалыр ҙа уларҙың сәс толомдары оҙон, ҡуйы булып, ҡояшта йылҡылдап торған.

Ике көн һарҡҡас, ҡоротто тоҡтан алып, ҙур табаҡҡа ауҙараһың да ҡамыр һымаҡ итеп баҫаһың. Оҙаҡ һаҡларға, ашҡа һалырға кәрәк булһа, тоҙ һалаһың. Тартылған муйыл, кипкән ҡарағат ҡушып сәйгә ҡуйырға ла әҙерләп була. Баҫҡас, йомғаҡҡа әүәләйһең дә ылашҡа һалып киптерәһең. Ҡайһы бер яҡ башҡорттары ҡоротто эҫе мейескә ултыртып киптерә. Улай итһәң ҡорот ҡаты була, таты ла китә. Еләҫ урында, өҫтөнә марля.ябып киптерәһең, ҡорот үҙ тәмен, йәмен юғалтмай (информатор С. Әйүпова ауыҙынан).

Ҡайһы бер төбәктәрҙә <u>ҡыҙыл ҡорот</u> әҙерләнә. Аҡһымға, минераль тоҙҙарға бай был ризыҡты түбәндәгесә әҙерләйҙәр: яңы һөткә әсегәнен ҡушып талғын утта ҡайнатаһың. Аҡ ҡороттан айырмаһы шунда: уны һарҡытмайһың, ә даими рәүештә болғап тороп, һыуы парға әйләнеп бөткәнсе ҡайнатаһың. Шул саҡта ҡорот ҡыҙыл төҫкә инә. Уға аҙ ғына шәкәр ҡомо һибеп, йәки бал ҡушып, сәй янына бирәләр.

Ҡорот әҙерләү, уның файҙаһы хаҡында үткән быуаттарҙан ҡалған мәғлүмәттәр бихисап. Мәҫәлән, Д.П. Никольский үрҙә күҙһәтелгән ҡорот яһау ысулын

һүрәтләүзән тыш, өҫтәмә рәүештә түбәндәгеләрзе яза: "Ҡорот - род сыра, одно из достоинств которого - способность долго сохраняться... Можно выделить несколько видов корота: жидкий, густой и сухой, пресноватый и острый. Если его готовили из свежей сюзьмы или катыка (2-3-х дневного), то корот получался пресноватым, а если из 5-7-дневного катыка, тогда острый. Из полученной густой массы формировали небольшие (10-12 см в диаметре) колобки; иногда им придавали уплощенную форму. Сырки складывали на особый помост (ылаш, тәшкә) для просушки... Иногда ылаш устанавливался над очагом и сырки слегка коптились..." (14. 67). П. Паллас та ҡорот тураһында "в дыму засушенный сыр" тигән мәғлүмәт бирә (16. 650).

Ҡоротто һаҡлау өсөн талдан сыт үргәндәр, муйылдан тубал (кәрзинкә) яһағандар. Уны шулай уҡ ҡайын тузынан яһалған һәм бер нисә урындан тишелгән тырызда ла һаҡлағандар. Уны ни өсөн шулай ҡәзерләгәндәр һуң? Сөнки ҡышын, иң ауыр мәлдә, ҡорот башҡорттарға икмәк хезмәтен үтәгән. Бынан тыш, халыҡ уның дауалау сифаттарын яҡшы белгән: һыуыҡ тейгәндә ҡорот тирләтеү сараһы булараҡ ҡулланылған, күңел болғаныузы, эс китеүзе баҫҡан, йылан тешләгәндә ағыу көсөн юҡҡа сығарған, ҡорот күге менән яраларзы һәм шешектәрзе эшкәрткәндәр. Ғөмүмән алғанда, ул медициналағы билдәле дарыу - аспирин хезмәтен үтәгән.

Файзалы һәм туҡлыҡлы, озаҡ һаҡлана торған был ризыҡ озайлы юлдарза һәм яузарза йөрөгән башҡорт

халҡы өсөн, ҡаҡланған ит, ҡаҙы һымаҡ, баһалап бөткөһөҙ ризыҡ булған. Ҡыҙғаныста ҡаршы, бөгөн уны бар ерҙә лә яһамайҙар, яһағандарын да тик аш тәмләткес булараҡ ҡына ҡулланалар. Ә бит ҡайнар һыуҙа иҙелгән, май, тоҙ, борос ҡушылған ҡорот бөгөн дә күп химик дарыуҙарҙан өҫтөнөрәк һәм ул барлыҡ сихәттәргә дауа. Тимәк, башҡорттоң ҡорот яһау оҫталығын ҡайтанан тергеҙергә кәрәк.

Һөттән әҙерләнгән аҡ аҙыҡтарҙың береһе - <u>һөҙмә.</u> Уны әҙерләү ысулы тураһында беҙгә Хәйбулла районының Подольск ауылында йәшәүсе Мәмбәтова Шәһизә Ғәли ҡыҙы бына ниндәй мәғлүмәттәр бирҙе: "Һөҙмә - ул һыуы һарҡытылған ҡуйы ҡатыҡ. Әсе ҡатыҡтан әсе һөҙмә, сөсө ҡатыҡтан сөсө һөҙмә килеп сыға. Ҡатыҡты киҙе-мамыҡ йәки бер нисәгә ҡатланған марля тоҡҡа һалып, 24-30 сәғәткә һалҡынса урынға һарҡытырға аҫып ҡуялар. Бер литр ҡатыҡҡа 1 аш ҡалағы тоҙ өҫтәргә мөмкин. Һөҙмәне ҡаймаҡ менән туғып ашайҙар, сәй янына ултыртҡанда варенье, бал өҫтәргә мөмкин".

Ҡатыҡҡа оҡшаш йәнә бер һөт ризығы бар - ул <u>ойотҡан</u>. Был исем менән йәш, сөсө ҡатыҡты атайҙар. Ул былай әҙерләнә: яңы һауылған һөткә бер сынаяҡ самаһы ойотҡо, ҡаймаҡ һалып, өҫтө асыҡ килеш йылы урынға бер тәүлеккә ойоторға ҡуялар. Аҙаҡ уны шул килеш эсергә йәки еләк, бешкән ҡыҙыл сөгөлдөр өҫтәп, ҡаймаҡ туғып ашарға мөмкин.

<u>Аҡ эремсек</u> яһау тураһында Хәйбулла районы Уфимск ауылында йәшәүсе Күскилдина Мәзинә Миңнулла ҡыҙы түбәндәге мәғлүмәт бирҙе: "Эремсекте айыртылған,

ҡаймағы бер аз алынған йәки бөтөнләй алынмаған һөттән әзерләргә була. Айыртылған һөттән әзерләү файзалыраҡ, сөнки һөттән бер үк ваҡытта эремсек тә, ҡаймаҡ та алырға мөмкин.

Юғары сифатлы һәм тиз бозолмай торған эремсек алыр өсөн, әсетер алдынан һөттө пастеризацияларға, йәғни кәстрүлдә ҡайнап торған һыуға һөттө һауыты менән ултыртып, 75-85 градусҡа тиклем йылытырға кәрәк. Пастеризацияланған һөттө йәй көнө +30-32 градусҡа, ҡышын +35-37 градусҡа тиклем еткерәләр һәм ойотҡо һалалар (бер көн алда әсетелгән һөттө һалһаң да була), ойотҡос һөттөң 3-5% кимәлендә була. Ойотҡос һалынған һөттө йылы урынға ҡуялар. Әзер ойотҡан ярайһы уҡ тығыз һәм шыма булырға, һыуы өҫтөнә сығып тормаҫҡа тейеш. Ойотҡандың әзерлеген түбәндәгесә белергә була: һауытҡа аш ҡалағын тура тығып бер аз ойотҡан алалар. Эремсек яһарға яраҡлы булып әсеһә, ойотҡан тигез кителергә, кителгән урыны ялтырап торорға, унан сыҡҡан һыу үтә күренмәле һәм йәшкелт булырға тейеш. Шуны иҫтә тоторға кәрәк: әсеп етмәгән һөттән эремсек бик аз сыға һәм ярма һымаҡ, артыҡ әсегән һөттән яһалған эремсек әсе һәм ҡоро була.

Ойотҡандың өҫкө ҡатлауын һәм күбек ҡалдыҡтарын йыйып алалар. Һуңынан, ойотҡанды зур ағас ҡалаҡ менән һаҡ ҡына алып, ҡат-ҡат итеп икенсе һауытҡа һалалар. Ул һауытты ҡайнар һыулы икенсе һауытҡа ултырталар. Һыуҙың йылылығын +50-55 градустан төшөрмәй, +60 градустан арттырмай тоталар. Ойотҡан тигез йылыһын өсөн уны һаҡлыҡ менән генә болғатырға кәрәк.

Ойотҡандың температураһы +40 градусҡа еткәс, 2-3 минут тоторға ла һауытты һыу эсенән алырға.

Һыуын ағызыу өсөн бешерелгән эремсекте тишекле сүмескә йәки тимер селтәргә бушаталар. Һыуы ағып бөткәс, эремсек әзер була."

Аҡ эремсек яһауҙың ябайыраҡ ысулы ла бар. Әсегән йәки яңы һөткә аз ғына ҡатыҡ һалып ҡайнаталар. Ҡайнау процесында һөттән эркет һыуы һәм һөт төйөрсөктәре - эремсек барлыҡҡа килә. Ҡатнашманы сепрәк тоҡҡа һалып һарҡыталар йәки тишекле иҗау менән һөҙөп алалар.

Аҡ эремсектән тыш башҡорттар элек-электән <u>ҡыҙыл эремсек</u> әҙерләгән. Ҡыҙыл эремсек эшләр өсөн иң тәүҙә аҡ эремсек эреткәндәр. Бының өсөн айыртылған һөттө ҡайнаталар, ҡайнап ултырған һөткә ҡатыҡ, аш содаһы (10 литр һөткә 1 литр ҡатыҡ, 1 балғалаҡ аш содаһы) һалаһың. Талғын утта ҡайнатаһың. Эремсек барлыҡҡа килгәс, уттан алмайынса, ҡайнап ултырған килеш 1 стакан шәкәр ҡомо, 150 гр аҡ май һалып, талғын ғына утта эремсектең һыуы бөткәнсе ҡайнатаһың. Ҡайнатыу 3-4 сәғәткә һуҙыла. Һыуы бөткәс, эремсек ҡыҙыл төҫкә инә. Ҡыҙыл эремсекте ит турағыс аша үткәреп, еләтелгән урында киптерәһең. Кипкән эремсектән ҡыш көнө бәлеш бешерергә була. Шулай уҡ аҡ майҙы ҡыҙыл эремсек менән бергә баҫып, эремсекле май эшләргә мөмкин.

Һөттән иң әүәл <u>ҡаймаҡ</u> яһайҙар. Уны яһау хәҙер ҡыйынлыҡ тыуҙырмай. Йылытылған яңы һөттө сепаратор аша үткәрәһең һәм айыртылған һөт менән ҡаймаҡ айырып алаһың. Элегерәк иһә һөттө бер нисә сәғәт тондороп, өҫтөн

һөзөп алғандар. Күбекләнеп торған ҡаймаҡ сәй табыны батшаһы булған.

Ҡаймаҡтан <u>май</u> бешкәндәр. Май алыу өсөн ҡаймаҡты бер нисә көн йыялар, ҡуйырып, әсей башлағансы тоталар. Унан махсус ағас бешкәк менән бер талай өзлөкһөз бешәләр. Һөзөмтәлә ҡаймаҡтан аҡ май һәм һыу (айран) айырыла. Алынған майҙы йомғаҡлап һалҡын урынға ҡуйғандар, һаҡлау өсөн иреткәндәр, тозлағандар. Ереткән саҡта сейә ҡушһаң, <u>сейәле май</u>, муйыл ҡушһаң, <u>муйыллы май</u> килеп сыҡҡан. Ҡышҡылыҡта улар танһыҡ ризыҡ булған. Һаҡлар өсөн майҙы май айында йыйғандар, сөнки май айының майы татлы ғына түгел, ә витаминдарға бик бай булған.

Иң ҡәҙерле ҡунаҡтарға, балаларға, эстәре ауыртҡан, аш үтмәгән кешеләргә <u>күбекмай</u> әҙерләйҙәр. Уның өсөн махсус көбө (көбөсә) бар. Ҡаймаҡты аҙ ғына әсетә биреп, яңы ойоған ҡатыҡҡа һалаһың да ағас бешкәк менән талғын ғына бешәһең. Ҡатыҡ һәр ваҡыт яңы һауған һөт йылыһындай ғына булып торорға тейеш. Ҡыҙыуыраҡ тиҙлектә бешһәң, унмай, яна, эрей, күбекмай төшмәй. Май ап-аҡ булып күбеп кенә торғанға ла ул күбекмай тип атала. Айраны ла бик тәмле һәм организмға файҙалы. Ҡайһы яҡта уны "аҡ май" тиҙәр.

Һөт азыҡтарының йәнә бер боронғоһо - <u>әжекәй (әжегәй).</u> Уның тураһында С. Руденконың "Башкиры" тигән китабында ла ҡыҫҡаса мәғлүмәт бирелә. Был ризыҡ түбәндәгесә әҙерләнә: яңы ойотолған ҡатыҡҡа аҙ ғына һөт ҡушып туҡыйһың да талғын утта һыуы бөткәнсе ҡайнатаһың. Май ҡушып ашаһаң да, шәкәр һибеп, сәй

янына ҡуйһаң да була. Бигерәк тә уны балалар ярата. Әжекәйзе бөгөн дә Бөрйән яҡтарында яһайзар. Башҡа тарафтарза ул онотола бара.

Боронғораҡ башҡорттарза иң таралған эсемлектәрзең береһе айран булған. Уның популярлығы тураһында күп кенә язма мәғлүмәттәр һаҡланған (П. Назаров, П. Паллас, С. Руденко язмалары). Әсе ҡатыҡты һалҡын һыу менән шыйыҡайтыузан барлыҡҡа килгән был эсемлек һыуһынды ла ҡандырған, витаминдарға ла бай, туҡлыҡлы ла булған.

Әммә башҡорттарза бик боронғо замандарзан килгән иң ҡәзерле, иң хөрмәтле, бөгөнгәсә бәҫен, ҡәзерен юғалтмаған эсемлек, әлбиттә, ҡымыз. Бейә һөтөнән әзерләнгән был эсемлек тураһында тәүге мәғлүмәт боронғо грек тарихсыһы Геродот (беззең эраға тиклем 484-424 йылдарза йәшәгән) язмаларында осратабыз. Ул төньяҡ Ҡара диңгез буйында йәшәгән скифтарзың тормошон өйрәнеп, уларзың иң яратҡан эсемлеге бейә һөтөнән яһала, тип язған (13. 12).

Ҡымыз тураһында тулыраҡ мәғлүмәтте XII быуатта йәшәгән француз миссионеры Вильгельм Рубрук бирә. Үзенең 1253 йылдағы сәйәхәте тураһындағы язмаларында ул ҡымыз яһау ысулы, уның тәме, тәьҫире тураһында ентекле итеп язып ҡалдырған. Тик ул, ниңәлер, ҡымыззы "космос" тип атаған. Йәки ул был атаманы яңылыш ишеткән, йәки француз теленә яҡынайтып үзгәрткән. Бына Рубрук башҡорт ҡымызы тураһында низәр яза: "В тот вечер проводник дал нам немного космоса. Испив его, я сильно вспотел от страха и новизны, потому что еще никогда не пил его. Но все же он показался мне очень

вкусным. Напиток этот щиплет язык, как терпкое вино. При отведывании его на языке остается вкус миндального молока и внутри вас разливается очень приятное ощущение, слабые головы от него пьянеют и он производит обильную мочу" (18. 74).

Ҡымыз тураһында бик күп тарихсылар, сәйәхәтселәр, языусылар (мәҫәлән, Бергольц, П. Назаров, С. Рыбаков, И. Лепехин, П. Паллас, Р. Игнатьев, Т. Беляев, Ф. Нефедов, Д. Мамин-Сибиряк, Л. Толстой, А. Пушкин, А. Чехов һ.б.) телгә ала. Барыһының да ҡарашы бер: ҡымыз иҫ китмәле тәмле, үзенсәлекле, шифалы эсемлек. Уны яһау ысулы тураһында С. Руденко бына низәр яза: "Способ приготовления кумыса общеизвестен, и по этому вопросу существует специальная, притом обширная литература. Башкирский способ приготовления кумыса ничем не отличается от общераспространенного среди кочевников-скотоводов. В большой кожаный, впоследствии замененный деревянной кадкой сосуд (һаба) вливалось только что подоенное кобылье молоко, иногда немного разбавленное водой. На внутренних стенках и дне старых сосудов всегда имелись бродильные грибки (ҡур, әсетке), которые размножались в свежем молоке, и начиналось спиртное, молочно-кислое брожение. Если сосуд был новым, то в свежее молоко вливалось немного кумыса, взятого из другого сосуда с кумысом, или старого, сохранившегося с прошлого года. В сосуд это молоко вливалось после каждой дойки кобыл, а последних доили от двух до четырех и даже пяти раз в день. После каждого пополнения кумыса свежим молоком и в промежутках между ними кумыс

взбалтывался особыми мешалками (бешкәк), и через 3-4 дня он был уже готов для питья" (19. 130).

С. Руденко "ҡымыҙ яһау ысулы барыһына ла билдәле", тип яҙһа ла тик ҡымыҙ яһау оҫталары ғына белгән үҙ серҙәре, үҙенсәлектәре бар. Ул серҙәр сит-ят күҙҙәрҙән нык һаҡланған. Ҡымыҙ яһау оҫталығы тик нәҫелдән-нәҫелгә генә бирелгән. Бөгөн дә тота килеп һәр кем ҡымыҙсы булып китә алмай. Быны өсөн тәбиғәтте өйрәнергә, йылҡы тормошон һәм холҡон аңларға, уны тәрбиәләү, һауыу практикаһын үҙләштерергә, һөттө әсетеү процесын белергә кәрәк. Шулай уҡ был эш тырышлыҡ, ныҡышмалылыҡ, түҙемлек, сафлыҡ кеүек кешелек сифаттарын талап итә. Шунһыҙ тәмле һәм шифалы ҡымыҙ яһап булмай. Ә ҡымыҙҙың шифаһы хаҡында һөйләп бөтөрлөк түгел. Уны күптән белгәндәр һәм уның менән дауаланырға тип ете ят ерҙән дә килгәндәр. А.П. Чеховтың, Л.Н. Толстойҙың Башҡортостанға килеүе тап шул маҡсатта булған.

Белгестәр әйтеүенсә, ҡымыҙ, әсетеү ваҡытына (һуҙымына) ҡарап, өс төргә бүленә:

1) йыуаш ҡымыҙ - 5-6 сәғәт әсегән һөт;

2) урта әселектәге ҡымыҙ - 1 тәүлек әсегән һөт;

3) әсе (көслө) ҡымыҙ - 2-3 тәүлек әсегән һөт.

Әсе ҡымыҙ башҡа сыға һәм быуындарҙы йомшартып, еңелсә иҫертә. Шуға күрә, уны башлыса табындарҙа, ҡунаҡтар йыйылған ерҙә эсәләр. Ғөмүмән, башҡорт ҡымыҙына еткән туҡлыҡлы, шифалы, һыуһын ҡандырғыс эсемлек әле уйлап табылмаған. Ҡымыҙ - ғүмер баҡый

тәбиғәт менән гармонияла йәшәгән, уның серзәренә төшөнгән башҡорт халҡының оло мәзәни табышы ул.

Шулай итеп, меңәр йылдар малсылыҡ менән кәсеп иткән башҡорт халҡы аҫраған малдарынан оло файза күргән, уларзан төрлө ризыҡтар, ашамлыҡтар эйзәп, йәшәйешен тәьмин иткән. Шул йәшәү дәүерендә берећенән-береће ҡәзерлерәк аш-һыу ысулдарын уйлап тапҡан.

## § 2. ИГЕНСЕЛЕККӘ БӘЙЛЕ АШ-ҺЫУҘАР

Башҡорттарҙың туҡланыу рационында борон-борондан үҫемлек ризыҡтары ҙур өлөш алып торған. Бигерәк тә иген культуралары көнкүрештә мөһим роль уйнаған. Бик борондан килгән иген сәсеү, иген эшкәртеү ҡорамалдарының бөгөнгәсә һаҡланып ҡалған архаик формалары башҡорт халҡының элек-электән малсылыҡ менән бер рәттән игенселек кәсебе менән шөғөлләнеүен иҫбатлай. Шулай ҙа тарихи әҙәбиәттә юҡ-юҡта "башҡорттар ер эшкәртеү һөнәрен XVIII быуат аҙаҡтарында, XIX быуат баштарында рустар һәм башҡа игенсе халыҡтар йоғонтоһонда үҙләштерелгән" тигән яңылыш фекерҙәр осрап ҡуя. Ә бит XVIII быуатта уҡ Башҡортостан буйынса сәйәхәт итеүсе рус ғалимдары, атап әйткәндә, И. Лепехин, И. Георги, П. Паллас, үҙҙәренең юлъяҙмаларында башҡорт халҡының көндәлек туҡланыу рационында башаҡлы культураларҙың элек-электән ҡулланыла килеүен һыҙыҡ өҫтөнә алалар. Мәҫәлән, И. Лепехин былай тип яҙа: "В рационе башкир с давних пор присутствовали злаки. Башкиры, как известно, издревле были

скотоводческим народом. Вместе с тем навыки примитивного земледелия в качестве вспомогательного занятия у них достаточно давние" (11. 243). Ваҡыттар үтеү менән ер эшкәртеү, игенселек кәсебе үҫешә бара һәм XVIII быуатта иһә ул төньяҡ башҡорттарының төп кәсебенә әүерелә. Был турала С. Руденко ла әйтеп үтә:

"С изменением хозяйственного быта башкир изменился в значительной степени и характер потребляемой ими пищи, уменьшение потребления мясной пищи компенсировалось увеличением потребления хлеба" (19. 125).

Бөгөнгө этнографтар С.Н.Шитова менән Р.Г. Ғәҙелгәрәевалар ҙа игенселек кәсебенең борондан килеүен һәм уның традицияларының әле лә һаҡланыуы тураһында түбәндәгеләрҙе яҙалар: "Собирая этнографический материал, мы обратили внимание на существенную долю в составе традиционных блюд башкир кушаний из зерна и муки. В большинстве своем они не имели отношения к восточноевропейской (русской и финской) кухне, но находили аналоги в пище народов Сибири, Казахстана, Средней Азии. Иногда, особенно при обрядовых угощениях, использовалось просо-культура азиатского происхождения. Употребление в пищу ячменя также свидетельствовало о связах башкир с народами, живущими за Уралом и в Южной Сибири. В то же время в некоторых приемах обработки зерна, в способах приготовления отдельных блюд можно видеть местные корни.

Древние земледельческие традиции, нашедшие отражение в питании башкирского народа, могли сохраняться на протяжении тысячелетий и более и дожить до наших дней при условии, если

все это время в комплексном хозяйстве башкир поддерживались хотя бы самые простейшие навыки выращивания злаков" (22. 78-79).

Шул уҡ авторҙар әйтеүенсә, XIX-XX быуаттарҙа башҡорттарҙың туҡланыу рационында бөртөклө культуралар: бойҙай, арыш, борай, арпа, һоло, тары киң ҡулланыла башлай. Борсаҡ һәм ҡарабойҙай аштары ла көнкүрешкә инә. Шулай ҙа электән килгән традиция буйынса, күпселек халыҡта бойҙай, ә көньяҡ-көнсығыш башҡорттарҙа арпа һәм тары киңерәк файҙаланыла.

Башҡорттарҙа бөртөклө ашлыҡтарҙы ҡулланыу, эшкәртеү, уларҙан төрлө аш-һыу әҙерләүҙең күп төрлө ысулдары бар. Мәҫәлән, бойҙайҙы һәм арышты элек-электән он итеп тартҡандар. Арпа, тары, һоло һәм бойҙайҙы төйөп ярма әҙерләгәндәр. Арпа менән бойҙайҙы ваҡламай, бөтөн килеш тә бешергәндәр. Төп иген эшкәртеү ҡоралдары булып оҙаҡ ваҡыт ҡул тирмәндәре (ағас тирмән, таш тирмән) һәм төйгөс (киле) һаналған. Ашлыҡты ҡабығынан таҙартыу (кәбәген һурҙырыу) өсөн төрлө ысулдар ҡулланылған. Арышты һәм бойҙайҙы бүрттергәндәр һәм эҫе мейестә ҡыҙҙырғандар. Һолоно бер аҙ ҡайнатып алғандар һәм киптергәндәр. Шулай ҙа йышыраҡ бөртөклө ашлыҡтарҙы (тары, арпа, арыш һ.б.) ҡаҙанда ҡыҙҙырып алғандар. Асылда, был игенде термик эшкәртеү ысулы ла булған. Эшкәртелгән ашлыҡты ағас килелә төйгәндәр йәки ҡул тирмәндәре ярҙамында онтағандар.

Башҡорттарҙа игенселек кәсебенә бәйле аш-һыуҙарҙы ике төркөмгә айырып ҡарарға мөмкин: ҡамыр аштары һәм ярма аштары.

Ҡамыр аштары төркөмөнә иң ныҡ таралған, киң ҡулланылған түбәндәге көндәлек һәм байрам ризыҡтарын, ашһыуҙарын индерергә мөмкин: икмәк, бауырһаҡ, ҡоймаҡ, ҡатлама, сәксәк, сумса (сумбаса), шәнкә, ҡош теле, бәлеш, һалма, туҡмас, ыумас.

Был ризыҡтар араһында иң ҡәҙерлеһе һәм көндәлек рационда төп урынды тотҡаны, әлбиттә, икмәк. "Икмәк-барыһына ла баш", "Икмәк, сәйем - яҡты йөҙөм", "Икмәк булһа, йыр ҙа булыр" һ.б. мәҡәл, әйтемдәр башҡорттарҙың был ризыҡҡа ниндәй ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеүе тураһында һөйләй. Икмәктең дә үҙ төрҙәре бар: сөсө икмәк, әсе икмәк, көлсә, йәймә, табикмәк. Улар араһында иң боронғоларҙан көлсә һанала. Боронғо башҡорттарҙа уны нисек бешереү тураһында П.С. Паллас бына нимә тип яҙып ҡалдырған: "Башкирская женщина месит руками лепешку на воде с солью, сажает ее на поду камина в горячую золу и загребает... потом втыкает на палочку и держит несколько минут у огня, чтобы корка поджарилась" (16. 651). Ҡайһы бер башҡорттарҙа икмәкте көлгә күмеп бешереү ысулы XX быуат урталарына тиклем һаҡланған. Уны бигерәк тә алыҫ юлға сығыусылар өсөн әҙерләгәндәр. Майға баҫылған, йомортҡа ҡушылмаған бындай икмәк оҙаҡ һаҡланған, торған һайын ул матурлана барған. Шуға күрә уны "юл икмәге" тип тә йөрөткәндәр.

Икмәктең икенсе бер боронғо төрө - "йәймә". Уны башлыса Урал аръяғы башҡорттары бешергән. Йоҡа итеп йәйелгән сөсө ҡамырҙы эҫе ҡаҙандың эске яғына йәбештергәндәр. Әҙер булғас, улар ҡубып, ҡаҙан төбөнә төшә. Уларҙы алып, бер һауытҡа өйгәндәр һәм табынға һары май менән майлап

биргəндəр. Йəймə тураһында С.Н. Шитова һəм Р.Г. Ғəҙелгəрəева бына нимə тип яҙалар: "Обычай приготовления йəймə в котле, удобный в походных условиях и, как видно, древний, сохранился местами и в бассейне р. Демы, хотя на этой территории, кроме ҡаҙан йəймəһе (диалектный вариант ҡаҙан йоҡаһы), выпекались и обычные йəймə на сковороде, поставленной в жаркую натопленную печь. Их пекли, когда в дом неожиданно приезжали гости. Сложенные и облитые медом их несли в качестве подарка на свадьбу и на другие семейные торжества" (22. 106).

Шулай итеп, йəймə ҡапыл ғына əҙерлəнə торған, шулай уҡ байрам табыны өсөн əҙерлəнгəн икмəк төрө булып сыға.

Əгəр йəймə ҡоро табала ҡыҙҙырылһа, ҡабартма иһə майлы табала бешерелə. Шуға уны ҡайһы бер яҡтарҙа майғикмəк тип йөрөтəлəр. Ҡабартманың ике төрө бар: сөсө ҡабартма һəм әсетелгəн ҡамырҙан яһалған əсе ҡабартма.

Əҙерлəнеше менəн ҡабартмаға бауырһаҡ яҡын тора. Ул башлыса сөсө ҡамырҙан яһала. Ул былай əҙерлəнə: күп итеп йомортҡа ҡушылған ҡамырҙы йəйəлəр һəм ромб формаһында киҫеп, ҡаҙандағы ҡайнап торған майҙа бешерəлəр. Бауырһаҡ - ҡунаҡ ризығы. уны бигерəк тə туй өсөн күплəп əҙерлəйҙəр. Ул туйҙың йыуаса өлөшөндə таратыла. Шуға ла ҡайһы бер яҡтарҙа йыуаса исеме менəн йөрөй.

Башҡорттарҙа борон-борондан көндəлектə лə киң ҡулланылған, байрам табынына ла йыш ҡуйылған йəнə бер ҡамыр ризығы - ул ҡоймаҡ. С.Н. Шитова менəн Р.Ғ. Ғəҙелгəрəевалар фекеренсə, иң əүəл ҡоймаҡ тары ононан əҙерлəнгəн һəм киң ҡулланылған. Һуңғараҡ ҡына уны бойҙай ононан бешерə башлағандар. Тары ононан яһалған ҡоймаҡ

ҡайһы бер райондарҙа әле лә осрай. Ҡоймаҡтың да бер нисә төрө бар: эсе ҡоймаҡ, сөсө ҡоймаҡ, ыуыҙ ҡоймағы. Ыуыҙ ҡоймағын йола ризығы тип әйтергә мөмкин, сөнки уны һыйыр быҙаулағас та ыуыҙ һөтөнән әҙерләгәндәр һәм туған-тыумасаларҙы һыйлағандар. Улар һыйырҙың һөтлө, йорттоң ҡотло булыуын теләгәндәр.

Ҡамырҙан бешерелгән байрам аҙыҡтары ла байтаҡ: сәксәк, сумса, бәлеш, ҡош теле һ.б. Бешереү ысулы менән сәксәк бауырһаҡҡа яҡын. Әммә уның ҡамырына күп итеп йомортҡа ҡушҡандар һәм ул ваҕыраҡ итеп, квадрат формаһында киҫелгән. Шулай уҡ ҡайнап торған майҙа бешерелгән. Табынға уны осло итеп өйөп, өҫтөнә бал ҡойоп биргәндәр. Ул йола ризығы ла. Туй өсөн 40 йомортҡаға баҫылған ҡамырҙан яһалған махсус сәксәк бешергәндәр. Ҡунаҡтар ҙа яңы ҡауышҡан йәштәр өсөн күстәнәскә ошо аҙыҡты килтергәндәр. Ҡайһы бер төбәктәрҙә сәксәк йыйыу тигән йола һаҡланған. Ҡыҙ оҙатыр алдынан төп ҡоҙағый, ауылдаштарын саҡырып, ошо ризыҡ менән һыйлаған.

Элек-электән иң ҡәҙерле ҡунаҡтарға ҡош теле бешергәндәр. Ул былай әҙерләнгән: күп итеп йомортҡа ҡушылған ҡамырҙы йоҡа ғына итеп йәйгәндәр һәм өсмөйөш йәки ромб формаһында киҫкеләп, ҡаршы яҡ остарын бергә тоташтырғандар ҙа ҡайнап торған майҙа ҡурғандар. Ҡайһы бер төбәктәрҙә, мәҫәлән, Дим буйы бассейнында, ҡош теле үҙенең күп төрлө формалары (ҡош теле, төрлө урамалар, сәскә һ.б.) менән айырыла.

Башҡорттарҙа ҡамыр төрлө бәлештәр бешереү өсөн дә ҡулланылған. Ғаилә табынына йыш ҡына ҙур итле бәлеш ҡуйылған. Уны, ғәҙәттә, аш бешергән саҡта һалалар. Сөнки,

беренсенән, ҡамырын һурпаға баҫһаң, тәмлерәк була, икенсенән, бешкән саҡта бәлеш эсенә аҙлап-аҙлап һурпа өҫтәп торағың. Ҡамырҙы һәр кем үҙенсәрәк баҫа. Әҙер ҡамырҙы ике йәймә итеп йәйәһең. Табаның төбөнә һалынырға тейешлеһе табанан ҙурыраҡ, ә өҫтөнә йәйелгәне бәләкәйерәк, таба ҙурлыҡ була. Таба төбөнә йәйелгән йәймәгә бармаҡ башындай итеп туралған ит, картуф (ҡайһы бер яҡтарҙа дөгө, бойҙай ярмаһы) һалалар, тәмләткестәр өҫтәйҙәр. Таба тулғас, өҫтөнә бәләкәйерәк йәймәне ябалар һәм төпкә йәйелгәненә семәрләп йәбештәрәләр. Өҫкө ҡатламының уртаһына түңәрәк тишек яһайҙар һәм уны ҡамыр бөкө менән тығалар. Бәлеш бешкән саҡта шул тишектән әҙләп-әҙләп һурпа ҡойоп торалар. Һурпаны бер юлы күп итеп ҡойһаң, таба төбөндәге ҡамыр ебей, бөтөнләй ҡоймаһаң, бәлеш эсе ҡоро була. Ҙур бәлеште тауыҡ баштарын, тәпәйҙәрен, бөрләтәү, бауыр-йөрәктәрен һалып та бешерәләр. Бындай бәлеште, ғәҙәттә, ҡаҙ өмәһе мәлендә бешерәләр. Шулай итеп ул йола ризығы традицияһын да үтәй.

Итле ҙур бәлештән тыш күп төрлө ваҡ бәлештәр бешерелә. Улар төрлө урында төрлөсә атап йөрөтәлә: бөйөрөк, пирук, кәкере, бөккән, сумса, самбуса. Уларҙы сөсө ҡамырҙан да, әсе ҡамырҙан да әҙерләйҙәр. Эсенә һалыу өсөн төрлө еләктәрҙе, балан, сейә, муйыл емештәрен, картуф һәм кәбеҫтәне файҙаланғандар. Бөйөрәктәр өсөн бигерәк тә эремсек уңайлы булған. Уларҙың үҙ исемдәре лә бар: аҡ эремсектән яһалғаны бәрәмәс, ҡыҙыл эремсектән бешерелгәне өжәкәй тип йөрөтәлә.

Ҡамырҙан төрлө аш-һыуҙар әҙерләнә. Шуларҙың иң ябайы һәм, күрәһең, иң боронғоһо - ыумас. Уста ыуып иҙелгән ҡамырҙы (исеме лә ыуыу һүҙенән алынған) ҡайнап торған

һыуҙа бешергәндәр. Табынға ҡоротлап биргәндәр. Ул боронғораҡ ябай башҡорттарҙың көндәлек ашы булған.

Халыҡ араһында киң таралған аштарҙың береһе - һалма (ҡайһы бер төбәктәрҙә ул туҡмас тип тә йөрөтөлә). 1-2 йомортҡа ҡушып баҫылған ҡамырҙы йәйәләр һәм таҫма рәүешендә нәҙек киҫәктәргә бүләләр. Уны һыуҙа ла, һөттә лә бешерергә мөмкин. Ҡайһы бер төбәктәрҙә, мәҫәлән, көньяҡ-көнсығыш райондарҙа, һалма тип дүрткел йәки таҫма рәүешендә киҫелгән ҡамырҙың үҙен атап йөрөтәләр. Унан бешерелгән аштар туҡмас тигән дөйөм исем менән атап йөрөтөлә.

Һалма - башҡорт халҡының традицион аштарының береһе. Уның тураһында боронғо мәғлүмәттәр һаҡланған. П.С. Паллас, мәҫәлән, бына нимә яҙа: "Салма делается из крутого теста пшеничной, ячменной или полбенной муки, которое, разделяя на куски величиной с медный пятикопеечник, варят в одном котле с мясом..." (16. 107).

Шулай итеп, башҡорттар ҡамырҙан күп төрлө ашамлыҡтар һәм аш-һыуҙар әҙерләгәндәр. Улар араһында көндәлек ризыҡтар ҙа, байрам аштары ла бар.

Бөтөү үсемлектән һәм ярманан әҙерләнгән аш-һыуҙар. Башҡорттар аш-һыу әҙерләгәндә бөртөклө культураларҙы бөтөү килеш тә, ярма итеп тә файҙаланғандар. Мәҫәлән, арпанан, бойҙайҙан, борайҙан талҡан әҙерләгәндәр. Бының өсөн уларҙы табала ҡыҙҙырғандар һәм ҡул тирмәнендә ваҡ итеп тартҡандар. Талҡан күп төрки халыҡтарға хас боронғо ризыҡ. Уның тураһында XI быуатҡа ҡараған Мәхмүт Ҡашғариның һүҙлегендә лә телгә алына. Талҡанды ҡаймаҡҡа, майға бутап ашағандар, һөткә йәки эҫе һыуға болғап эскәндәр, ҡаймаҡта

бешереп үҙенсәлекле аш - саламат әҙерләгәндәр. Талҡан тураһында С.Н. Шитова менән Р.Ғ. Ғәҙелгәрәевалар ҙур ғына мәғлүмәт килтерә. Улар, мәҫәлән, бына нимә тип яҙа: "Размельчание предварительно сваренного зерна стало традицией у некоторых этнических групп и связывается она с Малой Азией. Этот способ приготовления муки и крупы применялся курдами, белуджами, лурами, юрюками. Талкан из вареной и высушенной пшеницы заготавливались таджиками... У тувинцев, алтайцев, монголов талканную муку подсыпали в чашку с чаем, заваривая кипятком. У хакасов, тувинцев и алтайцев толокнянные колобки с маслом брали в дорогу, на охоту... Такое же разнообразие способов употребления каленой талканной муки существовало в прошлом и у башкир юго-восточных районов Башкирии" (22. 94).

Талҡанда бик күп төрлө файҙалы элементтар бар. Уның туҡлыҡлығы ла бик юғары: 100 грамм продуктта 300 килокалорий. Унда аҡһым 16%, май 2%, углеводтар 75%. Күрәһең, талҡандың ошо сифаттарын беҙҙең ата-бабаларыбыҙ бик күптән белгән һәм был ризыҡты үҙҙәренең төп туҡланыу рационына индергән.

Ҡыҙҙырылған бөтәү бойҙайҙы һәм арпаны шул килеш тә ашағандар. Ул ҡурмас тип атала. Төньяҡ-көнбайышта арпаны тарма орлоҡтары менән ҡушып ҡыҙҙырғандар. Ул ҡурмасҡа үҙенсәлекле тәм һәм еҫ биргән. Ҡурмас бигерәк тә балаларҙың яратҡан ризығы булған. Ул да бик файҙалы һәм туҡлыҡлы.

Ондан һәм ярманан элек-электән төрлө йылы аш-һыу әҙерләнгән. Шуларҙың иң ябайы боламыҡ булған. Уны боронораҡ көнбайыш һәм төньяҡ башҡорттары бешергән. Ғәмәлдә ул ҡайнар һыуҙа йәки һөттә болғатып бешерелгән он

ашы. Уны ҡорот, ҡатыҡ менән тәмләткәндәр, йәки ҡаймаҡ, ирегән май ҡушып биргәндәр. XIX быуат ғалимы уны "ярлылар ашы" тип атай (15. 183). Әлбиттә, байыраҡ башҡорттар уны үҙһенмәгән. Шуға ла Урал аръяғы башҡорттарында ул бөтөнләй осрамаған.

Элегерәк ярманан <u>өйрә</u> әҙерләнгән. Бутҡанан ул шыйығыраҡ, боламыҡтан ҡуйыраҡ. Ҡорот йәки ҡатыҡ менән тәмләтеләә.

Арпа, арыш, бойҙай ярмаһынан башҡорттар борондан <u>буҙа</u> исемле милли эсемлек яһағандар. Онотолоп барған был эсемлек бөгөнгө көндә ҡайтанан тергеҙелә. Хатта махсуслашҡан фирма асылып, ул һатыуға ла сығарыла башланы. Буҙа - бик туҡлыҡлы һәм файҙалы эсемлек. Ул былай әҙерләнә: шыттырып киптерелгән игенде ҡул тирмәнендә тартҡандар (хәҙерге көндә "геркулес" тип аталған әҙер арпа ярмаһы ҡулланыла). Шул рәүешле алынған ҡуржынға төйөлгән һәм табала ҡыҙҙырылған арпа ҡушҡандар һәм йылы һыу өҫтәп, 2-3 көнгә әсетергә ҡуйғандар. Тиҙерәк әсеһен, күперһен өсөн һәм, әлбиттә, үҙенсәлекле тәм биреү маҡсатында ҡуржынға ваҡ малдың иретелгән эс майын (ҡайһы яҡтарҙа аҡ май) ҡушҡандар. Буҙа күпереп әсеп сыҡҡас, уны һөҙгәндәр һәм берәй көнгә һалҡынса урынға ултыртҡандар. С.И. Руденко әйтеүенсә, буҙаны бөрйән, ҡатай, ҡара-табын, тамъян, түңгәүер, күбәләк-теләү башҡорттары даими әҙерләгән һәм XIX быуат аҙаҡтарында был эсемлек бөтә Башҡортостанға таралған (19. 133).

Әҙерләү ысулы менән буҙаға яҡын эсемлек - <u>сөсләнә</u> хәҙер Пермь өлкәһенә ҡараған ғәйнә башҡорттары әҙерләгән. Ул арыштан эшләнгән (14. 86).

Ярма аштары төрлө йолаларҙа киң файҙаланылған. Шулар араһында иң ныҡ таралғаны, әлбиттә, <u>бутҡа</u>. Уны бойҙай, арпа, тары, ҡарабойҙай, дөгө, һирәгерәк һоло ярмаһынан бешергәндәр. Бутҡа, ғәҙәттә, һөттә бешкән һәм табынға биргәндә һауыт уртаһына май һалып биргәндәр.

Көньяҡ-көнбайышта һәм Дим бассейнында йәшәүсе башҡорттар тары һәм бойҙай бутҡаһын ҡаҙ һурпаһында йәки ҡаҙ майы ҡушып бешергәндәр. Ул <u>ҡаҙ бутҡаһы</u> тип аталған һәм ҡаҙ өмәһендә бешерелгән. Табынға ул ҡаҙ итенән өлөштәр таратылғандан һуң бирелгән.

Тары һәм арпа бутҡаһы боронғо мәжүси йолаларҙа һәм ритуалдарҙа ҡулланылған. Шундай йолаларҙың береһе – <u>ямғыр теләү</u>. Махсус кешеләр, өйҙән өйгә йөрөп ярма, май, йомортҡа, һөт йыйғандар һәм йыйылышып һыу буйында бутҡа бешергәндәр. Бутҡа бешкәнсе, күмәкләшеп ямғыр теләгәндәр. Туйынғас иһә, ҡалған бутҡаны һыуға ташлағандар, ҡаҙанды йылғаға түңкәргәндәр һәм бер-беренә һыу һипкәндәр.

Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш райондарында яҙ көнө бисә-сәсә, ҡыҙ-ҡыҙҡын "<u>ҡарға бутҡаһы</u>" йолаһына сыҡҡан. Был йоланы үтәү өсөн дә халыҡтан ризыҡ йыйғандар. Төп һыйланыу ашамлығы арпанан бешерелгән бутҡа булған. Уны "ҡарға бутҡаһы" тигәндәр. Һыйланып бөткәс, ҡалған бутҡаны ҡоштарға биргәндәр. Йола уйын-көлкө менән тамамланған.

Ҡайһы бер төбәктәрҙә "<u>нигеҙ бутҡаһы</u>" бешерелгән. Уны яңы өйгә нигеҙ һалған кешегә туған-тыумасалары, ауылдаштары бешереп килтергән.

Туй йолаһында "<u>төрткө бутҡаһы</u>" әҙерләнгән. Уны ҡунаҡтар ҡайтып китер алдынан бешергәндәр. Ҡайһы бер

урындарҙа күмеү-ерләү йолаһында "һөт бутҡаһы" менән һыйлағандар.

Шулай итеп, игенселек кәсебенә бәйле ризыҡтар һәм ашһыуҙар борон-борондан бөтә башҡорттарҙа ла киң таралған һәм күп төрлө булған. Иген культураларынан көндәлек ризыҡтар ҙа, байрам һәм йола аштары ла әҙерләнгән. Бөгөн дә улар туҡланыу рационының нигеҙен тәшкил итә.

## § 3. ҺУНАРСЫЛЫҠ ҺӘМ БАЛЫҠСЫЛЫҠ РИЗЫҠТАРЫ

Барлыҡ халыҡтарҙыҡы кеүек башҡорттарҙың да иң боронғо кәсептәре булып һунарсылыҡ һәм балыҡсылыҡ тора. Уларҙың нигеҙҙәре тәүтормош-община ҡоролошо замандарына барып тоташа. Ә инде башҡорттарҙың булғар ханлығына, аҙағыраҡ татар-монгол урҙаһына, йәнә килеп Мәскәү батшалығына яһаҡты ҡиммәтле йәнлек тиреләре менән түләүен иҫкә алһаҡ, уларҙың һунарсылыҡ кәсебе ни рәүешле үҫешкән булыуын күҙ алдына килтерәбеҙ. Тире өсөн башҡорттар ҡондоҙ, ҡама, һыуһар, төлкө, кеш, аҫ, шәшке, йәтсә, тейен, һеләүһен, бүре, айыу, ҡуян кеүек йәнлектәргә һунар иткәндәр. Уларҙың бәләкәйерәктәрен (ҡуян, төлкө, шәшке, кеш һ.б.) башлыса тоҙаҡ, ҡапҡан менән тотҡандар, айыу, бүре кеүек оло йәштәгеләрен махсус соҡорҙар ҡаҙып, тәпкеләр ҡороп аулағандар. Вағыраҡ йәнлектәрҙе махсус өйрәтелгән йыртҡыс ҡоштар (бөркөт, ҡарсыға) менән алғандар.

Ит алыр өсөн башҡорттар башлыса ҡыр кәзәләренә, ҡоралайҙарға, мышыларға һунар иткәндәр. Ҡыр кәзәләрен, мышыларҙы яҙғыһын аулау еңел булған. Яҙ көндәрендә ҡар

өҫтөндә боҙлоҡ (ҡар ҡабығы) барлыҡҡа килә. Һунарсылар саңғылар кейеп, йәнлектәрҙе шул ҡар өҫтөнән ҡыуғандар. Улары иһә ҡарға батып, аяҡтарын боҙлаҡҡа киҫеп, тиҙ арала хәлдән тайғандар. Ҡыуып еткәс инде уҡ, һөңгө, суҡмар эшкә ҡушылған.

Ит өсөн йәнә ҡыр ҡаҙҙары, ҡыр өйрәктәре, һуйыр, ҡор, ағуна, сел кеүек ҡыр ҡоштарын аулағандар. Уларҙы йыртҡыс ҡоштар ярҙамында ла тотҡандар, уҡ йәки мылтыҡ менән дә атҡандар. Шулай уҡ махсус япмалар ҙа ҡулланғандар. Япма (әүен) менән аулау ысулы тураһында И. Казанцев XIX быуатта бына нимә тип яҙып ҡалдырған: "Иногда устраивают в лесу большую корзину с закрышкой на вертеле, на которую кладут прикорм. Прельщенная этою приманкою птица лишь только спустится, тотчас проваливается в корзину" (10. 56). Ҡыр ҡоштарынан торнаға, бөркөткә, ҡарғаға, аҡҡошҡа, ҡарсығаға, ябалаҡҡа, өкөгә һунар итеү тыйылған булған. Был, бер яҡтан, боронғо тотемистик ҡараштарға һәм ышаныстарға бәйле булһа, икенсенән, үҙ ярҙамсыларын (бөркөт, ҡарсыға) хөрмәтләү, уларға ихтирамлы булыуға бәйле. Шулай уҡ йыртҡыс йәнлектәрҙең итен дә ашамағандар. Һирәк-һаяҡ дарыу сифатында бурһыҡ һәм айыу ите файҙаланылған. Ҡоралай, мышы итенән алда яҙып кителгән итле ризыҡтар әҙерләнгән. Ҡош итенән туҡмас, төрлө бөлештәр бешергәндәр, ә поход шарттарында ағасҡа ҡаҙап, утта ҡыҙҙырғандар. Юлда йөрөгәндә, һунарҙа булғанда ҡыр кәзәләрен ергә күмгәндәр һәм өҫтөнә ут яғып бешергәндәр.

Балыҡсылыҡ менән дә башҡорттар элек-электән даими шөғөлләнә. Башҡортостан тәбиғәте балыҡсылыҡ өсөн дә ифрат

уңайлы. Республикала 13 меңдән ашыу йылға, 1 меңдән ашыу күл, 1 мең ярым самаһы быуа бар. Һыу ятҡылыҡтарының майҙаны 130 мең гектар самаһы. Уларҙа күпме балыҡ тереклек итеүен күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Белгестәрҙең билдәләүенсә, беҙҙең йылға-күлдәрҙә 40-тан ашыу балыҡ төрө бар. Улар түбәндәге төркөмсәләргә бүленә:

1) һаҙандар,

2) эт балыҡтары,

3) йәйен,

4) суртан,

5) алабуғалар,

6) тәрәс һымаҡтар,

7) һөмбөш балыҡтары,

8) бәрҙе,

9) мәрсен һымаҡтар,

10) үгеҙ балығы,

11) йылан балығы һ.б.

Шундай тере байлыҡ була тороп та халыҡ уға нисек битараф булһын. Балыҡ тотоу әллә ни ауыр һөнәр ҙә түгел, үтә ҙур сығымдар һәм көс тә талап итмәй. Әммә ул үтә табышлы, ә балыҡ ите бик туҡлыҡлы һәм сәләмәтлеккә файҙалы. Унда аҡһым, витаминдар, майҙарҙан тыш, организмға бик кәрәкле элемент - фосфор бар. Боронғо ата-бабаларыбыҙ быларҙы бик яҡшы белгән, күрәһең. Шуға ла балыҡ тотоу ҡан-бабаларыбыҙҙың төп кәсептәренең береһенә әүерелгән.

Был кәсептең боронғолоғон балыҡтарға ҡағылышлы күп һанлы халыҡ ижады әҫәрҙәре иҫбатлай. Бынан 2 мең (ҡайһы

берәүҙәр раҫлауынса 4 мең) йылдар элек тыуған "Урал батыр" эпосында ла балыҡтарға ҡағылышлы юлдар бар:

Күлдә ятҡан балығы
Ялтүш, сабаҡ, суртаны.
Бергә йөҙөп уйнайҙар,
Бер-береһенә теймәйҙәр.

Балыҡ образы халыҡ йырҙарында ла киң файҙаланыла. Ике миҫал менән генә сикләнәбеҙ:

1) Ағиҙелкәй һыуы, ай, тәрән һыу,
Аҡ сабаҡтар уны буйламай.
Аҡ сабаҡтар кейек йәшәү ҡайҙа
Донъя ҡайғыларын уйламай;

2) Һыуҙа балыҡ йөҙәлер,
Балыҡсыны һиҙәлер.
Аҡ балыҡтай йөҙөп килһәң,
Әрнеүҙәрем төҙәлер.

Иң боронғо фольклор жанрҙарының береһе булған әкиәттәрҙә лә балыҡтар һәм балыҡсылыҡ тураһында байтаҡ мәғлүмәттәр һәм миҫалдар осратырға мөмкин. Мәҫәлән, "Тырышҡан табыр" тигән әкиәттә аталары улдарына шундай әмер бирә: "Етәүегеҙ ете балыҡ булып таралып китегеҙ!"

Мәҡәлдәр хаҡлы рәүештә иң халыҡсан жанрҙарҙан һанала. Уларҙа ла балыҡ һәм балыҡсылыҡҡа бәйле фекерҙәр осратырға мөмкин. Мәҫәлән: "Балыҡ тотҡан туҡ булыр, аяҡ быуыны ныҡ булыр". Был мәҡәлдең беренсе өлөшөнә аңлатма кәрәкмәй, ә икенсе өлөшө, йәғни "аяҡ быуыны ныҡ булыр" тигәне иһә шунан сығып әйтелә: балыҡсы йәйәүләп бик оҙон юл үтә,

тимәк, шуның менән аяҡ быуынын ныгыта. Балыҡ тотоуҙың файҙаһы тураһында был фекер. Йәнә: "Суртан сыраҡсыны күрмәç", "Һыуына күрә балыгы, ауылына күрә халыгы" һ.б.

Балыҡсының роле, балыҡсылыҡ кәсебенең әһәмиәте тураһында боронғо ҡобайырҙарҙың береһендә бына нимә тиелә: "Иҙел менән Яйыҡтың билен быуган балыҡсы". Балыҡтар тураһында бик күп йомаҡтар сыгарылган. Улар башлыса балалар араһында тыуган һәм таралган. Сөнки балыҡ тотоу уларҙың иң яратҡан шөгөлө. Был шөгөл балалар өсөн ҡомар уятыусы ҡыҙыҡлы уйын булһа, гаиләгә иһә табынды байытыусы туҡлыҡлы ризыҡ сыганагы.

Балыҡсылар араһында бөгөнгә саҡлы боронғо ырым-ышаныуҙар һаҡланган. Мәçәлән, ҡармаҡ һалыр алдынан ҡайһы берәүҙәр, бигерәк тә балалар былай һамаҡлай: "Балыҡ, ҡап-ҡап, яр башында ялтырап ят!" Йәнә шундай ышаныу бар: ҡармаҡ һабын (ҡыуалды), ауҙы аша атларга ярамай, югиһә балыҡ тотолмай. Тотолган тәүге балыҡты: "Ата-әсәңде табып ят!" - тип ярга һугыу гәҙәте лә бар. Эләккән балыҡты һанау ҙа тыйылган. Балыҡҡа бәйле һынамыштар ҙа бар. Мәçәлән, "Яҙ көнө балыҡ тотҡанда алабуга менән юрыш (ёрш) күберәк тотолһа - бойҙай, арпа, арыш уңыр". Бына шулай балыҡсылыҡ менән игенселек кәсебе араһында бәйләнеш тыуа.

Шулай итеп, борондан килгән һәм бөгөнгө көндә лә көнкүрештә файҙаланыла килгән балыҡсылыҡ кәсебе үҙенә бәйле байтаҡ гөрөф-гәҙәттәр, ышаныуҙар, йолалар тыуҙырган.

Башҡортостанда, әйткәнебеҙсә, балыҡтар бик күп төрлө. Шулай ҙа төп ау балыҡтары булып түбәндәгеләр һанала: сабаҡ,

суртан, йәйен, шамбы, бәрҙе, бағыр, алабуға, табан, ҡара балыҡ, ажау, опто, ҡыҙылғанат, ҡорман һ.б.

Балыҡтарҙы ҡаҡлағандар, киптергәндәр, бешергәндәр, ыҫлағандар, ҡыҙҙырғандар.

Ҡаҡлау өсөн ҡыҙылғанат, сабаҡ, ҡорман балыҡтары ҡулайлыраҡ. Ҡаҡлау былайыраҡ башҡарыла: балыҡтың эсен таҙартып, сей бәрәңге киҫәге батмаҫлыҡ ҡуйылыҡта әҙерләнгән тоҙлоҡҡа һалалар. Балыҡты ҙурлығына ҡарап тоҙлоҡта 10-12 сәғәттән алып. бер тәүлеккә тиклем тоталар. Бынан һуң балыҡтарҙы таҙа һалҡын һыуҙа сайҡаталар һәм күҙҙәре аша үткәрелгән сымға теҙәләр. Киптереү өсөн ҡояш төшмәгән, еләҫ урын ҡулайлы.

Ҡаҡлауҙың икенсе ысулы ла бар. Ул былай атҡарыла: балыҡты һалҡын һыуҙа һәйбәтләп йыуалар ҙа иләктә һарҡыталар. Унан һуң башын, айғолаҡтарын, тәңкәле түшен тоҙ менән ыуып, эрерәк тоҙ һибеп, быяла йәки эмаль һауытҡа тынҡыслап тултыралар. Һауыт тулғас, өҫтөнә ағас япма ябалар ҙа баҫтырғыс (ауырыраҡ әйбер) һалалар һәм һалҡынса урынға ҡуялар. 3-4 көндә балыҡ тоҙланып өлгөрөргә тейеш. Бының өсөн һауытты асып ҡарайҙар: әгәр тоҙлоҡ өҫкә сыҡһа, тимәк, эштең беренсе этабы әҙер Бынан һуң икенсе һауытҡа аҡ һеркә ҡатнашмаһы һалып (1 литр һыуға 100-150 грамм 9 процентлы һеркә) болғаталар ҙа тоҙланған балыҡты шунда йыуалар. Аҙаҡ 6-10 көн буйы ҡаҡлайҙар (элеп киптерәләр).

Киптереү. Яңы тотолған балыҡты таҙарталар, айғолаҡтарын алалар ҙа яҡшы итеп йыуалар. Унан һуң эмаль һауытҡа һалып, өҫтөнә эрерәк тоҙ һибеп, яҡшылап болғаталар ҙа 1-2 сәғәткә һалҡын урынға ҡуялар. Унан инде һәр балыҡты

таҫтамал менән яҡшылап ҡороталар ҙа майлы табаға теҙәләр. Табаны ҡуҙы алынған эҫе мейескә йәки духовкаға ҡуйып, балыҡтарҙы әйләндереп торалар. Кибеп еткәнен белер өсөн балыҡты һындырып ҡарайҙар. Ул шартлап һынһа, әҙер тигән һүҙ. Тоҙлау өсөн 1 кг балыҡҡа 600-700 грамм эрерәк тоҙ китә.

Ҡыҙҙырыу өсөн ваҡыраҡ балыҡтар алына. Эре балыҡтарҙы иһә арҡыры киҫәктәргә киҫкеләйҙәр. Һәйбәтләп йыуып, һыуын һарҡытҡас, балыҡты тоҙлайҙар. Унан һуң онталған сохарыйҙа йәки онда әүмәләйҙәр ҙә майы ҡыҙған табаға теҙәләр. Талғын утта тышы һарғылт-ҡыҙыл булғанға саҡлы ике яғын әйләндереп ҡыҙҙыралар.

Быҡтырылған балыҡ былай әҙерләнә. Кәстрүл төбөнә түңәрәкләп туралған һуғанды бер ҡат итеп һалаһың да өҫтөнә эсе таҙартылған, айғолаҡтары алынған, таҙа итеп йыуылған балыҡтарҙы теҙәһең. Уларҙың өҫтөн тағы бер ҡат һуған менән ҡаплайһың. Кәстрүлде утҡа ҡуйыр алдынан уға ярты стакан үҫемлек майы, ярты стакандан күберәк һыу, ике аш ҡалағы һеркә, кәрәгенсә тоҙ һәм тәмләткестәр (лавр япраһы, әнис) һалаһың. Кәстрүл ҡапҡасын ныҡлап ябып, һүрән генә утҡа быҡтырырға ҡуяһың. 2-3 сәғәттән һуң балыҡ әҙер була, һөйәктәре лә беленмәй.

Балыҡ котлеты. Ваҡ балыҡтарҙы (ташбаш, сабаҡ, күкйөн һ.б.) таҙарталар, йыуалар һәм ит турағыстан үткәрәләр ҙә уға һыуҙа ебетелгән аҡ икмәк өҫтәйҙәр. Әҙер фаршҡа сей йомортҡа, май, һарымһаҡ, тоҙ ҡушалар. Фарштан котлет әүмәләйҙәр ҙә уны сохарый онтағына манып, асыҡ табала ҡуралар. 500 грамм балыҡҡа 150 грамм аҡ икмәк, 1 йомортҡа,

ике ҡалаҡ аҡ май һалына. Ә һарымһаҡ, тоҙ һәм боросто самалап һалалар.

Балыҡтан әллә күпме аш-һыу әҙерләп була. Әммә балыҡсыларҙың иң яратҡаны, әлбиттә, <u>балыҡ һурпаһы</u>. Ул төрлө яҡта төрлөсә әҙерләнә, әммә уның боронғо төп ысулы түбәндәгесә: суйын сүлмәккә йәки ҡаҙанға һыуыҡ һыу һалына (иң яҡшыһы шишмә йәки таҙа йылға һыуы) һәм утҡа ҡуйыла. Иң әүәл ваҡ балыҡтарҙы таҙартып, ҡайнап сыҡҡан һыуға һалалар һәм иҙелгәнсе бешерәләр. Унан һуң һурпаны һөҙәләр һәм яңынан утҡа ҡуялар. Был һурпаға таҙартылған эре балыҡтарҙы һалалар. Был юлы балыҡтар иҙелергә тейеш түгел. Самалап тоҙ, һуған өҫтәп (аҙыраҡ он да ҡушырға мөмкин), талғын утта ҡайнаталар. Балыҡтар бешкәс, уларҙы һурпанан айыралар һәм табынға икеһен айырым бирәләр.

Ҡайһы яҡтарҙа балыҡ һурпаһына ярма, бөрәңге һалалар, күп итеп тәмләткестәр өҫтәйҙәр. Былай иткәндә һурпаның тәме китә.

Шулай итеп, балыҡтан да байтаҡ төр тәмле, туҡлыҡлы аш-һыу әҙерләп була. Ҡыҙғаныска ҡаршы, балыҡсылыҡ һөнәре беҙҙә әкренләп онотола бара, ул һәүәҫкәрҙәр кәсебе рәүешендә генә тороп ҡалған. Уны сәнәғәти юлға һалыу бөгөнгө көн талабы.

## § 4. ҠОРТСОЛОҠҠА БӘЙЛЕ АШ-ҺЫУҘАР

"Башҡортостан – ҡортсолоҡтоң классик иле һәм унда солоҡсолоҡ иң боронғо дәүерҙәрҙә үк сәскә атҡан," - тигән һығымтаға килә С.И. Руденко. Был фекерен нығытыу өсөн ул

1627 йылда донъя күргән "Книга Большому Чертежу" тигән китаптан ошондай һүҙҙәр килтерә: "Уларҙың (башҡорттарҙың) төп аҙыҡтары - бал, йәнлектәр һәм балыҡ" (19. 96). Башҡорттар тормошондағы балдың роле хаҡында шул факт та асыҡ һөйләй: булгар ханлығы ҡул аҫтында булғанда ла, артабан татар-монгол ханлығы һәм рус дәүләтенә буйһонған дәүерҙәрҙә лә уларға түләй торған яһаҡтың ҙур өлөшөн бал тәшкил иткән.

Ҡортсолоҡтоң башы солоҡсолоҡта. Солоҡ - бал ҡорто күсе һәм бал тупларлыҡ ҡыуышы булған ҙур ағас. Һәр башҡорттоң биләмәһендә күпләп солоҡ ағастары булған. Уларҙы тағы ла ишәйтергә кәрәк булғанда һәйбәт ағастарҙы уйып, яһалма солоҡтар эшләгәндәр.

Солоҡсолоҡ менән урманы булған бөтә төбәктәрҙә лә шөғөлләнгәндәр. Күптәрҙең солоғо йөҙәр дананан ашып киткән. С. Руденко үҙенең китабында П.И. Рычковтың "Географический лексикон Оренбургской губернии" тигән хеҙмәтендәге түбәндәге һүҙҙәрен килтерә: "В Башкирии немало таких хозяев, что у одного башкирца тысячи по две и больше бортей, отчего они получают знатные себе доходы. Можно сказать, что конские и пчелиные заводы в Башкирии самые лучшие и прибыточные продукты" (19. 96).

Рәсәй сәйәсәте Башҡортостанға үтеп инеп, урмандар самаһыҙ ҡырҡыла башлағас, солоҡсолоҡ кәсебе лә һүрелә төшә.Уға алмашҡа умартасылыҡ килә. Умарта ул - ергә ултыртылған күсмә оя. Бал алыр өсөн башҡорттар махсус умарталыҡтар (утарҙар) тота башлағандар. Бындай кәсеп бөгөнгә ҡәҙәр һаҡланған.

Әлбиттә, бал ҡорттары тотоуҙы һәр кем булдыра алмай. Быны өсөн махсус белем дә, тәжрибә лә кәрәк. Әммә шуныһы ҡыуаныслы: был боронғо кәсеп бөгөнгө көндә яңынан йәнләнде һәм ауыл халҡының мөһим йәшәү сығанағына әйләнде.

Ҡортсолоҡҡа бәйле терминдар этнографик лексикала ҙур ғына урынды алып тора һәм ул айырым тикшереү объекты булараҡ ҡаралырға тейеш. Беҙҙе иһә ҡортсолоҡҡа бәйле ризыҡтар атамаһы ҡыҙыҡһындыра.

Ҡортсолоҡ менән дә иң әүәл бал алыу өсөн шөғөлләнәләр. Башҡорт балының даны инде бөтә донъяға таралған. Был ризыҡта организмға кәрәкле бөтә матдәләр бар: шәкәр, аҡһым, углеводтар, витаминдар.

Ул татлы ғына түгел, туҡлыҡлы ла, ифрат файҙалы ла. Шуға күрә борон-борондан уның ҡәҙерен белгәндәр. Халыҡ телендә йөрөгән: "Ауыҙыңа бал да май!" - тигән ҡыуаныслы хәбәр килгәндә әйтелә торған әйтем дә балдың ҡәҙере хаҡында. Ул бигерәк тә төрлө сирҙәрҙән дауалау сараһы булараҡ ҡулланылған.

Бал ул ҡорт, иңкештең сәскә һутынан йыйып яһаған ҡуйы матдәһе. Ниндәй үҫемлектән алыныуына ҡарап, уны өс төргә бүлеп йөрөтәләр:

1) сәскә балы;

2) йүкә балы;

3) ҡарабойҙай балы.

Улар бер-береһенән бер аҙ хуш еҫе һәм тәме менән айырыла. Ә файҙаһы һәм туҡлыҡлыҡ калорияһы яғынан барыһы ла бер үк юғары кимәлдә.

"Бал" атамаһы күпселек төрки телдәрҙә осрай һәм бер үк мәғәнәлә ҡулланыла. Ҡайһы берҙәрендә ул әйтелеше яғынан ғына бер аҙ айырыла. Мәҫәлән, сыуаштарҙа - пыл, ҡараҡалпаҡтарҙа - пал. Шулай ҙа башҡорт һөйләштәрендә ул икенсерәк мәғәнәлә лә йөрөй: "бал" тип йәнә өй шарттарында эшләнгән иҫерткес эсемлеккә лә әйтәләр. Ул элек әсетке менән әсетелгән бал иҙмәһе булған һәм әсе (асы) бал тип аталған. Һуңғараҡ бал урынына шәкәр ҡулланыла башланған, ә исеме шул килеш һаҡланған. Балдан яһалған эсемлек тураһында С. Руденко түбәндәгеләрҙе яҙа: "Асы бал - кислушка, напиток опьяняющий и крепкий. При его приготовлении 2-3 кг сотового меда разводилось в горячей воде и заквашивалось ячменем, вымоченным в течение суток и подправленном дрожжами или кислым тестом. Заквашенный мед ставили на 2-3 дня в теплое место. Для питья кислушка - на следующий после закваски день, но надлежащую крепость она приобретала дня через три. Асы бал не был напитком повседневным, приготовлялся он зимой и главным образом во время свадьбы. Напиток этот приготовлялся башкирами повсеместно, где занимались пчеловодством" (19. 133).

Башҡорттарҙың милли байрам ризығы булған сәксәк тә балһыҙ әҙерләнмәй. Шуға уны ҡайһы бер урындарҙа "баллыҡай" тип йөрөтәләр. Хәҙерге замандарҙа бал кулинарияла бик әүҙем файҙаланыла. Бал ҡушып торт, прәник, кәнфиттәр яһайҙар.

Шулай итеп, иң боронғо ризығыбыҙ булған бал әлегәсә тормошобоҙҙа ҙур урын тота. Ул туйындыра ла, дауалай ҙа, йәшәү өсөн көс тә бирә. Бал ҡортоноң һәм балдың ҡәҙерен

белгән башҡорт халҡы улар хаҡында бик күп мәҡәлдәр һәм әйтемдәр, йырҙар, йомаҡтар сығарған. Бына шуларҙың ҡайһы берҙәре: "Бал ҡортоноң балы бар, балға хәтле наҙы бар", "Ҡорт таныһаң тотоп ал, күсе һайын бер бот бал", "Ҡотһоҙға ҡот ҡунмаҫ, умартаһына ҡорт ҡунмаҫ", "Бал балсыҡ ашата, балан ҡамыр ашата", "Бал бармаҡты тешләтер, башыңды шәп эшләтер", "Балын яратһаң, бәләһен дә ярат" һ.б. Балдың таты сағыштырыуҙар өсөн дә ҡулланыла. Мәҫәлән: "теле балдай татлы" (йомшаҡ, матур һөйләй), "ҡулдарынан бал тама" (ҡулы оҫта) һ.б. Ҡортсолоҡ кәсебе һәм уға бәйле ризыҡ һәр ваҡыт юғары баһаланған.

## § 5. ТӘБИҒӘТТӘН ЙЫЙЫЛҒАН РИЗЫҠТАР

Башҡорттар элек тәбиғәт ризыҡтарын да күпләп йыйғандар һәм үҙ мәлендә уларҙы әүҙем файҙаланғандар. Яҙ етеп, ер йылына төшкәс, халыҡ, бигерәк тә бисә-сәсә һәм бала-саға, урман-ҡырға сығып, балтырған, ҡуҙғалаҡ, ҡымыҙлыҡ, һырткөпшә, сабырҡан, ҡуян ҡолаҡ, йыуа, һарына йыйған. Уларҙы сей килеш тә, бешереп тә ашағандар. Әгәр тәүгеләренән шыйыҡ аш, өйрә әҙерләһәләр, һарынанан иһә бутҡа бешергәндәр, бешкән килеш, бөтәү көйө йәки төйөп ашағандар. Был үҫемлек аслыҡ йылдарында күп халыҡты үлемдән алып ҡалған. Башҡорттар уны ҡышҡылыҡҡа һаҡлау ысулын да белгән. Был турала XVII быуаттарҙа уҡ яҙып ҡалдырған мәғлүмәттәр осрай. С. Руденко килтергән яҙмаларҙың береһендә былай тиелә: "А жить де им, башкирцам голодно, едят де они сарану и к зиме пасут" (19. 126).

Йәй, көҙ айҙары еткәс, урман-ҡырҙа еләк-емеш өлгөргән. уларҙы йыйыу ҙа үҙенсәлекле кәсепкә әүерелгән. Бар урында ла ер еләге, ҡайын еләге, ҡара көртмәле, ҡыҙыл көртмәле, мүк еләге, бөрлөгән, ҡарағат, сейә, муйыл, балан йыйғандар. Уларҙы шул килеш тә, кипкән ҡаҡ рәүешендә лә, ә муйыл һәм сейәне майға, ҡоротҡа ҡушып та ашағандар. Балан иһә башлыса бәлеш яһау өсөн ҡулланылған. Еләктәрҙән дә төрлө бәлештәр, сумсалар әҙерләнгән. Был үҫемлектәр тәбиғи дарыу функцияһын да үтәгәндәр. Шулай ҙа дауаланыу өсөн күк мәтрүшкә, һары мәтрүшкә, кейәү үләне, алтын тамыр, гөлйемеш, андыҙ кеүек махсус үҫемлектәр файҙаланылған.

Бәшмәкте башҡорттар элек йыймағандар, хәҙер иһә ул да халыҡтың туҡланыу рационында ярайһы тотороҡло урын алып бара.

Шулай итеп, тәбиғәт үҫемлектәре лә башҡорттар тарафынан элек-электән йыйылған, даими ҡулланылған һәм милли кухняның формалашыуына билдәле роль уйнаған.

## §6. БАҠСАСЫЛЫҠ РИЗЫҠТАРЫ

Баҡсасылыҡ менән башҡорттар сағыштырмаса һуң, XIX быуат аҙаҡтарында ғына шөғөлләнә башлай. Ул осорҙа ла әле төп баҡса үҫемлеге - картуф ҡына була. Исеменән үк күренеүенсә ("картофель" һүҙенән алынған), ул культура беҙгә рустар аша ингән. Ҡайһы бер төбәктәрҙә, татарҙарҙан килгән "бәрәңге" атамаһы нығынған.

Тәүге осорҙа картуф көҙгө ризыҡ ҡына булған, уны ҡышҡылыҡҡа һаҡламағандар. XX быуат баштарында

Башҡортостандың көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш райондарында кишер, шалҡан, сөгөлдөр, һуған кеүек башҡа төр йәшелсәләр ҙә үҫтерә башлайҙар. Бөгөнгө көндә иһә барлыҡ төбәктәрҙә лә баҡсасылыҡ кәсебе сәскә ата. Баҡсаларҙа йәшелсә генә түгел, алмағас, сейә, ҡара ҡарағат, ҡурай еләге кеүек емеш ағастары һәм ҡыуаҡтары ла мул уңыш бирә.

Баҡсасылыҡтың иң популяр культураһы, башҡорт кухняһының төп компоненттарының береһе, әлбиттә, картуф (бәрәңге). Башланғыс осорҙа, рус чиновниктарының бойороғо менән башҡорт көнкүрешенә көсләп индерелгән был үҫемлеккә халыҡ ятһынып ҡарай, үҙһенмәй. Бөгөн иһә башҡорт ашһыуҙарын картуфһыҙ күҙ алдына килтереп булмай. Ысынлап та ул хәҙер икенсе икмәк ролен үтәй. Әҙерләүҙә бик ябай булған (һыуға һалаһың да бешерәһең) был ризыҡ һәр бер өй түрендә. Уның үҙенән генә, тәмләткестәр ҡушып, картуф ашы (похлебка) бешерәләр.

Һөт, һуған ҡушып төйөп, бына тигән картуф иҙмәһе йәки бәрәңге бутҡаһы әҙерләргә мөмкин. Майлы табала ҡыҙҙырып, һәр күңелгә хуш килерлек ҡыҙҙырылған картуф тигән һый яһала. Ул да хәҙер һәр өйҙә дежур аҙыҡ. Йәнә картуфтан бәрәмәс, сумса, шәңкә кеүек ваҡ бәлештәр әҙерләйҙәр. Башҡорттарҙың яратҡан милли ризығы ҙур бәлеш тә яртылаш картуфтан тора, ҡалған өлөшөн ит йәки эс-ҡарын тәшкил итә. Барлыҡ шыйыҡ аштарҙың да (туҡмас, щи, борщ һ.б.) мөһим компоненты - картуф. Шуға ла ул һәр ерҙә күпләп үҫтерелә.

Хәҙерге халыҡтың туҡланыу рационында йәшелсәләрҙән (картуфтан ҡала) <u>кәбеҫтә</u> икенсе урында тора. Башҡорттарҙың көнкүрешенә XX быуаттың беренсе яртыһында килеп ингән был

культура ла хәҙер бар урында үҫтерелә. Кәбеҫтәнән кәбеҫтә ашы (щи) бешерелә. Шулай уҡ рустарҙан ингән кәбеҫтәле сөгөлдөр ашы ла (борщ) бөгөнгө көндә бар урында әҙерләнә. Кәбеҫтә йәнә төрлө турамалар (салаттар) әҙерләү өсөн ҡулланыла. Ҡышҡылыҡҡа уны тоҙлайҙар. Тоҙло кәбеҫтә ҡышҡы өҫтәл түрендә иң танһыҡ ризыҡтарҙың береһе. Ул аппетитты күтәреп кенә ҡалмай, организмды кәрәкле витаминдар менән тәьмин итә.

Баҡсасылыҡ кәсебе йәнә помидор, ҡыяр, кишер кеүек ашһыу әҙерләүҙә киң ҡулланылған, сей килеш тә халыҡтың яратып ашаған йәшелсәләре менән тәьмин итә. Мәҫәлән, помидорҙан төрлө турамалар (салаттар) әҙерләйҙәр, һығып һут алалар, иҙмә (паста) яһайҙар. Тоҙланған помидор иһә ҡышын танһыҡ ризыҡҡа әүерелә. Тоҙло ҡыяр ҙа шулай. Кишер, һуған, һарымһаҡ, керән, әнистәр иһә аш тәмләткестәр булараҡ ҡулланыла.

Шулай итеп, баҡсасылыҡ кәсебе лә халыҡты туйындыра, уның аш-һыу рационын байыта.

Алдағы бөтә яҙмаларҙы барлап, бүлек буйынса түбәндәге һығымталар яһарға мөмкин:

1. Башҡорттарҙың бик боронғо дәүерҙәрҙән алып бөгөнгәсә үҙҙәренә генә хас милли аш-һыу системаһы барлыҡҡа килгән.

2. Был система халыҡтың төп кәсептәренә бәйле формалашҡан.

3. Шул кәсептәр нигеҙендә ит, һөт, үҫемлек ризыҡтары төрҙәре хасил булған.

4. Ризыҡтарҙың байлығы һәм төрлөлөгө аш-һыу терминдарының ифрат ҙур лексик системаһын барлыҡҡа килтергән.

5. Ул система этнолингвистик планда тикшереүҙе талап итә.

Йәнә лә шуны әйтергә кәрәк: башҡорттарҙың аш-һыуҙары, нигеҙҙә үҙенең милли үҙенсәлектәрен һаҡлаған хәлдә лә, дәүерҙәр үтеү менән ҙур үҙгәрештәр кисергән. Уға башҡа халыҡтарҙың ризыҡтары, аш-һыу әҙерләү ысулдары үтеп ингән. Элек ғәмәлдә ит, һөт, үҫемлек ризыҡтарынан торған туҡланыу рационына йәшелсә, емеш-еләк аҙыҡтары өҫтәлә. Хәҙер аш өҫтәлендә ит, һөт аштарынан тыш төрлө турамалар ҙа ҙур урын алды. Йәғни башҡорт кухняһы йәнә лә байый төштө.

Дөрөҫ туҡланыу - һаулыҡты һаҡлауҙың мөһим факторы. Ул кешенең эшмәкәрлегенә, көн итеүенә ныҡлы йоғонто яһай. Шуға күрә халыҡ кулинарияһының ҡаҙаныштарын дөрөҫ файҙалана белергә кәрәк.

## II бүлек

## Башҡорттарҙың байрам-йолалары һәм уларға бәйле аш-һыузар

### § 1. Халыҡ һәм йола

Һәр халыҡтың бик озайлы дәүерзәр арауығында формалашҡан һәм нығынған милли йолалары, байрамдары бар. Кешеләр борон-борондан тәбиғәт күренештәренә, физик һәм физиологик үзгәрештәргә, ғаиләгә, йәмғиәттә булған ваҡиғаларға үззәре теләгәнсә йоғонто яһарға тырышҡан. Шул ынтылыштар йолалар тыуыуына сәбәпсе булған. Йолаларзың тамырзары бик тәрәндә ята: улар кеше аңын мифологик ҡараштар биләгән тәүтормош дәүерзәрендә үк барлыҡҡа килә башлаған.

Башҡа халыҡтар менән уртаҡлыҡтары, оҡшашлыҡтары булған сүрәттә лә (ә был, тарихи үҫеш

закондары буйынса, ҡотолғоһоз) нәҡ йола күренештәре һәр халыҡтың милли булмышын сағылдырыусы иң мөһим билдәләрзән иҫәпләнә. Шуға ла берәй халыҡ хаҡында мәғлүмәт тупларға булһалар, тикшеренеүселәр иң әүәл уның йолаларына иғтибар иткән. Башҡорттарға ҡағылған хезмәттәр зә шуға дәлил. Әхмәт Ибн-Фадлан (X б.) һәм Әбү-Хәмит Әл-Ғарнати (XIII б.) ҡалдырған сәйәхәтнамәләрзә башҡорттарзың мәжүсизәргә хас йолалары (төрлө илаһи заттарға ышаныузары) телгә алына. Башҡортостан тураһында ҡызыҡлы күзәтеүзәр ҡалдырған рус тикшеренеүселәре В.Татищев, П.Рычков, И.Георги, И.Лепехин (XVIII б.), П.Кудряшев, В.Даль, В.Черемшанский, С.Рыбаков (XIX б.), Д.Зеленин, С.Руденко, М.Салтыковтарзың хезмәттәрендә лә башҡорт йолаларын сағылдырған мәғлүмәттәр күп. Улар йоғонтоһонда үзебеззең мөхиттән сыҡҡан П.Назаров, Б.Юлыев, М.Өмөтбаев, Ғ.Вилданов, Н.Таһиров, Х.Ғәбитов кеүек ғалимдарыбыз фольклор-этнографик материалдар йыйыуға, уларзы өйрәнеүгә әһәмиәтле өлөш индереп, һәм киләһе быуын тикшеренеүселәре өсөн матди база әзерләнеләр. Уларзың эшен артабан З.В.Туған, Ғ.Таған, Ф.Инан, Ғ.Амантай, Ә.Харисов, К.Мәргән, Ә.Сөләймәнов, этнографтарзан Г.Кузеев, Н.Бикбулатов, Л.Нагаева, Ф.Фатиховалар дауам итте. Һөзөмтәлә, башҡорт йолалары хаҡында зур теоретик һәм фактик материалдар тупланды. Был иһә башҡорт халҡының йола һәм милли байрамдарын яҡшы күз алдына баҫтырырлыҡ мәғлүмәт бирә.

Этнографтар йолаларзы ғаилә-көнкүреш йолаларына һәм календарь йолаларға бүлеп өйрәнә. Һүз материалынан

сығып, фольклорсылар йолаларзы һәм уларға бәйле тыуған жанрзарзың сикләүен киңерәк күзаллайзар. Мәҫәлән, Кирәй Мәргән фекеренсә, йолаларзы һәм уларға ҡараған жанрзарзы ваҡыт-мизгел ("Нардуған", "Кәкүк сәйе", "Ҡузғалаҡ байрамы", "Ҡарға бутҡаһы", "Ямғыр теләү", "Йыйындар", "Һабантуй", "Баш итенә йәки Һарығаяҡҡа саҡырыу", "Ҡаз өмәһе", "Кейез" йәки "Тула баҫыу"), ғаилә һәм тормош-көнкүреш (бала тыуыуға бәйле йолалар, Айыу байрамы, туй йолалары, мәйет озатыуға бәйле йолалар), им-том (имләү, әженләү, осоҡлау, ҡот ҡойоу, бүҫер ҡыуыу, татран ҡыуыу, биртек һорау), ырымлау, сихырлау бүлемдәренә айырып була.

Фольклористика фәне йәһәтенән быңдай ентекле, бүленеш үзен аҡлай һәм тикшеренеүзәр өсөн ҡулайлы. Әммә беззе йолаларға ҡағылышлы аш-һыу лексикаһы ҡызыҡһындыра, йәғни йолалар беззең өсөн этнолингвистик тикшеренеү объекты булып тора. Был осраҡта этнографтарзың тәҡдим иткән бүленеше йәтешерәк. Шулай за аш-һыу лексикаһын тикшергәндә ҡайһы бер үзенсәлектәр зә ҡалҡып сыға. Классификация мәсьәләһендә улар за иғтибарға алынырға тейеш. Мәҫәлән, календарь йолаларҙың да, ғаилә-көнкүреш йолаларының да эсендә дингә бәйле һәм уға бәйле булмаған төркөмсәләрзе айырырға мөмкин.

## § 2. Календарь йолалар һәм уларға бәйле аш-һыузар

Йолаларзың шундайзары бар: улар бары билдәле бер мизгелдә генә атҡарыла. Яңы йыл тыуыуын Науруз байрамы менән, яз килеүен Ҡарға бутҡаһы, унан Кәкүк сәйе менән билдәләһәләр, язғы эштәр бөткәс иһә Һабантуй байрамы үткәрелгән. Йәйләүзәргә сыҡҡан осорза - йыйындар, көзөн - Сөмбөлә байрамы, ҡар яҡкас - Һуғым байрамы, Ҡаз өмәләре узғарылған. Йолалар бер-берейһенән мизгел һызаттары менән генә түгел, ә үтәлеш формалары, башҡарылған тәртиптәре менән дә айырылған.

Заманында һәр байрамдың саҡырыу рәүеше үзенсә булған. Ырыу-ара үткәрелгән йыйындарға, ат еткән урынға - ат, хат еткән урынға - хат ебәреп, ҡунаҡ йыйғандар. Ҡарға бутҡаһына Алсабыр әбей менән бала-саға һәр ҡапҡаға борола-һуғыла, ҡарға булып ҡарҡылдап саҡырыр булған. Был саҡырыуза байрамға барыузың шарты әйтелә:

Ҡарға әйтә: "ҡар-ҡар",
Туйым етте, бар, бар!
Ярма, күкәй алып бар,
Һөт, майыңды һалып бар.

(12. 197)

Науруз байрамына барыу өсөн аҡса биреү шарт. Шуға ла: "Науруз хаҡы - бер алтын", - тип ҡабатлайзар. Ә Нардуған байрамына саҡырғанда бары изге теләктәр теләйзәр, һөрәнләмәйзәр. Әммә башҡа байрамдарға барыу шартын белгән кеше байрамға буш ҡул менән килмәй.

Саҡырылмаған ҡунаҡты башҡорттар артыҡ күрмәгән, киреһенсә, уны "тәңре ҡунағы" тип хөрмәт күрһәткән. "Маҡтап йөрөйһөң", "Яҡшының ҡунағы - бер көндә", тип һыйлаған, ә инде саҡырылып та килмәүзе языҡ эш тип белгән. Йола байрамына килмәү, мәҫәлән, һаранлыҡ билдәһе тип баһалана. Ҡарға бутҡаһына саҡырыусылар шулай ти:

Ҡарғатуйға бар, бар!
Ҡарғатуйға бармағандың
Күңеле булыр тар, тар.

(19. 200)

Йыйын-байрамдарза ҡәзимге ризыҡ йыйыла. Әммә ризыҡ бергә ҡушылып бешеп сыҡҡас, ул инде ҡәзимге булмай. Сөнки күмәк кешенән йыйылып, бер ҡазанда, бер мейестә, бер табала бешә һәм бергәләп ашала. Шул уны йола ризығы итә. Берәүзең ризығы менән, мәҫәлән, ҡорбан ғәйетендә бер кеше биргән малды салып, күмәк кеше һыйлана икән, ул да йола ризығы була. Йола байрамдарына махсус әзерләнә торған аш-һыу за (ҡарға бутҡаһы ла, ураҡ бөткәс ер өҫтөндә әзерләнгән бутҡа ла, кәкүк сәйенә килтерелгән аҡ ризыҡ та, яз башында әруахтарға аят уҡытҡас, ашала торған баш ите лә) шундайзар рәтенә инә.

Йола ризығының мәжлестән һуң артып ҡалыуы, етем-еҫергә, ҡош-ҡортҡа өлөш сығарылыуы шарт. Ҡарға бутҡаһы байрамында ҡарғаларға өлөш ҡалырлыҡ самала бутҡа бешерелә. Кәкүк сәйендә кәкүк ҡунған ағас төбөнә ҡойоп китерлек аҡ ризыҡ арттырыла.

Күмәктән әзләп йыйылып, шул ризыҡ әзерләнеүе, уның артып ҡалыуы киләһе уңыштың, аш-һыузың мул булыуын теләүзе аңлата. Ҡарға бутҡаһы байрамында ашнаҡсыларзың:

Иләк менән иләп тор;
Күнәк менән ҡойоп тор,-

тип һамаҡлауы ла ырыҫ теләү булып тора. Был теләк Науруз байрамында асыҡтан-асыҡ әйтелә:

Йылдың башы уң булһын,
Ризығы мул булһын,
Игендәр шашып уңһын,
Ҡазандар ташып торһон!

Йола байрамдарында, ҡунаҡ йыйған табында өләш һөйәге өләшеү - үзе бер йола тәртибе. Һәр өләштөң символик мәғәнәһе бар. Ҡош итен бүлгәндә, мәҫәлән, ҡыззарға ҡанат биреү - уларзың ата йортонан тизерәк кейәү йортона күсеүен, малайзарға тояҡ (бот) биреү - уларзың ил гизеүен, күпте күреп, аҡыл туплауын теләү ул. Ә хужаға малдың башын тотторою - уның баш булыуын, хужалығын таныу билгеһе.

Табында өләш бүлгәндә, һәр кемдең йәмғиәттәге һәм ғаиләләге урыны иҫәпкә алына, иерархия тәртибе күзәтелә. Өләшкә бәйле әле әйтелгәндәр һәм тояҡлы малды, ҡошто билдәле һандағы өләштәргә бүлеү йолаһының тотороҡлашыуы - халыҡтың һунарсылыҡ, унан малсылыҡ кәсебе менән борондан шөғөлләнеүенән, табышты уртаҡлашып ашау, шул уҡ ваҡытта һәр кемдең йәмғиәттәге урынын һәм вазифаһын иҫәпкә алыу

традицияhынан килә. Мәжлестәге "хезмәт бүленеше" лә (табын хужаhы, көрәгәсе, аяҡсы, ҡурайсы, йырсы, йомошсо), урынлашыу тәртибе лә (түргә абруйлы аҡhаҡалдарзы, ил ағаларын, шуға етә батырзарзы ултыртыу), йырсы менән ҡурайсыны ихлас тыңлап, "Һай шулай!", "Вай, вай!", "Һай, көй икән!" кеүек hүззәр менән ҡеүәтләп, көй күтәрешеү зә (йәғни берзәмлек күрhәтеү) ырыу йәмғиәтендәге тәртиптәрзең үзенсәлекле сағылышы ул.

Йыйындарзың, мизгел байрамдарының олоhо ла, кесеhе лә башҡорт йәмғиәтендә мөhим ижтимағи hәм тәрбиәүи әhәмиәткә эйә булған. Йыйындарза, мәҫәлән, ырыу-ара мәсьәләләрен, ил язмышын уртаға hалып hөйләшкәндәр. Һуғым ашы кеүек туған-тыумасалар байрамында ғаилә-көнкүреш хәлдәре тикшерелгән. Аулаҡ өй, кис ултырыу йолалары йәштәрзе күзләштерү, таныштырыу өсөн ҡулайлы саралар булған. Йәғни йола байрамдары халыҡты берләштергән, тиңләштергән.

Йола буйынса, hәр кем үз өлөшөн башҡаларға ауыз иттерергә тейеш. Шуға күрә ул бер нисә бүлемгә бүленмәле була. Ҡунаҡтарға өлөш булгәндә өлөшсө былай тип hамаҡлай:

Малдарыңа ҡот килhен,
Йот килмәhен, туҡ килhен,
Ҡортоң осhон кейәнән,
Ҡолон тыуhын бейәнән,
Тай-тулағың туҡ булhын,
Ҡай-ҡортоғоз куп булhын!

(2. 164)

Был һүҙҙәргә яуап итеп, ҡунаҡтар былай ти:

Рәхмәт яҡты йөҙөгөҙгә,
Рәхмәт яҡшы һүҙегеҙгә!

йәки:

Өйөгөҙ - яҡты,
Һүҙегеҙ - татлы,
Үҙегеҙ - яҡшы!

Хушлашҡанда ла ҡунаҡтар хужаларға рәхмәттәр уҡып, изге теләктәр әйтә. Элегерәк уның ҡалыплашҡан ошондайыраҡ әйтеме лә булған:

Ҡайһы өйҙәрҙә мәжлестәр бар,
Фәрештәләр: "Амин!"- тигән
Доғаға ҡул күтәргәндә
Улар беҙгә: "Амин!"- тиер.
"Амин!"- тийәйек беҙҙәр ҙә -
Теләк-доға ҡабул булһын,
Фәрештәләр: "Амин!"- тигән
Сәғәттәргә тура килһен.

Ғөмүмән алғанда, шуны айырым билдәләп китергә кәрәк: һәр йоланың табыны булғандай, һәр табындың да үҙ йолаһы булған. Уларҙы теүәл үтәү - саҡырылған һәм саҡырылмай ҙа килгән ҡунаҡтарҙы хөрмәтләү, уларға ысын күңелдән ихтирам күрһәтеү ул. Йола байрамдары, байрам табындары халыҡты берләштереүсе, туғандарҙы татыулаштырыусы мөһим социаль сараға әүерелгән.

Алдағы бүлектә билдәләп киткәнебеҙсә, башҡорттар борон-борондан һунарсы, малсы булған, ҡорт та ҡараған,

балыҡ та тотҡан, иген дә иккән. Ер-һыуҙың матурлығын, уңайлылығын шуға ла ошо кәсептәр күҙлегенән баһалағандар. Быуаттар буйы шөғөлләнә торғас, һәр кәсептең үҙ йолаһы, үҙ фольклоры хасил булған.

Эшкә тотоноп киткәндә үк, уның уңышлы башланып, уңышлы тамамланыуын көҫәү йолалары ярҙамында бойомға ашырырға тырышҡандар. Мәжүси замандарҙа уҡ илаһи заттарға, әруахтарға мөрәжәғәт итеп, "Ҡулдың ҡеүәтен бирһен!" кеүегерәк эш башы теләге әйтелгән. Теләктәр эш ҡоралына ла ("Туҫтаҡкайым, тулып кит!"), объектҡа ҡарата ла ("Йыуа, йыуа, йыуа, күрен!") әйтелгән.

Эш башы теләктәренең ҡайһы берәүҙәрендә ялбарыу мотивын теләк-маҡсат белдереү алмаштыра:

Эй, еләктәр булһа ине,
Силәктәрем тулһа ине,
Матур ҡыҙҙарым менән,
Яратҡан әбейҙәрем менән,
Ашарға яҙһа ине!

(2. 23)

Башҡорттарҙа һунарсылыҡ кәсебе нык үҫешкән була, тигәйнек. Башҡа халыҡтарҙың һунарсылары кеүек, башҡорттар ҙа, ауға сыҡҡанда теләк теләгәндәр. Әммә бында кейектең ысын исеме әйтелергә тейеш булмаған. Халыҡтың ышаныуы буйынса, үҙенең исемен телгә алғанды кейек-ҡош һиҙә лә алдан уҡ һаҡланыу сараһын күрә икән. Шуға күрә һунарсылар телендә: "айыу" һүҙе "олатай" һүҙе булып яңғыраған, ә "ҡыр һыйыры"-

боланды, "ҡыр кәзәһе"- илекте (ҡоралайзы), "көлтә ҡойроҡ, йылтыр күз" төлкөнө аңлатҡан.

Һунар кейегенә мөрәжәғәттәрҙән айырмалы рәүештә балыҡҡа төбәп әйтелгән теләктә маҡтау ҙа, иҫкәртеү ҙә, янау ҙа юҡ, бойороу ғына бар:

Балыҡ, ҡап, ҡап,
Яр башында ялтырап ят!

йәки:

Яҡын-яҡын килеп ят,
Азағына ҡарап ҡат,
Ҡармаҡ һалдым - йүгереп ҡап,
Үзеңә тигәнде тап!

( 247-248)

Малсылыҡҡа бәйле йолалар башлыса ҡот, түллек төшөнсәһе менән бәйле.

<u>Ҡот</u> - күзгә күренмәҫ абстракт төшөнсә, әммә халыҡ уның барлығына ышана. Мал тотоусылар иҫәпләүенсә, ул - малдың түбәһендәге йә һыртындағы өлтөгө. Мал һатҡанда ҡотто алып ҡалып була. Ҡоттоң магик ҡөзрәтле үз символдары бар. Улар төрлө ризыҡ, аш-һыузарзан булыуы мөмкин.

Символдарзың магик көсөнә ышаныу төрлө өмәләрзә, бигерәк тә торлаҡ ҡороуға бәйле йолаларза асыҡ күзәтелә, мәҫәлән: нигез ҡоролаcаҡ урынға, тупһа тапҡырына аҡ таш һалыу, нигез ҡороусыға ауылдаштарының ашамлыҡ килтереүе, изән майы (изән аҫтына май һалып ҡалдырыу). Бында аҡ таш - аҡ бәхетте, нигез ҡоролған ергә таш һымаҡ нығынырға теләүзе, төрлө

йорттан килгән ризыҡ - май муллыҡты символлаштыра. Йорт төзөгәндә, тула, кейез баҫҡанда, иген урғанда, ашлыҡ һуҡҡанда һәм ошондай күмәк көс талап иткән осраҡтарза өмә үткәреү, йәғни күп кешенең көсөн бер урынға туплау йолаһы бар. Бында күмәк көс кенә түгел, килтерелгән ризыҡтар за берләшә һәм берзәм табын ҡорола. Был матур йола ауыл ерзәрендә бөгөнгәсә һаҡланып килә.

Мәжүсилек билдәләре иген игеүгә бәйле йолаларза ла күзәтелә.

"Боронғо кешеләр орлоҡ сәсеүзе Ерзең түлләнеүе (ауырға ҡалыуы, ғоманлы булыуы) тип белгән. Башҡорттар йомортҡа түллек символы, тип уның магик көсөнә инанған. Сәсеүлекте һөрөп, тырматып, йомшартыу - Ер-әсәнең күңелен яулау, уға түлләнеү алды тәрбиәһен күрһәтеү ул. Ошо хәстәрлек һәм сәсеүлектә йомортҡа тәгәрәтеү орлоҡ сәсеүгә һалынған магик мәғәнәне, түллек төшөнсәһен көсәйтә. Ә инде илаһи заттарға:

Күк инәһе - күк яулыҡ,<br>
Ер атаһы - ерән һаҡал!<br>
Түбә туҡлыҡтары бир!

йәки:

Ер!Ер! Көсөң бир!<br>
Берзе бир, өсөн бир,<br>
Ябаға тайзың көсөн бир ... -

тип ялбарыу - "түлләнгән Ерзең" мул уңыш биреүенә һаналған илаһи заттарзан булышлыҡ һорау ул" (2-24).

Дөйөм алғанда, кәсептәргә бәйле йолалар хезмәтте ойоштороу, уны еңелләштереү, ырамлы итеү маҡсатынан сығып тыуҙырылған һәм артабан традицияға әүерелгән боронғо ғөрөф-ғәҙәттәр ул.

Башҡорт милли йолалары һәм байрамдары һәр ваҡыт күмәк түкланыу, һый, мәжлес менән озатыла. Ҡайһы бер йолаларҙың үҙҙәренә генә хас махсус ризыҡтары, аш-һыуҙары бар. Күп байрамдарҙа иһә бишбармаҡ, ҡуллама, ҡаҙы, тултырма, ҙур бәлеш кеүек иң тәмлеләрҙән һәм ҡәҙерлеләрҙән һаналған ризыҡтар һәм аш-һыуҙар ҡуйыла.

Махсус ашамлыҡтар менән озатылған, халыҡта киң таралған йолаларҙы ентекләп ҡарап үтәйек. Иғтибарҙы иң әүәл мизгел йолаларына йүнәлтәйек.

<u>Науруз байрамы.</u> Ул көн менән төн тиңләшкән мәлдә (21 март) башлана ла ай ахырына тиклем һуҙыла. Уны халыҡта Яңы йыл башы, Яңы йыл байрамы тип тә йөрөтәләр. Бөтә төрки халыҡтарына хас булған был йоланың башы бик тәрән тарих төпкөлдәрендә ята.

Науруз байрамына алдан әҙерләнәләр. Һәр аймаҡ, һәр ауыл уны ҡайҙа, нисегерәк үткәреү тураһында һүҙ беркетә. Науруз башланғас та, иртә менән бөтә бала-саға, үҫмерҙәр, йәштәр ауылдың ҡарттарын күреп, уларҙы сәләмләп, изге теләктәр әйтеп, фатиха алып сығырға тейеш. Шулай уҡ туғандарҙың хәлен белешеү ҙә мотлаҡ.

Науруз тыуған көндә һәр өйҙә науруз ашы бешерелә. Ул былай әҙерләнә. Бешкән итте ваҡ киҫәктәргә тураптабаҡҡа һалалар. Өҫтөнә һуған турап, борос һибеп, тоҙлоҡ (һөҙмә) ҡоялар. Ит өҫтөнә алдан быҡтырылған һәм

һурпала бешерелгән бойзайзы йәйеп сығалар. Бойзай-туҡлыҡ, ырыҫ билдәһе. Уны бешергәндә түбәндәгесә һамаҡлайзар:

Науруз йылға баш булыр,
Бойзай ашҡа баш булыр,
Бойзай уңһа, аш булыр,
Уңмаһа, таш аш булыр.
Йылдың башы уң булһын!
Ырызығы мул булһын!
Игендәр ташып уңһын!
Ҡазандар ташып торһон!
Бир көндәрзең илен!
Илдәр булһын имен!

Ашағанда иң әүәл бойзайзан ауыз итәләр, сөнки бойзай аштың иң олоһо һанала. Өйгә ингән һәр кеше уны тәмләп хужаларға изге теләктәр әйтергә тейеш. Уларға яуап итеп, йорттағы олораҡ кешеләр инеүселәргә өгөт-нәсихәт әйтә, фатиха бирә. Был көндө осрашҡанда һәм хушлашҡанда һәр кем: "Науруз булһын мөбәрәк!" - тип әйтергә тейеш. Был - йыл ҡотло, бәрәкәтле, уңышлы булһын тигәнде аңлата. Йылдың нисек килеүе - Науруз байрамының нисек үтеүенә бәйле, тип ышанған халыҡ. Шуға күрә матур итеп кейенгәндәр, яҡты йөзлө, киң күңелле, изгелекле, дәртле булырға тырышҡандар. Шул маҡсатта төрлө уйын-көлкөләр ойошторолған, Наурузға бәйле йырзар, таҡмаҡтар, һамаҡтар әйткәндәр. Бына шуларзың ҡайһы берзәре:

а) Науруз килде. Ҡарттарыңа
Кер, күреп сыҡ!
Һәр береһен ҡотлай-ҡотлай
Күрешеп сыҡ!
Һәр береһенә күстәнәс бир,
Бир сазаҡа -
Йәннәт булыр киләсәгең,
Һай, иншалла!

б) Наурузда кем ҡарттарҙың
Хәлен белмәй,
Шул кешенең ишегенән
Ырыҫ инмәй.
Наурузда онотҡандың
Ололарҙы -
Эшкинмәйсә, уңға-һулға
Оролғаны.

Науруз байрамдарында ат сабыштырыу, көрәш, ҡыз ҡыуыу, тәкә тартышыу һәм башҡа төрлө бәйге-ярыштар уҙғарылған. Еңеүселәргә бүләкте мир менән (йәғни ауыл, аймаҡ) йыйғандар.

Науруз айында никах туйы үткәреү ҙә изгегә юралған.

Шулай итеп, Науруз байрамы бар ауыл халҡын берләштереүсе, татыулаштырыусы ҙур һәм әһәмиәтле байрамдарҙың береһе булған. Уны бергәләп тукланыу һәм күңел асыу сараһы итеп кенә түгел, ә кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе көйләүсе, уларҙы бер-береһенә

яҡынайтыусы, әһәмиәтле социаль функция йөрөткән Фатиха байрамы тип ҡарарға кәрәк.

<u>Ҡарға бутҡаһы</u> - язғы йола-байрамдарзың береһе. Ул ҡар иреп бөтөп, ер йылынғас узғарыла. Был байрамда тик ҡатын-ҡыззар һәм бала-саға ҡатнаша. Уны һәр ауыл элек-электән билдәләнгән урында үткәргән. Унда мотлаҡ ҡарғалар ояһы булырға тейеш.

Байрамды узғарыу өсөн әбей-һәбей араһынан абруйлы бер ҡатынды Алсабыр, йәғни башлап йөрөүсе итеп һайлағандар. Уның етәкселегендә бала-саға байрам көн иртәһендә ҡарға булып ҡарҡылдай-ҡарҡылдай халыҡты ҡырға сығырға саҡырған. Йоланы белгән ҡатын-ҡыз ҡайһыһы ярма, ҡайһыһы май, ҡайһыһы икмәк-тоз, ҡайһыһы сәй-шәкәр алып, билдәле урынға йыйылған. Ҡазан аҫҡандар һәм бутҡа бешерергә ҡуйғандар. Бутҡа өсөн тары, бойзай ярмаларына өҫтөнлөк бирелгән.

Бутҡа бешкәнсе, бала-саға төрлө уйындар ойоштորған, ҡыз-ҡырҡын таҡмаҡ әйтеп бейешкән, әбей-һәбей ҡумыз тартып, бейеүселәрзе дәртләндереп ултырған. Бутҡа ашалып, сәй эселеп бөткәс, ҡалған бутҡаны ағас ботаҡтарына һылағандар, түмәрзәргә һалғандар.

Төрлө теләктәр әйткәндәр, ҡарғаларға мөрәжәғәт итеп, уңдырышлы йәй килеүен һорағандар.

Шунда уҡ ямғыр теләү йолаһы ла узғарылған. Йыйылған халыҡ ҡарғаларға мөрәжәғәт итеп, былай тип һораған:

Ямғыр яузыр, ямғыр яузыр,
Ямғыр яузырһаң,

Ауызыңа май булыр!

(2. 197)

Ямғыр теләүзең башҡа төрлө һамаҡтары ла бар. Төрлө урында уны төрлөсә әйтәләр. Ҡайһы бер яҡтарҙа һыуы бушаған ҡазанды түңкәргәндәр. Шул ямғыр яузыра тип ышанғандар. Был йола халыҡтың мәжүсилек дәүерзәренән килгән ышанысын, тәбиғәткә булған мөнәсәбәтен сағылдыра.

<u>Кәкүк сәйе</u> - икенсе язғы байрам. Исеменән үк аңлашылыуынса, ул тәүге кәкүк ҡысҡырыуы ишетелгәс тә атҡарыла. Байрамға сығыр алдынан бала-саға өй беренсә йөрөп ризыҡ йыя. Һөт ризыҡтарына, йәғни "аҡҡа" өҫтөнлөк бирелә. Йоланың эстәлеге - кәкүк ҡоштоң күңелен күреү. Шуға ҡырға матур кейемдәр кейеп сыҡҡандар, кәкүкте маҡтап йырзар йырлағандар, һамаҡтар әйткәндәр, күңелле уйындар ҡорғандар. Ашап-эскәс, кәкүк ҡунған ағас төбөнә аҡ ризыҡтар: һөт, ҡатыҡ, эремсек, ҡорот, ҡаймаҡ ҡойғандар. “Аҡ“ менән һыйлау халыҡта элек-электән ҡот, изгелек теләү ритуалы булып һаналған. Шулай иткәндә кәкүктең күңеле йомшара, бәлә-ҡаза саҡырмаясаҡ тип ышанғандар. Ә бит халыҡта кәкүккә шомланып, шикләнеп ҡарау бар. "Өй башына ултырып ҡысҡырһа, йортҡа ҡайғы килә", "Ауылға осоп килһә, аслыҡ була", - тип юрағандар. Шуға күрә, был байрамда кәкүккә арнап ошондайыраҡ йырзар йырлағандар:

Саҡырмасы, кәкүк, эй, каршымда,
Саҡырһаңсы ағас башында,
Саҡырмасы, ҡошҡай, эй, ҡаршымда, -
Хәсрәт кенә бирмә башыма.

"Кәкүк сәйе" йолаһында ла башҡорттарзың ҡошҡорттарға, ғөмүмән, тәбиғәткә булған мәрхәмәтлелеге, изге күңеллелеге кәүзәләнеш таба.

Башҡорттарза туҡланыу-ризыҡланыуға бәйле йәнә "Ҡузғалаҡ байрамы" тигән йола йәшәп килгән. Исеменән үк аңлашылыуынса, ул яз көнө, ҡузғалаҡ сыҡҡас узғарылған. Әммә был байрамды ҡырға ҡузғалаҡ ашар өсөн сығыу тип кенә, ябайлаштырып аңларға ярамай. Ул да халыҡтың тәбиғәт эйәләренә, хозай тәғәләгә ҡышты имен-аман үткәндәре, ризыҡлы язға килеп еткәндәре өсөн ҡыуаныс һәм рәхмәт йөзө күрһәтеү. Шуға ла бында ҡорбан салғандар, уйын-көлкө, төрлө бәйгеләр үткәргәндәр. Әлбиттә, иң тәү ризыҡ ҡузғалаҡ булған. Уны сей көйөнсә лә ашағандар, бутҡа итеп тә бешергәндәр. Витаминға һыуһаған язғы организм өсөн уның файзаһы бигерәк зур булған.

Ҡузғалаҡты беренсе башлап ҡапҡанда: "Мин киләмен- ауызың ас, мин киләмен - зәңге ҡас!" - тигәндәр. Бында боронғо халыҡтың һүз магияһына ышаныуы, тәбиғәтте тере итеп ҡабул итеүе сағыла. "Мин киләмен - ауызың ас!"- ти ҡузғалаҡ, йәғни "туйындырам, әзер бул!" - тип әйтеүе иһә, ғәмәлдә, цинга ауырыуын ҡыуалау ул. Ҡузғалаҡта был сиргә ҡаршы тороусы дарыу-витаминдар булыуын белгән боронғо халыҡ.

Быңдай язғы байрам төньяҡ-көнбайыш башҡорттарында "<u>Көпшә йыйыны</u>" тип йөрөтөлгән. Ул бер нисә көн, ҡайһы берзә азна буйы барған. Был байрамда иң төп ризыҡтар балтырған буҡкаһы, кесерткән, ҡузғалаҡ ашы, зәржә өйрәһе булған (көпшә - балтырғандың синонимы). Бынан тыш, өйзән килтерелгән ашамлыҡтар за бер табынға һалынған һәм уны һәр кем тәмләп ҡараған. Был йола ла, берзән, халыҡты туплау, күңел асыу сараһы булһа, икенсенән, уның иң боронғо функцияһы - тәбиғәткә, тәбиғәт хужаларына, аллаһы тәғәләгә биргән ризыҡтары өсөн рәхмәт әйтеү, илгә ҡот һәм бәрәкәт теләү булған.

Башҡорттарза йәнә <u>ямғыр теләү</u> зә элегерәк айырым йола булып йөрөгән. Ҡайһы бер яҡтарза уны ямғыр буҡкаһы тип тә йөрөткәндәр. Этнографтар С.Н.Шитова менән Р.Ғ.Ғәзелгәрәевалар языуынса, был йола борон киң таралған булған. Озағыраҡ ямғыр яумай торһа, махсус тәғәйенләнгән кешеләр өйзән-өйгә йөрөп ярма (ғәзәттә бойзай, арпа ярмаһы), һөт, май, ҡаймаҡ, йомортҡа һәм башҡа ризыҡтар йыйғандар, һыу буйында ҡазан аҫҡандар. Ямғыр буҡкаһы бешкәнсе, уйын-көлкө ойошторолған, әбейзәр доғалар уҡып, теләктәр әйткәндәр. Буҡка ашалып бөткәс, "һыуға һалыш" башлана. Тәүзә мулланы йә икенсе бер оло кешене һыуға һалалар. Бөтәһе лә ямғыр теләй:

Ямғыр, яу, яу,
Һимез һарыҡ һуйырмын,
Һимез ерен ҡуйырмын,
Ямғыр, яу, яу, яу!

Бала-саға, үҫмерҙәр әсе итеп, зыйлатып һыҙғыра, уларға һыбыҙғылар ҡушыла.

Ямғыр, яу, яу,
Беҙ булайыҡ һау-һау! -
тип һамаҡлайҙар.

(22. 204)

Көньяҡ башҡорттарҙа йәнә "ҡурмас һыйы" йәки "ҡурмас ҡурыу" йолаһы булған. Көҙөн, игендәр урып-һуғылғас, күмәкләшеп ҡырға сыҡҡандар. Һәр кем яңы ашлыҡтан (башлыса бойҙайҙан) өлөш килтергән. Уны ҙур ҡаҙандарҙа майҙа йәки ҡоролай ҡыҙҙырғандар. Бында ла төрлө теләктәр әйтелгән, уйындар ойошторолған. Ҡурмастан барыһы ла ауыҙ иткән, ҡоштарға ла өлөш сығарғандар. "Ҡурмас һыйы", шулай итеп, үҙенсәлекле көҙгө уңыш байрамына әүерелгән.

Ҡурмас бигерәк тә балаларҙың яратҡан ризығы. Ул элегерәк һәр йортта тигәндәй әҙерләнгән. Уның популярлығы тураһында үткән быуат тикшеренеүсеһе А.Игнатович быны нимә тип яҙып ҡалдырған: "Есть еще у башкир любимое кушанье - это курмач, но он делается только осенью по той причине, что курмач приготовляется из ячменя, поспевающего уже осенью. Сначала ячмень обжарят на обломке железного листа, вместо сковороды ... далее очищают от шелухи и толкут, а потом смешивают с конопляным жареным семенем, прибавляя по вкусу и достатку хозяина коровьего масла .. " (9. 54).

Башҡорттарҙа "Ҡурмас һыйы" йолаһы элегерәк шаҡтай тотороҡло һәм нығынған булған, күрәһең. Был турала Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районына ҡараған Ейәнсура ауылы янындағы бер урмандың "Ҡурмас" тип аталып йөрөтөлөүе лә әйтеп тора.

Йыл аҙағында, көн ҡыҫҡа булыуҙан туҡтағас, Нардуған байрамы уҙғарылған. Ул, ғәҙәттә, ҡышҡы селләнең (25 декабрҙән 2 ғинуарға тиклем) беренсе аҙнаһына тап килгән. Бер йәки бер нисә иркен йортта йыйын әҙерләнә. Сапҡынсы бала-саға өйҙән-өйгә йөрөп хәбәр тарата, теләктәр теләй. Теләкте урамда ла әйтеп йөрөйҙәр:

Нар, нар, нарына,
Рәхмәт һеҙгә барына!
Мал-тыуарың түл йәйһен,
Бала-сағаң ит ейһен!
Малың ашһын ҡуранан,
Ашың ашһын буранан!
Илең-йортоң һил булһын,
Күңелегеҙ киң булһын!

Өйгә инеп шулай тигәс, өй хужалары үҙҙәре ни ашаһа, хәбәрселәргә шунан өлөш сығарған.

Ә йыйынға һәр кем ошо байрамға тип алдан әҙерләп ҡуйған ҡәҙерле риҙыҡтарын: итен, ҡаҙы-ялын, майын, балын, ҡоротон, һалмаһын, ярмаһын тотоп килә. Ул риҙыҡтар бешкәнсе, аят уҡытыла, доға ҡылына, мулланың вәғәздәре, өгөт-нәсихәттәре тыңланыла. Унан йәштәр

тышта уйын-көлкө ойоштора. Һәр кем байрамды күтәренке күңел менән ҡаршыларға тырыша.

Килтерелгән ризыҡтар бергәләп ашалғас йәштәрзең уйын-көлкөһө дауам итә, ҡарттар иһә урам буйлап тәкбир әйтеп уза. Аулаҡ йортта ҡыззар йондознамә аса, фал һала, кейәүгә сығырзарын, буласаҡ хәләл ефеттәрен юрай. Иртәгеһен өйзән-өйгә ҡунаҡҡа йөрөшөү башлана. Байрам ике-өс көнгә, хатта азнаға һузыла. Һәр мәжлестә ошолайыраҡ Нардуған һамаҡтары әйтелгән:

Нардуғаным нар булһын,
Эсе тулы нур булһын!
Нардуған көйөн көйләгәнгә,
Бәхет, ырыҫ теләгәнгә,
Йорт хужаһы бай булһын,
Дәүләт ырыҫлы булһын!

"Науруз байрамында"ғы кеүек бында ла мәжлестәрзең төп маҡсаты бер-берендә бәхет, ҡот, ырыҫ теләү, кешеләрзән фатиха алыу булған.

Мизгел байрамдары зауыҡ өсөн күңел асыу сараһы рәүешендә генә үткәрелмәгән. Борон-борондан, шаманлыҡ традицияһы көслө булған дәүерзәрзә, уларзы илаһи көстәр менән кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрзе, йәмғиәт, ғаилә тормошон яйға һалыуға, хужалыкта, кәсептә уңыштарға өлгәшеүгә булышлыҡ итеүсе йәғонтоло сара тип белгәндәр. Шуға ла йолаларзы атҡарғанда магик көскә эйә тип иҫәпләнгән һүззәр әйтелгән, йырзар йырланған. Бигерәк тә аш-һыу рационына, һыйланыу ритуалына зур иғтибар бүленгән һәм әһәмиәт бирелгән.

Теге йәки был ризыҡ, аш-һыу төрө ҡайһы бер йолаларҙың төп элементы ла булып киткән.

Үрҙә бәйән ителгәндәрҙән асыҡланыуынса, ваҡытмизгел йолалары халыҡ тормошондағы ғәйәт ҡыҙыҡлы, үҙенсәлекле күренеш ул. Улар беҙгә ата-бабаларыбыҙҙың боронғо аңын, тормошҡа ҡарашын, тәбиғәткә һәм үҙ-ара булған мөнәсәбәттәр нескәлеген аңларға ярҙам итеүе менән әһәмиәтле.

## § 3. Ғаилә-көнкүреш йолалары һәм уларға бәйле аш-һыуҙар

Һәр халыҡтың иң ҙур һәм әһәмиәтле ғаилә-көнкүреш йолаларының береһе - ул туй. Башҡорттарҙа туйҙар бар урында ла бер төрлө генә үтмәй, һәр байрам-йоланың төбәк үҙенсәлектәре булыусан. Шулай ҙа уларҙы берләштереүсе бер нәмә бар: ул да булһа - һый муллығы. Туйға иң тәмле, ҡәҙерле һаналған ризыҡтар әҙерләнә. Улар күп төрлө була, шулай ҙа төп урынды милли ашһыуҙар биләй. Туй һыйының үҙ тәртибе, йолалары бар. Улар махсус ризыҡтар һәм аш-һыуҙар менән оҙатыла.

<u>Көрәгә</u>. Элегерәк һәр туй көрәгә асыуҙан башланған. Көрәгә - ул ҡоҙалар килтергән эсемлек: ҡымыҙ йәки әсе бал. Ғәҙәттә улар мискәгә, йә тәпәнгә һалынған була. Көрәгә асыр алдынан "аҡ эсеү" йолаһы үткәрелгән. Был иһә хужаларҙың ҡунаҡтарҙы һөт йәки ҡымыҙҙан ауыҙ иттереүе була. Аҡ төҫ - изге төҫ. Туй мәжлесен ҡымыҙ, һөт кеүек ризыҡтан башлау изгелек, бәхет теләүҙе

аңлатҡан. Ҡозалар ҡымыҙҙы изге теләктәр әйтеп, маҡтай-маҡтай эскәндәр, ошондайыраҡ йырҙар йырлағандар:

Тәпәндәге ҡымыҙ бигерәк тәмле,
Нисәү икән һауған бейәһе?
Уйнап ҡына көлөп, ай, эсәйек,
Ҡыуанып та ҡалһын эйәһе.

Шунан туй көрәгәһен алып сығалар. Барыһы ла көрәгәне ҡотлап, ай-һайлап ҡаршы ала. Көрәгәгә маҡтау йыры йырлана:

Һай! Көрәгә килә! Көрәгә килә,
Көрәгәләр тулы бал килә,
Көрәгәләр тулы балдар килә,
Кәртә-ҡураларға мал килә! Һай!

(2. 391)

Көрәгә өҫтөнә аҡ таҫтамал ябылған була. Ҡунаҡ һыйлаусыларҙан берәү, бүләк әйтеп, таҫтамалды ала. Уға яуап итеп, ҡыҙҙың атаһы ла бүләк (мал) әйтә. Һыйланыу башлана. Беренсе кәсәне (туҫтаҡ, аяҡты) һәр ҡоза тәңкә һалып ҡайтара. Шулай оло туй башлана.

<u>Һөйһөн килтереү</u> - Ҡурған, Силәбе өлкәһендәге табын һәм ҡатай башҡорттарында "туйлыҡ", (туйҙа һуйыла торған), мал алып килеү шулай тип аталған. Туйлыҡ малы туйҙың беренсе йәки икенсе көнөндә һуйылған.

Туй малын һуйып, тәрбиәләп бөткәс, тәртип буйынса ит бер нисә өлөшкә бүленгән. Йылҡы малының ике яғынан да өсәр ҡабырға, һебәлек (ҡабырға бөткәс йомшаҡ ит) айырым алына.

Ике арт боттоң оса һөйәгенә ҡушылған янбаш өҫтө, ейән һөйәк, ҡыҙҙың туғандарының береһенә бирелә. "Ейән

һөйәк" алған кеше, ҡасан да булһа ҡыҙҙы кейәүе менән саҡырып, уларға күлдәк кейҙерергә, мал бирергә тейеш. Оло кешеләргә ҡабырға-һебә өлөштәре һалына. Ҡоҙасаларға, ҡыҙҙың яҡын апаларына түш ите тейә.

Йыуаса - туйҙың икенсе көнөндә уҙғарыла торған йола. Шуға күрә һыйҙың икенсе көнөн "йыуаса көнө" йәки "йыуаса ашы" тип йөрөткәндәр. Йыуаса - ҡоҙалар яғы алып килгән күстәнәс ашамлыҡтары. Ҡоҙасалар күстәнәс тултырған һандыҡты, йыуаса һандығын, табынға сығаралар. Ул ит, ҡатырылған сәксәк, ҡаҡланған ҡаҙ түшкәһе, аҡ күмәс һәм башҡа ризыҡтар менән тулы була. Һандыҡ эсендә майҙа бешеп тоҡҡа тултырылған бауырһаҡ та була. Тоҡто ҡоҙаса күтәреп бейей. Уға таҡмаҡ әйтәләр, бүләк бирәләр. Һуңынан барыһы ла килтерелгән ризыҡтан ауыҙ итә, ҡоҙаларға ҡот, бәрәкәт теләй. Йыуаса уйын-көлкө менән оҙатыла.

Был көндө кис йәнә бер йола атҡарыла. Ул "һаба йыйыу" тип атала. Һаба йыйыуға барыһы ла сыға. Бер-икеһенең ҡулында һаба (бейек күнәсек) була. Шул һауыт исеме йола атамаһына әүерелгән.

Өйҙән-өйгә йөрөп, шул һауытҡа ҡымыҙ, ә ҡалған силәктәргә төрлө ашамлыҡтар йыялар. Йөрөгәндә төрлө йырҙар, таҡмаҡтар әйтелә. Төрлө мәрәкәләр (биттәрен ҡоромға буяу, өҫ кейемдәренең тиҫкәреһен кейеү һ.б.) башҡарылған.

Һабасылар йола башланыуы тураһында һамаҡлап хәбәр иткәндәр:

Һаба йыйырға сығайыҡ,
Төп ҡоҙанан башлайыҡ,

Ҡозағыйзың йомартлығын,

Ошо ерзә һынайыҡ!

Һаранды үсекләп, йомартты маҡтап, һабасылар төнгә тиклем йөрөйзәр. Һуңынан төп йортҡа ҡайтып, таңға тиклем шау-гөр килеп күңел асалар.

Ҡайһы бер яҡтарза, мәçәлән, Эйек бассейнында, "бирхауай ите" тигән йола үзғарыла. Һәр һыйлаусы пар килгән ҡозаларзы үззәренең өйөнә саҡырып ала. Бында мотлаҡ рәүештә бишбармаҡ бирелә, табын түренә әсе бал ҡуйыла. Уны кәсәләргә ҡойоп бирәләр. Кәсәне ҡайтарғанда һәр кем унның төбөнә тәңкә һала. Бында эселгән балды "мир балы" тип тә әйткәндәр.

Туйзың иң азаҡҡы көнө "хуш ите", "хуш ашы" йәки "сыбыртҡы ите" тип аталған. Был йола көньяҡ Башҡортостанда, бигерәк тә Һаҡмар бассейнында ныҡ таралған һәм хәзерге көндә лә күзәтелә.

"Сыбыртҡы ите" йолаһы түбәндәгесә үзғарыла: ҡыззың ағаһы йәки яҡын туғаны тунды тиçкәре яғы менән кейә, башына бүрек, биленә билбау бәйләп бейей. Уны "сыбыртҡысы" йә "көтөүсе" тизәр. Сыбыртҡыны, ғәзәттә, һаламдан, бесәндән үреп, үрмә осона өс ҡызыл суҡ бәйләйзәр. "Көтөүсе" һалам сыбыртҡыһын болғай-болғай барыһына ла һуғып сыға, үзе: "Ат егеүле, ҡыбырлаһағыз за була! Ат ҡойроғо төйөлгән, айыу туны кейелгән. Хуш! Хуш!"- тип һамаҡлап бейей.

Иң тәүзә ул төп ҡозаға һуға, уныһы сыбыртҡысының билбауына ҡағыз аҡса ҡыçтыра. Һуғылған һәр кем

сыбыртҡы суҡтарына аҡса бәйләй. Аҡса бәйләмәйенсә, сыбыртҡысы уны "ҡамсылаузан" туҡтамай.

Йыйылған аҡсаны сыбыртҡысы ҡыз яғы еңгәләренә, аш бешереүселәргә бирә. Тегеләр, йәнәһе, шул хаҡҡа хуш ашы, сыбыртҡы ите индерәләр. Ғәзәттә, хуш итенә бер нисә аяҡ (ҡазан) бишбармаҡ әзерләнгән була. Уларзы ашап бөткәс, хужалар хушлашыу һүззәрен әйтә. Хуш аяғына барыһына ла аҡ (һөт, ҡымыз, буза) бирелә. Ҡунаҡтарзы йырлап, бейеп, таҡмаҡлап, һамаҡлап озаталар.

Ҡозаларзы озатҡас, "<u>серге ҡағыу</u>" йолаһы узғарыла. Ҡыззың туғандары, мәжлес үткәреүселәр кире өйгә инеп, ҡалған һыйзы ашап-эсеп күңел асалар, именлек, бәхет теләшәләр. Еңгәләр аяҡ аҫтына түшәлгән кейез-балаҫтарзы сығарып ҡағалар, уларзы һуғып-һуғып, әр һүззәре әйтәләр, йәнәһе, ен ҡыуалар. Ошоно "серге ҡағыу" тизәр. Төп ҡоза уларға тәңкә өләшә.

Өйгә "серге ҡағыу" һыйына ингәндә олораҡ ҡатындар ағас юнысҡылары, тап-һап тотоп инеп, уларзы мейестә янған утҡа яға. "Озатҡас, буш ҡул менән ут янына килергә ярамай, юғиһә киткән кеше менән ҡот китә", тигән борондан килгән ышаныу ята бында.

Ҡозаларзы озатҡандың икенсе көнөндә "<u>ҡарта ашы</u>" узғарыла. Был мәжлескә йәш-елкенсәк, ҡыз-ҡырҡын, килендәр генә саҡырыла. Килгән ҡунаҡтар ҡызға ҡашмау, һаҡал яһау өсөн тәңкә, мәрйен, уның бикәстәренә бүләккә йөзөк, балдаҡтар килтерәләр. Бүләк итә торған әйберзәрен еңгәләр, ҡарынға, ҡартаға ҡушып, ҡалаҡҡа һалып

бирәләр. Был йолала йәш ҡатынға түл ҡото, әсәлек бәхете теләү мотивтары күренә. Өләш бүлгәндә, ҡыҙға (буласаҡ әсәгә) эс-ҡарын биреү - ҡатын ҡарынына (бала ятыр урынға) ныҡлыҡ, түллек теләү, ә тәңкә ҡушып биреү ҡот теләүгә ишара.

Ошо мәжлестән һуң еңгәләр китәһе ҡыҙға шаршау тегешәләр, йырҙар йырлайҙар, сеңләү һамаҡтары әйтәләр.

Туйҙа төрлө ризыҡтар, аш-һыуҙар менән оҙатылған башҡа төр вағыраҡ йолалар ҙа атҡарыла. Уларҙың һәр береһенә махсус туҡталып тормайынса, дөйөмләштереп шуны әйтергә була: һәр ике яҡта ла өсәр, дүртәр көнгә һуҙылған туй мәжлесе уйын-көлкө генә сараһы түгел, ә аш-һыуҙар бәйгеһе, бергәләшеп һыйланыу байрамы ла. Ул оҙаҡҡа иҫтә ҡалырлыҡ күркәм булһын өсөн, табынға иң ҡәҙерле, иң тәмле ризыҡтар ҡуйылған, уларҙы әҙерләү өсөн ауылдағы иң оҫта бешереүселәр саҡырылған. Туй һыйына ҡарап хужаларҙың ҡунаҡсыллығы, ихласлығы, матди хәле баһаланған. Шуға күрә лә был байрамға бик етди һәм ныҡлы әҙерләнгәндәр.

Элегерәк башҡорттарҙа "<u>бала бағыу</u>" йолалары киң таралған булған. Улар бер нисә өләштән тороп, тыуған көндән алып, исем ҡушыу мәленә тиклем һуҙылған. Уларҙы түбәндәгесә исемләргә мөмкин: "бала ҡаршылау", "бала күрһәтеү", "ҡарын сәсе алыу", "бала ауыҙландырыу", "исем ҡушыу" һ.б. Уларҙың махсус ризыҡтар менән оҙатылғандарына туҡталып китәйек. Бала ҡаршылау йолаһы ошолайыраҡ үткәрелгән: тыуған көнөндә үк баланы әсәһе менән бергә мунсаға алып

барғандар. Сабыйзы йыуындырғанда кендек инәһе шулай тип һамаҡлай:

Бәхетле, тәүфиҡле бул,
Татлы телле бул!
Мунса ташы,
Бүрәнә башы,
Таштай ныҡ бул,
Бүрәнәләй бүкән бул,
Аталы-инәле,
Алтын ҡанатлы,
Һүззәрең өҫтөн,
Йөззәрең күркәм,
Ҡулдарың эшсән булһын!

Шулай тип сайындырғандан һуң "Су-у-уп!" - тип, сабыйзың һырт буйынан аҡҡан һыузы ирендәре менән аҫтан өҫкә ҡарай һыпырып алып, ситкә төкөрә. Шуны "Бала арҡаһынан йөн алыу" тизәр. Йәнәһе, баланың арҡаһы йөнлө була, уны "Бала йөнө" тизәр. Шунан әсәһенең һөтө менән баланың тәнен һыпыра.

Сабыйзы тәү тапҡыр йыуындырғанда, йыуынтыға ете бөртөк тары һалалар. Башҡорттарза ете һаны изге, ҡотло һанала, ә тары муллыҡ, бәрәкәт символы.

Икенсе йыуындырғанда - туғыз, өсөнсөһөндә - ун бер. Шулай итеп, мунсала йыуындырған һайын ҡырҡ бергә тиклемге таҡ һанынса тары һалып сығалар. Был ырым баланың тарылай тәгәрәп, ырыҫлы, ғүмерле булып үҫеүен теләүзе аңлата.

Сабыйзың сәсен тәүге алыу "ҡарын сәсен алыу" була. Уны теләһә кемдән түгел, күңеленә оҡшаған кешенән генә

алдырырға кәрәк. Ғөсөл алып тороп, сабыйзы ултыртып тотоп торағын. Шунан сәс алыусы сабыйзың сәсен ҡыра.

Ҡарын сәсе баланың ҡырҡы сыҡмаҫ элек алына. Баланың ата-әсәһе ҡарын сәсе алыусыға бүләк бирә. Ҡарын сәсен утҡа яғырға ярамай, уны төрөп, бүрәнә ярығына ҡыҫтырып ҡуялар. Шунан "ҡарын сәсе сәй"ен эсәләр.

Балаға исем ҡушылғас, ҡатындар бала күрергә баралар. Был йоланы "таныша барыу" за тизәр. Таныша барғанда ҡорот, май, бал, баҫмаланған (аяҡланған) еп алып килеү талап ителә.

Йәш балалы ҡатын, кешегә килеп, ҡайтырға булһа:

- Өйзән ҡоро ауыз менән сыҡма, - тип баланың ауызына бал, май яғалар.

Баланың ҡырҡы сыҡҡас, уға тәүге ризыҡ биргәндә, әбей-һәбей "бала ауызландырыу" йолаһына йыйыла. Әсәй йә өләсәй кеше уларға "сабый ебе" (ҡайһы бер урында "кендек ебе") бирә. Ул, аяҡланып, осо төйөлгән була. Аяҡлы еп биреү - баланың тизерәк аяҡланыуын теләү, ололарзан шуға фатиха һорау ул. Еп әбейзәрзең уң тубығына һалына. Улар доға ҡыла һәм ошондайыраҡ теләктәр теләй:

Озон ғүмерле булһын!
Тизерәк атлап китһен!
Ата-әсәһенә изгелекле,
Илгә игелекле булһын!
Тәүфиҡле булһын!
Бәхетле булһын! һ.б.

Шунан һуң күмәкләшеп сәй эсәләр. Сәй янына бал, май, бауырһаҡ йәки сәксәк ҡуйыла. Шуны "еп сәйе" тизәр.

Башҡорт ауылдарында элек-электән <u>нигез ҡороу йолаһы</u> узғарылған. Ҡайһы бер төбәктәрзә ул әле булһа һаҡлана.

Был йола ла ашау-эсеү, махсус һыйзар менән озатыла. Өй нигезе һалған көндө ауылдаштары хужаға төрлө ризыҡ килтерә. Ярзам иткән кешеләргә шул ризыҡтан ашамлыҡ бешерелә. Ул аш-һыу төрзәренә мотлаҡ бутҡа бешереү ингән. Уны "нигез бутҡаһы" тизәр. Был йола бигерәк тә Дим буйы башҡорттарына хас.

Нигез ҡорғанда Ҡорбан да салалар. Ҡорбан итенә ҡарттарзы саҡыртып, аят уҡытып, фатиха алалар. Быны "нигез ҡорбаны ашы" тизәр.

Нигез ҡорғанда урамдан кем уза, шуны саҡырып, май, икмәк менән һыйлайзар. Быларзы "нигез майы", "нигез икмәге" тип атайзар.

Өй күтәреүселәргә май ҡаптыралар. Майзы йәнә өрлөк баштарына, өй мөйөштәренә һөртәләр. Быныһын "өрлөк майы" тизәр. Уны ярзамлашыусыларзың һәр ҡайһыһы ауыз итергә тейеш. Өй һалынып бөткәс, хужаның дуҫ-ише, туған-тыумасаһы өй ҡотларға килә. Ашап-эскәс, бер туҫтаҡ ҡатыҡты нигез буйына күмгәндәр. Был ырым ғүмер буйы аҡтай саф, бәхетле булығыз тигәнде аңлатҡан.

Бура күтәрелеп, йорт әҙер булғас, "<u>балсыҡ өмәһе</u>" узғарылған. Исеменән үк күренеүенсә, ул йола балсыҡ баҫыузан һәм өй һылаузан торған. Был өмәлә тик ҡатын-ҡыз ҡатнашҡан. Иң әүәл күмәкләп йырлашып,

мәрәкәләшеп балсыҡ баҫҡандар. Унан һыларға тотонғандар. Арый башлаһалар, берәүһе:

- Балсыҡ ҡоро! - тип ҡысҡырған. Башҡалары был оранды күтәреп алған. Шунда хужабикә өмәселәргә йә ҡымыз, йә буза (һуңғараҡ дәүерзәрзә әсе бал) килтергән. Уны эсеп ҡатындар бер аз уйын-көлкө ойоштороп ял иткәндәр.

Өмәгә: "Сәсмә күтәрәбез!" -тип, әбей-һәбей килеп инә торған булған. Үззәре менән улар май, ҡорот, бал, икмәк һәм башҡа ризыҡтар килтергәндәр. Өмәгә хәйер-фатиха биреп:

- Бында көн иткән кешеләр озон ғүмерле булһын!

- Иҫәнлек-һаулыҡ, татыулыҡ, тәүфиҡ менән йәшәргә язһын! - тип теләктәр теләп, ризыҡтарын ауыз иттерәләр, ҡалғанын хужабикәгә тапшыралар.

Өйзө һылап бөткәс, ҡибла яҡ стенаның аулағыраҡ бер мөйөшөнә иң оло еңгә бер йомарлам балсыҡты йәбештерә һуға ла: "Минең ҡулым түгел, Ғәйшә Фатима ҡулы," - тип үзенең ҡулының эзен ҡалдыра.

Өй һылағандан ҡалған балсыҡты матур итеп йомғаҡлап, тәрилкәгә һалып, алсаҡ, йомарт һәм уйынды уйын итеп ҡабул итә алырзай бер еңгә кешегә алып баралар. Ул тәрилкәләге балсыҡты ала ла, һауытын йыуып, бер йомғаҡ май, ҡорот һалып, бер бөтөн икмәк тоттороп сығара. Ошо йоланы "өмә балсығын илтеү" тизәр. Ошолай итеп бер нисә өйзән алынған күстәнәстәр менән кис "аулаҡ өй" йолаһын үткәрәләр.

Башҡорттарҙа әлегәсә һаҡланып килгән "Ҡаҙ өмәһе" тигән йола бар. Ул октябрь-ноябрь айҙарында үткәрелә. Кемдә, ҡасан булыуы тураһында алдан уҡ хәбәр еткерелә.

Өмәгә етеҙ егеттәр, таҫыллы ҡатын-ҡыҙҙар саҡырыла, сөнки ҡаҙ йолҡоу үҙенә күрә ҙур оҫталыҡ, тырышлыҡ талап итә.

Егеттәр ҡаҙ салып, йолҡоусыларға индереп тора, уларҙың башҡа йомош-юлдарын үтәй. Ә ҡатын-ҡыҙ өйҙә һике тирәләй ултырып, уртаға ҙур шаршау һалып, уның остарын үҙҙәренә тартып, нығытып, салынған ҡаҙҙарҙы эшкәртә башлай. Йолҡоу эштәре бөткәс тә ҡаҙ мамығын ала һалмайҙар. Һәр кем беләген мамыҡҡа тығып ала ла ошондай һамаҡ әйтә:

Беләгең һимеҙ булһын,
Күңелең наҙлы булһын,
Йортоң ҡаҙлы булһын!

Шулай итһәң, аяҡ-ҡулдар һыҙлауһыҙ була, йәнәһе.

Мамыҡ йыйылғас, ҡаҙҙы таҙалау башлана. Шунан һуң ҡыҙҙар, еңгәләр бер нисәшәр ҡаҙҙы көйәнтәгә элеп, йылға буйына төшә. Унда мәрәкә һүҙҙәр әйтешеп, шаяра-шаяра ҡаҙҙарҙы ағын һыуҙа сайҡаталар. Йылға буйы көлкөнән, ҡурай, гармун моңонан яңғырап тора.

Һыу буйында еңгәләр ҡаҙ ҡауырыйҙарындағы мамыҡты һыҙырып алып, түбәндәгесә һамаҡлап, елгә осора:

Ҡаҙ булып ҡайтығыҙ,
Ҡаҙ булып ҡайтығыҙ,
Ҡыр тултырып ятығыҙ,
Ҡыр тултырып ятығыҙ.

Шулай эшләһәң, киләһе йыл ҡаззар уңа тип юрайзар.

Кисен был өмә байрам, мәжлес төҫөн ала. Ҡаз ашына өмәлә ҡатнашыусылар тотош ғаиләләре менән килә. Һәр береһенә ҡаз итенән өлөш бүлеп бирелә. Иң тәүҙә йәш ҡыззарға ҡанат өләшелә.

Ҡанат итен биргәндә:

- Ҡанатланып өйөңдән тизерәк осоп сыҡ! - тизәр. Борондан ҡыззар ата йортонда тик ҡунаҡ һымаҡ булған, ҡарт ҡыз булып ҡалыу ғаилә өсөн бәхетһезлек һаналған.

Ҡыззарға өлөш бүленеп бөткәс, ололарға бүлеп сығалар. Әгәр ҡаз боото эләкһә:

- Ҡаз шикелле бейеп тор! - тизәр. Баш тотторһалар:

- Башлы бул! - тип әйтәләр.

Ит өлөштәрен кешеһенә ҡарап тараҡандар. Һәр өлөштө һамаҡлап, йырлап биргәндәр.

Мәҫәлән:

Был ҡаз ҡайза ултырған,
Бото өрөп тултырылған!
Өлөшөң ҡулыңдан төшмәһен,
Ипләп!
Ауызың бешмәһен!

Аштан һуң ҡаз майына бешерелгән ҡоймаҡ бирелә. Бирелгән ҡоймаҡты бөткәнсе ашау шарт. Шулай итмәһәң, киләһе йыл хужаларзың ҡазы уңмай икән, тигән ышаныс һаҡланған. Мәжлес йыр, бейеү менән аралаш бара.

Хәзерге ваҡытта был өмә театрлаштырылған күмәк байрам төҫөн алған.

Ҡышҡы һалҡындар төшөп, ҡар ныҡлап ятҡас, ноябрь-декабрь айзарында ауыл халҡы һуғым һуйыу өмәләре үткәрә. Һуғымға тип алдан уҫ йә һыйыр, йә йылҡы малын әзерләгәндәр... Уларзы махсус азыҡ рационы биреп һимерткәндәр.

"Һуғым өмәһенә" хужаның туғандары, күрше-күләндәре йыйыла. Электән һыналған, еңел ҡуллы салыусы саҡырыла. Ирзәр малды йығып салғансы, ҡатын-ҡыззар ҡатнашмай, тик тиреһен һызырып бөткәс кенә һуғым һуйған ергә баралар һәм эштең азағына тиклем ярзам итәләр.

Кисен һуғым һыйы узғарыла. Байрамға өмәлә ҡатнашыусылар бөтә ғаиләләре менән йыйыла. Был һый өсөн малдың түшкә-муйынын бешерәләр. Бынан тыш тултырма (әгәр һыйыр малы булһа) йәки ҡазылыҡ әзерләнә. Әгәр былары булмаһа, ғәйеп һанала. Һуғым ашында йәнә салыу һөйәгенең булыуы ла мотлаҡ. Ул мал салған кешегә бирелә. Ит тәме мал салыусының ҡулына бәйле: "Күңеле ҡаты булһа, ит тә ҡаты була, йомшаҡ, изге күңелленең һуйған ите лә йомшаҡ"- тигән ышаныу бар. Шуға күрә салыусының роле ныҡ баһаланған, ул ҡәзерле ҡунаҡтарзың береһе һаналған.

Мал салыузың да үз тәртибе бар. Шуларзың иң мөһимдәре:

1. Салыусы мотлаҡ сөннәтле булырға тейеш.

2. Малдың башы ҡибла яғына ҡарата ятҡырыла.

3. Салыр алдынан изге доға уҡыу, һис булмаһа "бис-миллаһи-рахманир-рәхим" тиергә кәрәк.

4. Малдың ҡанын сығарыу фарыз, бының өсөн уның үңәсен киҫеү хәйерле. Бына шуларзы теүәл үтәгәндә генә һуғым тәмле, бәрәкәтле була.

Бишбармаҡ өсөн игте ваҡламай, зур-зур киҫәктәргә бүлеп бешерәләр. Бешеп сыҡҡас, уларзы зур табаҡҡа аузаралар. Табындағы абруйлы кешегә уларзы бүлеп, өләшеп биреү эше йөкмәтелә. Өлөш бүлеүзең дә үз тәртибе бар.

Мәҫәлән, ҡош ите ете өлөшкә бүленә: ике бото, ике ҡанаты, муйыны, түше, һырты - һәр береһе бер өлөш.

Һамаҡтарза әйтелгәнсә, һарыҡ ите былай бүленә:

Ете бейек арҡа,

Ете тәпәшәк арҡа,

Муйыны - етегә,

Һигезгүзе - өскә,

Ҡойроҡ йәбешкән ере - бер өлөш,

Янбаш - ике өлөш,

Урта елек - ике өлөш,

Икенсе елек - ике өлөш.

Бәкәлсәйе - тояғы иҫәпкә инмәй. Бөтәһе утыз бер өлөш. Ҡәҙерле ҡунаҡҡа түш һөйәге, билдәмәһе, унан янбаш, елек бирелә. Үзенә тейгән өлөштәрзе ул бысаҡ менән бүлгеләп, телгеләп табындағыларға һоғондора. Халыҡта өлөштәргә бүлеүгә ҡарата ошондай әйтем дә бар:

Салыу һөйәге салыусыға,

Янбаш булыр ҡызға,

Кейәү, улға - бейек үркәс,

Килен, ҡызға - бәләкәй үркәс,

Баш һөйәге башлауға,
Тулараһы - ташлауға,
Һум иттәре ашауға.
Ынтылығыз аш-һыуға!
Майын йотһаң - һимерерһең,
Һөйәк тотһаң - кимерерһең

(12. 289)

Өлөш бүлгәндә, ҡунаҡҡа килеүселәр генә түгел, уларзың өйөндә ҡалған балалары ла иҫәпкә алына. Табын таралған саҡта хужабикә һәр өмәсегә зур ит киҫәген күстәнәс итеп бирә.

Өйгә алып ҡайтыла торған өлөш-ит төрлө урында төрлөсә атап йөрөтөлә. Дим буйында - йүрмә, Ҡызыл йылғаһы бассейнында - мөсә, Силәбе өлкәһендә - ҡарсаға һөйәге, башҡа яҡтарза - мозол, мосол һ.б.

Ошондай ит өлөшө менән элек бәйгелә ҡатнашҡандарзы бүләкләү зә булған. Еңеүсегә, ғәзәттә, һарыҡтың тәүге ҡабырғаһы тәнгәлен биргәндәр. Уны ла төрлө төбәктә төрлөсә атап йөрөткәндәр: көньяҡ башҡорттарында - ҫөбә, дөбә, зебә, зобан ҡабырға, баған ҡабырға, көнсығыш башҡорттарында иһә ул һебә, һөбә, бүкә, ҡулан ҡабырға, ҡорсаға һөйәге тип йөрөтөлә.

Һуғым малының һөйәктәренә бәйле төрлө ырым-ышаныуҙар тыуған. Бына уларзың ҡайһы берзәре:

1. Һуғым ашалғас салыу һөйәген (ҡайһы бер урында баш һөйәген) кәртә бағанаһына элеп ҡуйғандар. Ул малға ҡот, үрсем teләп тора.

2. Мал үрсеһен өсөн, ашығын (аяҡтың аҫҡы быуыны) бизәп, өйгә элгәндәр.

3. Бүре һуғыр (тубыҡ) һөйәге менән салыу һөйәгенә теште тейзермәй ашарға кәрәк. Әгәр теште тейзерһәң, киләһе йылға малды бүре ҡыра, тизәр.

4. Кеше талаштырам тиһәң, малдың бүре һуғыр һөйәген шул кешенең өй башына ташлайзар.

5. Берәйһенә йәнең көйөп тә, шуны белдерә алмай йөрөһәң, уға юрамал малдың бәкәлсәйен бешереп ашатаһың.

Күреүебезсә, һуғым өмәһе, һуғым ашы, ундағы ритуал тәртиптәр - бик үзенсәлекле күренеш. Унда башҡорт халҡының холоҡ-фиғеле, психологияһы, ышаныстары, тирә-яҡ мөхиткә булған мөнәсәбәте сағыла.

Башҡорттарза ислам диненә бәйле йолалар тип һаналғандары "Ҡорбан байрамы" һәм "Мәүлит байрамы".

"Ҡорбан байрам" - ислам динендәге иң оло байрам. Ул "Ураза байрамы" нан һуң 70 көн үткәс узғарыла. Исламда ҡорбан салыу Ибраһим пәйғәмбәр тураһындағы Тәүрат легенда нигезенә индерелгән. Имештер, Ҡәғбә төзөгәндә Ибраһим пәйғәмбәр Жабраил фәрештәнән "ҡара таш"ты алғас, үзенең аллаға бирелгәнлеген күрһәтеү өсөн, улы Исмәғилде ҡорбан итмәк була. Ләкин шәфҡәтле Алла, Ибраһимға фәрештә аша бәрән ебәреп, уның улын ҡотҡара.

Хаҡ диндәге һәр мосолман ошо ваҡиға иҫтәлегенә Аллаға бағышлап ҡорбан салырға, йәғни һарыҡ, һыйыр йәки дөйә һуйырға тейеш. Исламдың ҡорбан салыу талабын айырыуса тырышлыҡ менән дөрөҫ үтәргә кәрәк. Бының сәбәбе шунда: әлеге байрам көндө Аллаға

бағышлап ҡорбан салмаған кеше теге донъяла ожмахҡа эләгә алмай, сөнки тамуҡ арҡыры һалынған ҡылдан нәзек, ҡылыстан үткер "сират күпер"ен мосолман кеше ҡорбанға салынған тереклеккә атланып ҡына сыға ала, имеш.

Ғәзәттә, ҡорбанға орғасы малды тәғәйенләйзәр. Малдың башын ҡиблаға ҡаратып һалалар. Салыр алдынан доға уҡыла. Салғанда күмәкләшеп малдың йөнөнә тотоноу йолаһы ла бар. Шулай итһәң, йәнәһе, теге донъяла сират күперен ошо ҡорбан малына йәбешеп үтергә була. Ҡорбанға салынған малдың ҡанын бер һауытҡа ағызып алып, һуңынан ергә күмәләр. Ҡорбан итенең һөйәктәрен ваҡламайзар, быуын-быуын ҡырҡып ҡына алалар. Итен ашағас, һөйәктәрен йә короған ҡозоҡҡа, йә кеше аяғы баҫмаҫ ергә алып барып күмергә кәрәк.

Ғәзәттә, ҡорбан итенең иң яҡшы киҫәге һәм тиреһе муллаларға һәм башҡа руханизарға бирелгән. Ҡалған иттән йәтимдәргә, ярлыларға, ғәриптәргә өлөш сығарылған һәм аш (бишбармаҡ) бешерелгән. Уны өйгә ингән һәр кеше ауыз итергә тейеш булған.

Ҡорбан байрамында мосолмандарға 2-3 көн буйына эшләү тыйылған. Был көндәрзе улар махсус намаз, әяттар уҡып, күңелдәрен Аллаға йүнәлдереү менән мәшғүл булырға тейештәр. Был йола бөгөн дә, диндең халыҡҡа ҡабат ҡайта башлауы арҡаһында, әүзем атҡарыла башланы.

Дини байрамдарҙың йәнә бер зурыһы һәм әһәмиәтлеһе- "Мәүлит байрамы". Ул Мөхәммәт пәйғәмбәрзең тыуған көнө уңайынан Һижри йыл иҫәбе менән рабиғи әл әүүәл айының 11-12-се көнөндә узғарыла. Ислам динен өйрәнеүсе

ғалимдар: пәйғәмбәрзең тыуған көнөн байрам итеү X-XI быуаттарза ғына, уның биографияһы тулыһынса өйрәнелеп, ҡәләм эшләнеп бөтөлөп, ислам дине етлеккән феодаль йәмғиәт диненә әүерелгәс кенә, ғәмәлгә ашырыла башлаған, тигән фекерзә. Мәүлит ваҡытында мәсеттәрзә пәйғәмбәргә бағышлап хөтбәләр уҡыйзар, вәғәздәр һөйләйзәр, ҡорбан салалар. Ҡорбан салыу, уны бүлешеү "ҡорбан байрамдарында"ғы кеүек. Бында ла аш-һыу әзерләүгә, бергәләп һыйланыуға зур әһәмиәт бирелә. Байрам көндәрендә барыһының да туҡ, шат булыузары зарур. Шуға күрә был көндәрзә ислам дине тыймаған уйын-көлкө саралары киң файзаланылған.

Ерләү-күмеү йолаһы ла ислам диненән килеп ингән йолаларзың береһе. Уның тәртиптәрен бәйән итеп тормай, был йола айҡанлы әзерләнгән махсус аш-һыузарзы ғына ҡарап үтәйек.

Мәйетте хөрмәтләп күмгәндән һуң уның туғандары ерләүзә ярзамлашыусыларзы мәжлескә йыя. Ул мәжлестәрзе ҡайһы бер төбәктәрзә "үлем туй" тип йөрөтәләр.

Табынға итле аш (ғәзәттә, ҡош итенән бешерелгән) бирәләр. Иттән һәр кемгә өлөш сығарыла. Һурпаһында ҡамырзан озонсалап киҫелгән туҡмас бешерелә. Ул һәр кемгә айырым һауытҡа һалып бирелә. Һуңынан сәй килтерелә һәм уның янына әсе ҡоймаҡ (оладьи), емеш бәлештәре ҡуйыла. Ашап-эскән мәлдә вафат булған кешене яҡшы яҡтарынан иҫкә алалар, "ауыр тупрағы еңел булһын!", "йәне ожмахта булһын!" тигән теләктәр әйтәләр.

Был мәжлес урыҫтарҙың "поминка"һын хәтерләтә, әммә бында эске булмай.

Вафаттың ҡырҡы еткәс, йәнә бер оло мәжлес уҙғарыла. Бында иң әүәл мулла аят уҡый, доға ҡыла, табынға аш-һыу килгәнсе вәғәздәр һөйләй.

Табынға иң тәүҙә итле аш бирелә. Ә сәй янына "ҡырҡ йәймә" ("ҡырҡата") ҡуйыла. Ҡырҡата - ул майҙа бешерелгән йәймә (пышка). Исеме үк әйтеүенсә, ул ҡырҡ дана була һәм үлгән кешенең ҡырҡ яҡын туғанына таратыла. Бында ла вафатты яҡшы яҡтан иҫкә алалар һәм йәненең йәннәттә (ожмахта) булыуын теләйҙәр.

Әйтеп үтеүебеҙсә, ислам дине йоғонтоһонда тыуған йола-байрамдар башҡорттар араһында ла шаҡтай киң таралған. Уларҙың барыһына ла туҡталып тормай, үрҙә әйтелгәндәрҙән сығып, шундай һығымта яһарға мөмкин: бындай йолаларҙа ла аш-һыуҙар, мәжлес иң төп ритуалдарҙың береһе булған. Шуға күрә уны әҙерләүгә, ойоштороуға халыҡ ҙур иғтибар биргән.

Шулай итеп, башҡорт халҡының байрам-йолаларын киңерәк планда тикшергәндән һуң ошондай конкрет һығымталарға килергә мөмкин:

1. Башҡорттарҙа борондан килгән традицион йола-байрамдар бай һәм күп төрлө. Уларҙың олоһо ла, кесеһе лә йәмғиәттә мөһим ижтимағи һәм социаль роль уйнаған. Традицион йола байрамдарының һәр береһе тәрбиәүи функция йөрөтә. Улар кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе көйләй, ойоштора, бер-береһенә яҡынайта, олоно оло итеп, кесене кесе итеп таный белергә өйрәтә.

Бында бигерәк тә ғаилә-көнкүреш йолалары, айырыуса өмәләр зур әһәмиәткә эйә.

Ваҡыт-мизгел (календарь) йолалары иһә кешеләрзе тәбиғәткә яҡынайта, бар тереклектең ҡәзерен белергә өйрәтә, йәшәйештең асылын тәрәнерәк аңларға булышлыҡ итә. Кешелек менән тәбиғәт араһындағы мөнәсәбәттәрзе көйләүзә лә уларзың роле зур.

Шул уҡ ваҡытта традицион йолалар аша без боронғо ата-бабаларыбыззың донъяға ҡарашын, психологияһын, холоҡ-фиғелен, тормош-көнкүреш үзенсәлектәрен тәрәнерәк аңлайбыз, киңерәк күзаллайбыз. Йола-байрамдар ҡиммәтле тарихи-этнографик сығанаҡ та булып хезмәт итә. Шуға күрә һәр ритуал-байрам тарихсылар, этнографтар, фольклорсылар һәм телселәр тарафынан ентекле өйрәнелергә тейеш.

2. Башҡорт байрам-йолалары мәжлесһез, табынһыз үтмәй. Һәр йоланың үзенә күрә тәғәйен аш-һыу рационы бар. Алда килтерелгән мәғлүмәттәрзән күренеүенсә, йола ризыҡтары, ярма аштары (бутҡалар) өҫтөнлөк итә. Бигерәк тә бойзай, тары, арпа ярмаларына өҫтөнлөк бирелә. Шулай уҡ аҡ ризыҡтар (һөт, ҡатыҡ, ҡымыз, буза) киң файзаланыла. Бының сәбәптәре шунда: аҡ ризыҡ - изгелек, сафлыҡ символы. Уларзы теләктәр теләгәндә файзаланыу теләктәрзең аҡ, саф, изге күңелдән булыуын аңлата. Ә иген культуралары, бигерәк тә бойзай, бар ризыҡтың башы тип ҡарала. "Икмәк барыһына ла баш" тигән мәҡәл быны йөпләп ҡуя.

Күп байрамдарза иткә өҫтөнлөк бирелә. Уларзан традицион милли аштар (бишбармаҡ, өлөш, йүрмә)

бешерелә. Йола аш-һыуҙарының терминдар системаһы үҙе бер ҡыҙыҡлы тикшеренеү объекты булып тора. Атамаларҙы этнолингвистик планда тикшергәндә был лексик ҡатламды һис кенә лә урап үтеп булмай.

### § 4. Аш-һыуға бәйле терминдарҙың яһалышы. Башҡорт телендә һүҙъяһалыш формалары.

Терминдарҙың структураһын асыҡлау өсөн иң тәүҙә тел ғилемендәге "һүҙъяһалыш" тигән айырым бүлеккә туҡталып китергә кәрәк. Милли телдең һүҙъяһалыш үҙенсәлектәрен белмәй тороп, атамаларҙың мәғәнәүи асылына теүәл генә төшөнөү мөмкин түгел.

Лингвистика фәненең үҙаллы бер бүлеге булараҡ һүҙъяһалыштың үҙ объекты, проблематикаһы һәм методтары бар. Уның төп берәмеге булып һүҙ (тамыр һәм яһалма һүҙҙәр) иҫәпләнһә, өҫтәлмә берәмектәр рәтенә һүҙ яһау процесында ҡулланыусы төрлө саралар: фонемалар, аффиксаль морфемалар, һүҙ яһаусы нигеҙ, һүҙ яһаусы сара, һүҙъяһалыш мәғәнәһе, һүҙъяһалыш тибы, һүҙъяһалыш ояһы һ.б. ҡарай.

Һүҙъяһалыш тел ғилеменең морфология бүлеге менән тығыҙ бәйләнештә, сөнки һүҙъяһалыш процесы күп осраҡта тамыр һәм аффиксаль морфемаларҙың мөнәсәбәттәшлеге, йәғни һүҙ яһаусы нигеҙҙәрҙең бер-береһе менән ҡушылыуҙары, ишләшеүҙәре, ҡабатланыуҙары йәки һүҙ яһаусы аффикстар менән ҡушылыуҙары һөҙөмтәһе булып тора; юҡҡа ғына

һүзъяһалыштың иң продуктив һәм киң таралған күп тармаҡлы төрзәренең береһе морфематик юл тип аталмай.

"Һүззәрзең морфематик төзөлөшө һәм уларзың грамматик формаларының яһалыу үзенсәлектәре буйынса башҡорт теле, башҡа төрки телдәр кеүек үк, агглютинатив телдәрзең аффиксаль төркөмөнә ҡарай. Был - башҡорт телендә һүззәрзең морфематик төзөлөшө агглютинатив юл менән, йәғни күптән ҡалыплашҡан һәм билдәле бер функция атҡарған аффикстарзың механик рәүештә тамыр (нигез) азағына эзмә-эзлекле ҡушылыуы һөзөмтәһендә, башҡарылыуына бәйләнгән: баҡ-са-сы-лыҡ-ты үҫтерәйек", -тип яза К.Ғ. Ишбаев (8. 16).

Морфема - грекса "morphe" (форма) һүзенән яһалған. Ул иһә һүззең артабан бүленә алмай торған иң бәләкәй мәғәнәүи өлөшөн аңлата. Башҡорт телендә морфемалар, башҡа төрки телдәрзәге кеүек, мәғәнәләре, урындары һәм функцияларына ҡарап ике төргә: тамыр морфемаларға йәки тамырзарға һәм аффиксаль морфемаларға йәки аффикстарға бүлеп ҡарала. Шулай итеп, һүз морфематик төзөлөшө буйынса, нигеззә, ике төрлө морфеманан: тамыр менән аффикстан тора. Мәҫәлән:

һал (тамыр) - ма (аффикс),

ҡой (тамыр) - маҡ (аффикс).

Тамыр - үзендә һүззең лексик мәғәнәһен тотоусы төп һәм даими морфема. Тамырзан башҡа һүз булмай, ә аффиксһыз һүззәр булыуы мөмкин. Мәҫәлән, ҡайһы бер теркәүестәр (ә, ләкин, әгәр, йә һ.б.) аффикс ҡабул итмәйзәр.

Башҡорт телендә һүҙҙәр күп ваҡыт бер тамырҙан тора (һау-мал, йүр-мә, ҡур-мас һ.б.), ә инде парлы, ҡушма һәм ҡыҫҡартылған ҡушма һүҙҙәрҙә тамырҙарҙың һаны ике, өс һәм унан да күберәк булыуы мөмкин.

"Үҙаллы төрки телдәрҙең оҙайлы тарихи үҫеше һөҙөмтәһендә тамырҙар төрлө эске һәм тышҡы сәбәптәр арҡаһында фонетик, морфематик һәм семантик йәһәттән ниндәйҙер үҙгәрештәргә дусар ителгәндәр, шулай ҙа күпселек төрки телдәрҙәге кеүек үк хәҙерге башҡорт телендә тамырҙар, башлыса, боронғо фонологик төҙөлөштәрен һаҡлағандар һәм, нигеҙҙә, бер ижектән, һирәкләп ике, ә айырым осраҡтарҙа өс ижектән торорға мөмкиндәр,"- тип яҙа Т.М. Ғарипов (7. 21).

Аффикс - һүҙгә лексик, грамматик йәки лексик-грамматик мәғәнә биреүсе морфема. Аффикстар туранан-тура тамырға йәки тамырҙан һуң килгән башҡа аффикстарға ҡушылып киләләр: уй-ла, уй-ла-һын, уй-ла-һын-дар. Аффикс бәйле морфема булып тора, сөнки ул тамырҙан башҡа ҡулланыла алмай, айырым торғанда бер ниндәй ҙә мәғәнә аңлатмай, һан яғынан да улар сикләнгән, шулай ҙа тарихи планда улар даими үҫештә:

а) һүҙҙең морфематик төҙөлөшөндәге тарҡалыу, ҡатмарланыу һәм алмашыныу кеүек процестар һөҙөмтәһендә яңы аффикстар барлыҡҡа килеп тора,

б) сит телдәрҙән айырым аффикстар һәм аффиксоидтар үҙләштерелә.

"Аффикстарҙың тәбиғәте төрки телдәрҙә, шул иҫәптән башҡорт телендә лә, тулыһынса асыҡланып бөтмәгән. Шулай ҙа мәғәнәләре һәм башҡарған функциялары

буйынса уларзы өс төргә: һүз яһаусы, форма яһаусы һәм һүз үзгәртеүсе аффикстарға бүлергә мөмкин", - тип яза К.Ғ. Ишбаев (8, 23).

Башҡорт телендәге аш-һыу терминдарының байтағы тик тамырзан (нигеззән) генә тора. Әммә улар тел составының үтә зур өлөшөн биләмәй. Һүзъяһалышта төп урынды иһә аффиксация ысулы алып тора. Аффиксация һөзөмтәһендә тамыр һүзгә (нигезгә) һүз яһаусы аффикстар ҡушылып яңы һүззәр барлыҡҡа килә. Был ысул бигерәк тә исемдәрзең, сифаттарзың, ҡылымдарзың һәм рәүештәрзең яһалышында иң продуктив ысул булып иҫәпләнә. Мәҫәлән:

а) яһалма исемдәр: аш-лыҡ, көл-сә, йәй-мә, ҡа-барт-ма;

б) яһалма сифаттар: йом-шаҡ, бал-лы, май-лы, йә-беш-кәк;

в) яһалма ҡылымдар: фай-за-лан, аш-а, беш-ер;

г) яһалма рәүештәр: за-ман-са, яңы-са, әҫе-ләй һ.б.

Нигеззәр ҡушылыу ысулы (аффиксациянан ҡала) иң киң таралған һүзъяһалыш алымдарының береһе. Нигеззәр ҡушылыу процесында яһаусы бер нисә нигез бер бөтөн булып ойоша, һөзөмтәлә ике, һирәклэп өс йәки дүрт нигеззән торған берекмә ҡушма һүззәр барлыҡҡа килә: аҡ-буз, аҡ-буз-ат, һауыт-һаба, баш-күнәк, бал-ға-лаҡ, йылъ-язма, фото-кино-йылъ-язма. Был ысул менән берекмә ҡушма һүззәрзән күберәк исемдәр, һирәклэп сифаттар, ҡылымдар һәм рәүештәр яһала.

1. Лексик-семантик һүзъяһалыш (лексикализация)

Айырым һүззәрзең нығынған һүзбәйләнештәргә ойошоп, ҡушма һүззәр яһалыузы лексик-семантик һүзъяһалыш йәки лексикализация тип йөрөтәләр. Шулай итеп, лексик-семантик һүзъяһалыш ике процесты үз эсенә ала:

1) айырым һүззәр нығынған һүзбәйләнештәргә ойошалар һәм ҡушма һүз функцияһын үтәй башлайзар: таш, күмер (айырым һүззәр) - ташкүмер (нығынған һүзбәйләнеш); баш, түбән (айырым һүззәр), - баштүбән (һүзбәйләнеш); биш, бармаҡ (айырым һүззәр) - бишбармаҡ (нығынған һүзбәйләнеш),

2) һөйләмдәр үззәренең коммуникатив функцияларын юғалталар һәм үзаллы бер ҡушма һүзгә ойошоп, номинатив функциялы лексик берәмеккә әүереләләр: Яу ҡасҡан (һөйләм) - Яуғасҡан (ҡушма һүз, тау исеме). Күс килде (һөйләм) - Күскилде (ҡушма һүз, ауыл исеме). Был һуңғы ике ысулды берләштереп семантик ысул тип тә йөрөтәләр.

Башҡорт телендә һүзъяһалыш ысулдары һәм алымдары үрзә күрһәтелгәндәр менән генә сикләнмәй, әлбиттә, улар байтаҡҡа киңерәк. Әммә без был махсус өлкәгә тәрән үтеп инеүзе маҡсат итеп ҡуймайбыз һәм әйтелгәндәр менән генә сикләнәбез. Сөнки милли аш-һыузарға ҡағылышлы терминдар башлыса атап үтелгән ысулдар һәм алымдар менән яһалған. Әйтелгәндәрзән сығып, материалға яҡыныраҡ киләйек.

Тик тамыр һүҙҙән генә яһалған атамалар. Улар күп түгел һәм, башлыса исемдәрҙән тора. Мәҫәлән, ит, май, һөт, ҡорот, ҡаҡ, ҡаҙы, бәлеш, ҡалаҡ, ҡарта, аяҡ (аштабаҡ), ижау, киле, көбө, күнәк, табаҡ, тәпән, тырыз, ҡашыҡ, тубал (улаҡ), туҫтаҡ, мискә, һаба (турһыҡ), ылаш, ялғаш, ләүәш, сүрәк, ҡалас һ.б.

Башҡорт милли аш-һыуҙарына ҡағылышлы терминдарға ныҡлабыраҡ күҙ һалһаң, уларҙың башлыса афиксация ысулы менән яһалғанын күрәһең. Һүҙ яһаусы аффикстар беҙҙең телдә ифрат күп төрлө. Аш-һыу терминдарына килгәндә иһә, улар башлыса түбәндәге ете төр эквивалент аффикстарҙан яһала (актив ҡулланылышы тәртибендә бирелә):

-ма/-мә, -маҡ/-мәк, -мас/-мәс;

-сыҡ/-сек, -са/-сә, -ҡа/-кә/-к;

-әк/-аҡ/, -заҡ/-лаҡ һ.б.

## 2. Аффикстар ярҙамында яһалған терминдар

Тамыр һүҙе ҡылымдан булған һәм уларға һүҙ яһаусы ялғауҙар ҡушылған атамалар аш-һыу лексикаһында иң ҙур урынды алып тора.

Бына уларҙың ҡайһылары:

а) -ма/-мә аффикстары менән яһалғандар: һал-ма, йәй-мә, ҡабарт-ма, һөз-мә (тоҙлоҡ), төр-мә (бәлеш), яп-ма (ситтәре йәбештерелмәй, ябып ҡына эшләнгән бәлеш), кәүешлә-мә (өс мөйөшлө бәлеш), тәрт-мә (майҙа бешерелгән бәлеш), ҡулла-ма, күперт-мә (ҡабартма), йүр-мә, тултыр-ма, һау-ма (ике көн ултырған ҡымыҙ), кәлйе-

мә, сәр-мә (бызау тиреһенән тегелгән тар муйынлы тоҡ), һырла-ма (бәләкәй ҡоймаҡ), ҡатла-ма һ.б.;

б) -мас/-мәс аффикстары менән яһалғандар: ҡур-мас, ыу-мас, ҡатыр-мас (мейестә бешкән шарик рәүешендәге сөсө икмәк), туҡ-мас, кәтер-мәс һ.б.;

в) -маҡ/-мәк аффикстары менән яһалғандар: ик-мәк (фонетик варианттары -итмәк, ипмәк), ҡой-маҡ, ҡатыр-маҡ, ҡойт-маҡ, ҡуйылт-маҡ, ҡойорт-маҡ (һөт ҡушылған яңы ҡорот), ҡуйырт-маҡ (ҡаймаҡ ҡушылған яңы ҡорот), арт-маҡ (эйәргә артып йөрөтөлгән күн һауыт) һ.б.;

г) -сыҡ/-сек/-сөк/-соҡ афикстарынан:

ҡатлан-сыҡ, эрем-сек, өйөр-сөк (йомшаҡ ҡамыр), болам-сыҡ (он буткаһы), ҡотор-соҡ (ағастан тоз һауыты);

д) -мыс/-мес/-мәс: тура-мыс (ит киҫәге), бола-мыс (он буткайы. -Әй һ.), бәрә-мес (шәнкә), кү-мәс, тапау-мыс (ит турағыс балта);

ж) -ҡы/-ке/-ҡо/-кө: төрт-кө (ваҡ бәлеш төрө), асылт-ҡы (әсетке), ойот-ҡо (ҡатыҡ әсеткеһе), беш-ке (бешкәк).

Тамыр һүзе исемдән булған атамалар күп түгел. Күберәк улар менән һауыт-һаба атамалары яһала. Мәҫәлән: көл-сә, аш-лыҡ, ҡыйыҡ-са (икмәк төрө), өшә-лек, бауыр-һаҡ, бот-лоҡ (күн һауыт), баҡыр-са, көбө-сәк, ҡашыҡ-лыҡ (ҡалаҡ ҡыҫтырғыс), ҡул-лыҡ (ҡымыҙ йөрөтә торған күн һауыт), аш-тау (зур ағас табаҡ) һ.б.

Тамырзары башҡа һүҙ төркөмдәренән булып, аффикстар ярзамында яһалған атамалар без тикшергән аш-һыу лексикаһында әлегәсә осраманы.

3. Нигеззәр ҡушылыу ысулы менән яһалған терминдар

Аш-һыу лексикаһында бындай ысул менән яһалған атамалар ярайһы зур урын алып тора. Бындай осраҡта төп атаманың алдына аныҡлаусы һүз ҡуйыла һәм бер предметты аңлатҡан ҡушма һүз барлыҡҡа килә.

1. <u>Ҡушма һүҙәрҙән яһалған терминдарҙың сифат+исем формаһы</u>:

ҡыҙыл эремсек, аҡ эремсек, аҡ май, һары май, аҙау май (иретелгән май), сөсикмәк, сөсө күмәс, әсикмәк, йомро һалма, оҙонса һалма, әсе ҡатыҡ, сөсө ҡатыҡ, йәш ҡорот, әсе ҡорот, әсе бал, әсеғаймаҡ, сөсөғоймаҡ, сейәле май, муйыллы май, ваҡ шәкәр, ваҡ он, эре он, баҙыян ҡалаҡ, көмөш сәйнүк, еҙ самауыр, ағас ҡалаҡ, зур сеүәтә һ.б.

2. <u>Аффикстары булмаған ике сифаттан яһалған терминдар.</u>

Был осраҡта төп һүҙ - аш-һыуҙың йәки уның кәрәк-ярағының атамаһы, ә аныҡлаусы һүҙ ул әйбергә мәғәнәүи характеристика биреүсе булып килә. Мәҫәлән: соҡор һалма, ноҡом икмәк, табикмәк, ҡул һалма, кәлит буҙа (арғаяш. һ.), айранмай, тосмай, ҡаҙыял, аштабаҡ, ҡоштабаҡ, башкүнәк, туҡмастаяҡ, бот күнәк (бот тиреһенән яһалған һауыт), килеһап (ағас киле төйгөсө), этаяҡ (эт ашатыу һауыты), туҙ ижау (туҙҙан яһалған һауыт).

Шул күҙгә ташлана: бындай формалағы ҡушма һүҙҙәр ҡайһы саҡта аңлатмалы ҡатмарлы атамаларҙың ҡыҫҡартылған варианттары булып киләләр. Мәҫәлән: көлгүмәс (көлгә күмеп бешерелгән күмәс), табикмәк (табала

бешкән икмәк), табашәнкә (табала бешерелгән шәнкә) һ.б. Бында аныҡлаусы һүз ризыҡтың нисек, ни рәүешле бешерелеүенә ишаралай.

3. <u>Исем+исем+һүз яһаусы аффикс формаһы</u> аш-һыуға бәйле атамаларза ярайһы актив ҡулланыла. Мәҫәлән: ҡул һалма-һы, ҡазаҡ һалма-һы, тары бутҡа-һы, ҡазан бөйөрә-ге, дөгө бутҡа - һы, картуф бутҡа - һы, йылҡы и-те, ҡош и-те, балыҡ һурпа - һы, бөрлөгән ҡа-ғы, еләк ҡа - ғы, ҡарағат ҡа - ғы, иген һауы - ты, бал ҡашы - ғы, дөйә муйы - ны (дөйә муйыны тиреһенән һауыт, Дим һ.) аш ижа - уы, көбө миска-һе, май көбө-һө, әсетке күнә - ге һ.б.

4. <u>Үткән заман сифат ҡылым+исем формаһы</u>нан яһалған ҡушма һүззәр. Аш-һыу терминдары араһынан бындай форма ла йыш осрай. Мәҫәлән: ҡаҡланған ит, бешкән ит, тозланған ит, иретелгән май, киптерлегән ҡорот, әсетелгән һөт, ҡабартылған ҡамыр, тазартылған картуф, ҡыззырылған картуф, ҡайнатылған картуф, ҡайнатылған һөт һ.б.

5. <u>Һан һәм исемдән яһалған терминдар</u>. Улар һирәк осрай. Әлеге һүзлектәрзә уларзың өсәүһе генә теркәлгән: биш-бармаҡ, өс-босмаҡ, биш-улан (биш өлөшкә бүлеп бер табала бешерелгән икмәк), уны урыҫтар "дружная семейка" тип йөрөтәләр).

Шулай итеп, аш-һыуға ҡағылышлы терминдарға структур анализ һөзөмтәләре шуны күрһәтә: бында һүзъяһалыш формалары, ысулдары күп төрлө һәм ярайһы ҡатмарлы. Уларзы асыҡлау аш-һыу әзерләүзәге төп йүнәлештәрзе, методтарзы тәрәнерәк аңларға булышлыҡ итә.

## III бүлек

# Милли аш-һыуҙарҙың һәм табын этикетының халыҡ ижадында сағылышы

### §1. Туҡланыу системаһы

Һәр кемгә билдәле донъяуи бер хәҡиҡәт бар: ашау – һаулыҡ һәм йәшәү сығанағы. Кеше йәшәү өсөн ашай. Шуға күрә аш-һыу. туҡланыу тураһында ер йөҙөндә бик күп әһәмиәтле фекерҙәр әйтелгән. Бына шуларҙың бер нисәһе: "Ашҡаҙан – йәнебеҙҙең бер өлөшө ул, ә ауыҙ – уның ҡапҡаһы". Әгәр ҙә миңә: "Нимә ашарға теләүеңде әйтһәң, мин һинең кем икәнеңде белермен, - тиһәләр, һүҙ уның күпме миҡдарҙа ашауы хаҡында түгел, ә ниндәй ризыҡ менән туҡланыуы, уны нисек һайлауы тураһында бара. был процеста кешенең үҙенсәлекле тәбиғәте, милли мәҙәни асылы сағыла".

"Һаулыҡ кешенең тирә-яҡ мөхит менән аралашыуына бик нығ бәйле, йәғни тышҡы мөхиттең кеше организмына үтеп инеү ҡапҡалары (тын алыу юлдары, аш юлы һәм тәндең сит тәьҫирҙәрҙе үткәреү һәләте) була, тип әйтәйек. Кешенең тирә-яҡ менән аралашыу процесында туҡланыу төп әһәмиәткә эйә. Шуға күрә дөрөҫ туҡланыу кәрәк. Дөрөҫ туҡланыу тигәндән, иң әүәл беҙҙең башҡорт халҡына хас туҡланыу рәүешен күҙ алдына килтерәйек. Беҙҙең көнкүрештә ит һәм һөт аҙыҡтары өҫтөнлөк итә. Борон-борондан ата-бабаларыбыҙ ризығы хаҡында һүҙ сыҡһа, күҙ алдына һимеҙ ит, бишбармаҡ, ҡымыҙ килеп баҫа. Шулар беҙҙең өсөн иң төп туҡланыу ризығы булырға тейеш", – тип яҙа кешеләрҙе дауалауға 50 йыл ғүмерен биргән табип Ю.Ф. Вәлиев (3. 3).

"Йәшәйешебеҙ тышҡы донъя, ер, һауа менән айырылғыһыҙ бәйләнештә, ләкин иң мөһиме – аҙыҡ аша булған бәйләнеш. Кешеләр элек-электән ашамлыҡҡа ҙур әһәмиәт биргән... Туҡланыуға ҡарата бөгөнгө белгестәрҙең ҡарашы нindәй? Кеше нимә өсөн ашарға тейеш?" тигән һорауға, бына ниндәй яуап ишетәбеҙ: "Беҙ, беренсенән, тәндә көс барлыҡҡа килһен һәм физик эш башҡарыуға ҡеүәт артһын өсөн, икенсенән, үлгән туҡымаларҙы яңыртыу, физик, интеллектуаль эш һәм үҫеү өсөн ашайбыҙ. Өҫтәлегеҙҙән ит һәм һөт аҙыҡтары өҙөлмәһен. Улар һөйәктәр өсөн иң кәрәкле аҡһымға, кальцийға бай. Һөттә антибиотиктарҙан да көслөрәк матдәләр табылған. Бал һәм һоло ашарға онотмағыҙ. Улар нервылар системаһына иң кәрәкле витаминдар һәм тоҙҙар сығанағы".

Бөгөн дә тәүтормош кешеләре кеүек туҡланыусыларҙы осратып була. Мәҫәлән, Африкала йәшәүсе масайҙар. 14 йәше тулғас, уларға ит, һөт һәм ҡан менән туҡланыу рөхсәт ителә. Һәр кем ошо йәшкә еткәс, көнөнә 3 литр һөт, 2 кг ит ҡуллана, тик улар йәшелсә ашамайҙар. Уларҙың сәләмәтлеген һәм физик мөмкинлектәрен тикшергән табиптар әйтеүенсә, масайҙарҙың тән ауырлығы 25 йәштән 55-кә тиклем үҙгәрмәй. Лаборатор тикшеренеү һөҙөмтәләре уларҙың йөрәк эшмәкәрлегенең оҙон аралыҡҡа йүгереүсе олимпия уйындары еңеүселәренекенә ҡарағанда ла яҡшыраҡ булыуын күрһәтә.

Тимәк, аш-һыу, туҡланыу халыҡтың йәшәүен, донъяға булған ҡарашын һәм мөнәсәбәтен тәьмин иткән иң мөһим факторҙарҙың береһе.

Аш-һыу, туҡланыуҙың әһәмиәте хаҡында һәр халыҡта әллә күпме мәҡәл һәм әйтемдәр, йырҙар тыуған. Башҡорттарҙа

ла улар бихисап. Бына шуларҙың бер нисәһе: "Аш бар ерҙә бәрәкәт бар", "Аш ташты иретер", "Ашағандың биле нык", "Аш кәҙерен белмәһәң, аслык бирер язаңды", "Аш табылыу – бер бәхет, ашарға иш табылыу – ике бәхет", "Аштан оло булма", "Ас һуғышыр, тук килешер", "Башты баш иткән – аш", "Аҙык мул ерҙә ауырыу булмаҫ", "Ауырыу ҙа – аштан, һауығыу ҙа – аштан", "Ас кешенең асыуы яман", "Ашың күп булһа, дуҫың күп булыр", "Ас атаһын тыңламаҫ", "Оскан кош, йүгерек кейек – һәр береће ризык тиер", "Тамак тамукка төшөрөр", "Тамағы туктың күңеле көр", "Таш, ташты ireткән – аш", "Туйған яманлығын куйған", "Һыйы булһа, көйө табыла", "Йоткан – йотолмаҫ", "Йәш оло түгел, аш оло", "Аслык капсык аҫтырыр, иманыңды һаттырыр", "Ашар өсөн йәшәмә, йәшәр өсөн аша" һ.б.

Күреүебеҙсә, халык ашты, тукланыуҙы бик юғары баһалай. Аш-һыу, ризык - ул ташты иретер көс тә, бәрәкәт, бәхет тә, кырын эштәрҙән, яманлыктан тыйған көҙрәт тә, күңелдәрҙе күтәрер шөһрәт тә. Шуға күрә халык аш-һыуға, тукланыуға карата һәр сак ихтирамлы ғына түгел, иғтибарлы ла булған. Шул ук вакытта халык акылы ашар өсөн генә йәшәүҙе мәғәнәһеҙлек итеп һанаған. "Ашар өсөн йәшәмә, йәшәр өсөн аша" тигән мәкәл быныӊ асык күрһәткесе.

Билдәле булыуынса, һәр халыктың йөҙәр, меңәр йыл буйы формалашкан, уның үҙ биологик тәбиғәтенә ярашлы тотороклo тукланыу системаһы барлыкка килә. Белгестәр әйтеүенсә, кеше үҙенең йәшенә, физик тибына, кәсебенә, һаулык торошона, уны уратып алған тәбиғәт мөхитенә карап тукланырға тейеш. Быны башкорттар якшы аңлаған һәм киләһе быуындарға аманат итеп тейешле тукланыу системаһы калдырған. Һәр милли тукланыу

системаһының формалашыуына күп факторҙар йоғонто яһай. Шуларҙың иң мөһимдәре – географик мөхит һәм халыҡтың кәсебе. Бик боронғо замандарҙан башҡорттар төйәк иткән Уралда, мәҫәлән, әфлисун, лимон, банан, хөрмә, йөҙөм кеүек йылыны яратҡан емештәр үҫмәгән. Шуға ла улар беҙҙең милли туҡланыу системаһына инмәй, ә ҡайһы бер халыҡтарҙың рационында иһә улар төп урынды биләй. Йәки кәсепте алайыҡ. Вьетнамдарҙың, ҡытайҙарҙың, япондарҙың, мәҫәлән, төп кәсебе дөгө үҫтереү булғанлыҡтан, уларҙың төп ризыҡтары ла дөгө. Дөгөнән бешерелгән ризыҡтар беҙгә ятыраҡ, ә уларҙың гендарына һеңгән. Башҡорттарҙың борондан килгән төп кәсебе малсылыҡ булғанлыҡтан. төп аш-һыуҙары ла иттән һәм һөттән әҙерләнә. Уларҙың төрләләгән алдағы бүлектәрҙә ҡарап үткәйнек инде.

Әйтелгәндәрҙән сығып, башҡорттар көньяҡ емештәрен дә, дөгөнө лә ашамаған икән, тип уйларға ярамай. Азия менән Европа киҫешкән ерҙә, ҙур сауҙа юлында урынлашҡан Башҡортостан өсөн экзотик емештәр ҙә, дөгө лә, йөҙөм дә, әлбиттә, ят әйбер булмаған.

Һүҙ бында туҡланыу системаһын барлыҡҡа килтереүсе төп ризыҡтар тураһында бара. Ә уның составына алыҫ яҡтарҙан, башҡа мөхиттән килеп ингән ризыҡтарҙың инеп китеүе лә ихтимал. Мәҫәлән, сәй. Нисәмә быуаттар буйы башҡорттар уға күнеккән, үҙ иткән. Сәйһеҙ башҡорт көнкүрешен күҙ алдына килтереп тә булмайҙыр. Юҡҡамы ни сәй тураһында төрлө әйтемдәр тыуған. Мәҫәлән: "Сәйҙе һал услап, эсерһең тынысләп", "Сәйе булһа, шәкәре табылыр", "Сәйҙе сәйнәйһе юҡ", "Сәй янында һүҙ сыға", "Сәй көлдөрөр, кеҫәне бөлдөрөр" һ.б.

Йәки шәкәр менән картуфты алайыҡ. Улар ҙа борон ситтән индерелгән булған. Элегерәк экзотик булып күренгән был ризыҡ хәҙер беҙҙең туҡланыу рационыбыҙҙа ныҡлы урын алған.

Әлбиттә, халыҡтар араһында берләшеү, аралашыу процесы көсәйгән һайын һәр милли туҡланыу системаһы ла үҙгәреш кисерә. Хәҙер беҙҙә тропик емеш-еләктәр тулып ята. Әле улар беҙҙең организмға ятыраҡ, шуға уларға әллә ни тартылыш юҡ. Бәлки шундай заманалар килер, улар тәме беҙҙең ҡанға һеңер – киләсәк быуындың аш-һыу рационында иһә улар ҙур урын биләр. Әлегә башҡорт милли туҡланыу системаһын башлыса игендән, һөттән, иттән әҙерләнгән аш-һыуҙар тәшкил итә. Шулай уҡ солоҡсолоҡ, һунарсылыҡ, балыҡсылыҡ кәсептәренә бәйле ризыҡтар ҙа унда ныҡлы урын алған. Халыҡ үҙенең ауыҙтел ижадында ла ғәмәлдә шул ашамлыҡтар тураһында һүҙ алып бара. Уларға ентекләберәк туҡталып үтәйек.

Башҡорттарҙың ризыҡ, туҡланыу тураһындағы уй-фекерҙәре, теләк-ышаныстары барлыҡ фольклор жанрҙарында ла киң сағылыш тапҡан. Иң боронғо мәшһүр «Урал батыр» эпосынан алып, хәҙерге таҡмаҡтарға тиклем ашамлыҡ, аш-һыуға ҡарата халҡыбыҙҙың иң ихтирамлы һәм иғтибарлы һүҙҙәре изге аманат итеп әйтелә килә.

Аш-һыуҙар тураһындағы халыҡ фекере фольклорсы Ф.А.Нәҙершина ижадында киң сағылыш тапҡан.

## §2. Аш-һыуҙар тураһында мәҡәл һәм әйтемдәр

Кинәйәлек, тапҡырлыҡ, ҡыҫҡалыҡ яғынан фольклорҙа мәҡәл һәм әйтемдәргә тиңдәш башҡа жанрҙы табыуы ҡыйын. Юҡҡа ғына уларҙы "халыҡ аҡылының аҫыл ынйылары", "саҡматаштан сыҡҡан алтын осҡондар" тип йөрөтмәйҙәр. Хәҙерге көндә лә киң ҡулланылып, телебеҙгә йәм, фекеребеҙгә ҡеүәт биреүсе йөҙәрләгән, меңәрләгән мәҡәлдәребеҙ һәм әйтемдәребеҙ – төрлө быуын, төрлө осор кешеләренең поэтик ижад емеше ул. Тәрән һәм киң мәғәнә, юғары образлылыҡ, дидактик йөкмәтке уларҙың быуындан-быуынға күсеүенә сәбәпсе булған.

Һәр төрлө тормош күренештәренә, хәл-ваҡиғаларға баһа биреү һәм уларҙы дөйөмләштереү рәүешендә донъяға килгән мәҡәл жанры тормоштоң бөтә тармаҡтарына ла үтеп инә. "Мәҡәлдәр элек-электән кешеләрҙә иң яҡшы әхлаҡи сифаттар тәрбиәләү вазифаһын үтәп килгән. Әлбиттә, әхлаҡи әҙәп нормаларын, кешеләрҙең йәмғиәттә үҙ-үҙҙәрен тота һәм йәшәй белеү ҡағиҙәләрен тегеләй йәки был күләмдә сағылдырмаған бер генә жанр ҙа юҡ. Шулай ҙа йәмғиәттең әхлаҡи-этик ҡанундары халыҡ ижадының башҡа жанрҙарына ҡарағанда ла мәҡәлдәрҙә айырыуса ныҡ кәүҙәләнеш тапҡан, сөнки быға жанрҙың фәлсәфәүи-дидактик тәбиғәте үҙе сәбәпсе", – тип яҙа билдәле фольклорсы Ф.А. Нәҙершина (13.8 ).

Туҡланыу, аш-һыу әҙерләү, табын ҡороу ҙа, халыҡтың йәшәү рәүеше сағылышы булараҡ, мәҡәлдәрҙә ныҡлы урын алған.

Бар донъя халыҡтары ижадында иң тәүҙә икмәккә дан йырлана. "Икмәк барыһына баш" тигән әйтем төрлө телдәрҙә бер дөйөм бөйөк мәғәнәлә йөрөй. Был һүҙҙәрҙә икмәккә ҡарата оло хөрмәт тә, ихтирам да, табыныу-ололау хисе лә сағыла. Бар кешелек өсөн төп ризыҡ – икмәк. Рәсәйҙә икмәкте бойҙай һәм арыш ононан, ә был ашлыҡтар үҫмәгән ерҙәрҙә – башҡа иген культураларынан бешерәләр. Мәҫәлән, Ҡытайҙа – дөгөнән, Скандинавияла – арыштан һәм арпанан, Һиндостанда – тары ононан. Ҡайһы бер илдәрҙә был маҡсатта фасоль, картуф һәм сәтләүекте лә файҙаланалар.

Иң беренсе булып икмәкте беҙҙең эраға тиклемге 3 мең йыл элек Мысырҙа уйлап табалар. Боронғо пирамидаларҙа, ҡурғандарҙа табылған һауыттарҙа бөртөклө культураларҙың һүрәттәре һаҡланған. Был иһә борон-борондан халыҡтың икмәккә булған ҡәҙере һәм ихтирамы тураһында һөйләй. Башҡорттарҙың да икмәккә ҡарата шул изге хистәрҙе сағылдырған тәрән фекерҙәре, поэтик ҡараштары һәм шуларҙан тыуған мәҡәл, әйтемдәре бар. Бына шуларҙың ҡайһылары: "Икмәктән оло аш юҡ", "Ил ҡеүәте икмәктә", "Икмәкте хурлама, ҙурла", "Икмәк – табын ҡояшы", "Икмәктең валсығы ла һинән оло", "Икмәк – йәшәү сығанағы", "Кем икмәкле – шул хикмәтле", "Икмәкте ҡатыҡҡа манған ас булмай", "Икмәкте бер ҡап, ҡатыҡты биш ҡап", "Икмәк сәйнәмәйсә йотолмай" һ.б.

Һанап кителгән мәҡәлдәрҙең мәғәнәһе асыҡ һәм аңлайышлы (әҙәп ҡағиҙәһе шулай булырға тейеш тә), әммә һуңғы әйтемгә кескәй аңлатма биреү кәрәктер. Сөнки "Икмәк сәйнәмәйсә йотолмай" тигән һүҙҙәр ярайһы оло мәғәнәгә эйә: "Эшләмәйенсә ауыҙыңа икмәк теймәй". Ошо бәләкәй генә

мәҡәлдә лә халыҡтың быуындарға булған аманаты – "Һин эшләп ашарға тейешһең" тигән оло васыяты ята.

Икмәк – ул борон-борондан йола ризығы ла. Икмәк һынығын киптереп, яртыһын яуға китеүсегә биреү, икенсе яртыһын ул ҡайтҡансы һаҡлау - халҡыбыҙҙың борондан килгән изге йолаһы. Ашар ризығың ҡырҙа өҙөлмәһен, тигән ата-бабалар теләгенең сағыу сағылышы был. Ошо йола әлегә тиклем ҡайһы бер төбәктәрҙә һаҡланып килә. Мәҫәлән, информатор Ситдиҡова Гөлшат апайҙың әйтеүенсә, Әбйәлил районында әрмегә киткән егеттәргә бетеү итеп кипкән ҡара икмәк һалалар. Халыҡ ышаныуынса, ул бетеү хужаһын бөтә бәлә-ҡазаларҙан һаҡлай. Әлегә тиклем беҙҙең яҡта икмәк валсығын иҙәнгә төшөрөү оло гонаһ һанала. Был да халҡыбыҙҙың ошо ризыҡҡа булған оло ихтирамы хаҡында һөйләй.

Белорет районы Мулдаҡай ауылында йәшәүсе Әхмәтйәнова Мәхмүзә апайҙың һөйләүенсә, ул тирәлә һаман булһа әрмегә китеүселәрҙе матур оҙатыу йолаһы һаҡланған. Бына нимә тип һөйләй ул: «Әрмегә китеүсе егеттәрҙе туған-тыумасалар бер-бер артлы ҡунаҡ итәләр, матур теләктәр теләйҙәр. Еңгәләр, ҡыҙҙар ҡулъяулыҡмы, йөҙөкмө, таҫмамы – берәй әйберен, аманат итеп, егеттең тоҡсайына һалалар. Һалдат имен-һау йөрөп ҡайтҡас, әйберҙәрҙе кире таратып бирә. Аманаттың үтәлешен аллаһы тәғәлә күҙәтә, ярҙам итә. Инә һөтө һаҡлай, инә һөтө ебәрмәй. Шуға күрә әрмегә киткән егеткә һөттә бешкән (әҫә һөтө ҡушылһа, бигерәк тә һәйбәт) көликмәк (ҡайһы урында ҡуликмәк, сөсикмәк) ашаталар һәм тешләмен (һынығын) өйҙә ҡалдырғандар. Һуңынан аҡ юл теләп, һөт эсергәндәр. Аманат итеп әсә кеше бер моҡсай киптерелгән

икмәк киҫәктәре (сохарый) һалған. Уны ла егет үҙе менән йөрөтөргә тейеш булған. Иң ауыр, аслыҡтан тайған хәлдә генә ашарға рөхсәт ителгән».

Күренеүенсә, бында ла халыҡтың икмәккә булған ихтирамы, уның тылсымлы көсөнә ышанысы сағыла.

Хөрмәтләү, ололау йәһәтенән башҡорттарҙа "аҡ ризыҡ"ҡа табыныу өҫтөнлөк алған. Был, иң беренсе, яуға киткәндәрҙе, юлға сыҡҡандарҙы, унан ҡайтҡандарҙы "аҡ ризыҡ" (һөт, ҡатыҡ, айран, ҡымыҙ) менән оҙатыу һәм ҡаршы алыу йолаларында сағыла. Беҙ быны үрҙә килтерелгән мәғлүмәттә лә күрәбеҙ. Аҡ – сафлыҡ, изгелек билдәһе. Шуға күрә башҡорттарҙа "аҡ"ты аяҡ аҫтына түгергә, утҡа һибергә ҡәтғи тыйылған. "Аҡ ризыҡ"ты ҡәҙерләү, ололау хаҡында әллә күпме мәҡәлдәр һәм әйтемдәр тыуҙырған халҡым. Бына шуларҙың ҡайһы берҙәре: "Ағы барҙың – туғы бар", "Аҡ ашаған арымаҫ", "Бер аяҡ ҡымыҙҙың ике аяҡ еле бар", "Ҡайнамаған һөт – алтын, ҡайнағаны – көмөш, ойоғаны – баҡыр", "Ҡымыҙ ҡылыҡ арттырыр, юҡ ҡаҙынды (малынды) таптырыр", "Һөт менән ҡатыҡ – йөрәккә ятыҡ", "Һөт тотҡан ҡаймаҡ ялар", "Һөттә – һаулыҡ, майҙа – бәрәкәт, иттә – ҡеүәт", "Һыу бирмәҫкә һөт бир", "Ҡымыҙ ҡылыҡ арттырыр, ҡуйың муйынын саптырыр" һ.б.

Бында һөт, ҡатыҡ, ҡымыҙ күңелгә ятыҡ, туҡлыҡлы, һаулыҡҡа файҙалы аҙыҡ булараҡ баһалана. Ҡымыҙға ҡарата халыҡтың йәнә бер ҡарашы бар: уның күңелде елкендереп ебәрер сифатын билдәләп, уны күп эсеү менән үтә мауыҡмаҫҡа ҡуша.

Аҡтан (һөттән) әҙерләнгән башҡа төр ашамлыҡтарға ла халыҡтың хөрмәте ҙур. Халыҡ ижадында бигерәк тә май йыш

телгә алына. Майға бөйле мәҡәлдәр ҙә байтаҡ. Мәҫәлән: "Һары май етмеш төрлө ауырыуҙан дауа", "Ҡапмаһаң да май яҡшы", "Май ашағандың йөрәге талмай", "Май тамаҡҡа ултырмай", "Май уҡлау йоттора", "Майы барҙың яйы бар", "Майлаһаң, иҫке сабата ла үтә", "Май бешмәк – йән сыҡмаҡ" һ.б.

Килтерелгән мәҡәлдәрҙән күренеүенсә, майҙың ҡәҙерен халыҡ уның туҡлыҡлы, һаулыҡҡа ифрат файҙалы булыуында күрә. Шул уҡ ваҡытта май табыуҙың үтә лә ауыр эш булыуы һыҙыҡ өҫтөнә алына. "Май бешмәк, йән сыҡмаҡ" тигән әйтем аҡ май әҙерләүҙең ҡыйынлығы хаҡында ғына түгел, ә ғөмүмән, һыйыр малы аҫрауҙың ауыр эш булыуы тураһында ла.

Башҡорт халҡының төп кәсептәренең береһе булған солоҡсолоҡ (ҡортсолоҡ) һәм шуның һөҙөмтәһенән алынған бал тураһында ла байтаҡ мәҡәлдәр, әйтемдәр тыуған. Уларҙа бал татлы байрам аҙығы ғына түгел, ә йөҙ сиргә дауа ла, кешеләр мөнәсәбәтен көйләүсе тылсымлы ризыҡ та итеп баһалана. Мәҫәлән: "Бал бармаҡ тешләтер", "Бал балсыҡ ашата, балан ҡамыр ашата", "Бал тотҡан бармаҡ ялар, һөт тотҡан ҡаймаҡ ялар", "Балдың төмен айыу ҙа белә", "Бал ҡапҡан – ауыҙ япҡан, асыҡҡан – ауыҙ асҡан", "Бар янында бар яҡшы, сәй янында бал яҡшы", "Бал – хәләл, араҡы – хәрәм". "Балын яратһаң, бәләһен дә ярат" һ.б. Һуңғы ике мәҡәлдә халыҡ бал алыуҙың да еңел генә бирелмәүен, ә байтаҡ көс, тир, ваҡыт талап итеүен иҫкәртә. Яҡшы хәбәр килтергәндәрҙе: "Ауыҙыңа бал да май" тигән әйтем менән ҡаршы алыуҙары ла башҡорттоң балға булған ихтирамлы мөнәсәбәтен, юғары баһаһын сағылдыра. Башҡорттарҙың туҡланыу системаһында иттән әҙерләнгән ризыҡтарҙың өҫтөнлөк итеүе хаҡында алда әйтелгән ине инде.

Шуға күрә иткә ҡарата ла бик күп мәҡәл һәм әйтемдәр тыуған. Уларҙа көнкүрештә иттең роле хаҡында бик күп фәһемле фекерҙәр әйтелгән. Шуларҙың ҡайһыларына ғына туҡталып үтәйек: "Һөттә – һаулыҡ, майҙа – бәрәкәт, иттә – көс", "Һурпа эскәндең ҡарыны йыуан, ит ашағандың балтыры йыуан", "Үткер бысаҡ, һимеҙ ит табын ҡәҙерен килтерер", "Ите – иткә, һурпаһы – биткә", "Ите – иткә, майы – елеккә", "Итле өйҙә ике кис, өйрәлелә – бер кис", "Ит ашаһаң – дарыу, күп ашаһаң – ағыу", "Туйғанға тауыҡ ите лә тупраҡ тәме әйтер", "Ҡаҙыға туйһаң, ҡарта кәрәкмәй", "Иттең тәмлеһе – ҡарта, ашаған һайын арта", "Ит ашат, ит ашатһаң, биш ашат", "Тәкә ите им булыр, кәзә ите ем булыр", "Һөйәк янындағы ит тәмле була", "Ит аҫылы – ҡарталыр, зат-затына тарталыр", "Яланда бешкән ит тәмле" һ.б.

Һанап кителгән мәҡәл һәм әйтемдәрҙән күренеүенсә, ит ул кешегә көс-ҡеүәт биреүсе, күп сирҙәрҙән дауалаусы, табынға ҡәҙер килтерер ризыҡ. Тик иткә һуйылған малдың һәр төрө һәм һәр тән өлөшө төрлөсә баһалана икән. Мәҫәлән, беҙҙең халыҡта иң әүәл йылҡы итенә өҫтөнлөк бирелә. Быны түбәндәге бер-ике мәҡәлдән дә күреп була: "Йылҡы ите – йылҡылдыҡ, шуның аша гәм ҡылдыҡ" (күп эштәр башҡарҙыҡ, йәшәнек), "Йылҡы ите – мәслихәт, күңел-тәнеңә сихәт", "Ябыҡ булһа ла йылҡы елеге булһын" һ.б.

Йылҡы итенә етә һарыҡ тәкәһе ите килә. Был турала үрҙә килтерелгән мәҡәлдәрҙең береһендә бик асыҡ әйтелә: "Тәкә ите – им, кәзә ите – ем". Ошо уҡ мәҡәлдән күренеүенсә, кәзә ите әллә ни әһәмиәткә эйә түгел икән. Мәҡәл, әйтемдәргә ҡарап

фекер йөрөткәндә, ҡош итенең өсәнсә урында йөрәүе билдәләнә.

Ниндәй генә һуғым малы булмаһын, унын һимеҙлеге мөһим фактор. "Һигеҙ ҡапма, һимеҙ ҡап", "Үткер бысаҡ, һимеҙ ит табын ҡәҙерен килтерер" һ.б. әйтемдәр шуны раҫлап тора.

Ә түшкә өлөштәренә килгәндә иһә иң тәмлеләре, йәғни деликатестары булып ҡаҙы һәм ҡарта һанала. "Ит аҫылы ҡарталыр, ашаған һайын тарталыр" тигән мәҡәл тап шул турала һөйләй ҙә. Шуныһы ҡыҙыҡ: ҡартаны халыҡ ҡаҙыға ҡарағанда ла ҡәҙерлерәк күрә. "Ҡаҙыға туйһаң, ҡарта кәрәкмәй" тигән һәм үрҙә әйтелгән әйтемдәр шундай фекергә килтерә.

Ит өлөштәрен бүлешеүҙең дә үҙ яйы, тәртибе булған. "Ҡыҙҙарға – ҡанат, малайҙарға – тояҡ, хужаға – баш, ҡатынға – түш, ҡунаҡҡа – ҡойроҡ майы" тигән әйтем бушҡа йәшәмәй халыҡта. Бында ғаилә иерархияһы ла, ҡунаҡҡа һәм аш-һыуға булған ҡәҙер ҙә сағыла. Әйткәндәй, мал башы ла элек иң ҡәҙерле ҡунаҡҡа бирелгән. Хәҙер генә уға ҡәҙер юҡ. Тик табын талабы буйынса, баш алған кеше унын иң тәмле урындарын (тел, ҡолаҡ, мейе, күҙ майы) яҡын ултырғандарға өләшергә тейеш булған.

"Яланда бешкән аш тәмле" тигән мәҡәл дә иғтибарға лайыҡ. Ҡыҫҡа ғына булһа ла был һүҙҙәрҙә оло мәғәнә ята. Ҡырҙа бергәләшеп эшләгәндән һуң, йыйылышып туҡланыу, һөйләшеп-көлөшөү ашаған ризығыңа йәм дә, тәм дә бирә. Шуға ла бындай табын һәр саҡ күркәм була. Был әйтелгән әйтем ана шул турала.

Мәҡәлдәрҙә һәм әйтемдәрҙә башҡорт халҡының элек ниндәй мал аҫрағаны, ул малдарға ниндәй мөнәсәбәттә

булғанлығы ла асыҡ күренә. Мәҫәлән: "Йылҡы – малдың батшаһы", "Аты бар – арыҫлан", "Аты барҙың ҡанаты бар", "Һыйыры барҙың һыйы бар", "Һыйлы көнөң һыйырҙа", "Кәзәне маҡта, һыйырҙы һау", "Арыҡ булһа ла һарыҡ аҫра" һ.б.

Был мәҡәлдәр ҙә алда әйтелгән: "Малсылыҡта башҡорттар иң әүәл атҡа, һыйырға һәм һарыҡҡа өҫтөнлөк биргән" тигән фекерҙе раҫлай.

Аш-һыуға, туҡланыуға ҡағылышлы мәҡәлдәр араһында бик образлы һәм кинәйәлеләре бар. Уйланмайынса ҡайһы саҡ уларҙың айышына ла төшөнөп булмай. Бында халыҡтың үткер фекере лә, тел оҫталығы ла яҡшы сағыла. Шуларҙың ҡайһы берҙәренә аңлатма биреп үтәйек.

1. "Ас өйҙә ҡатыҡ ойомаҫ" – ойоғанын көтмәй, һөт көйөнсә эсеп бөтөүҙе аңлата.

2. "Ауыҙ ашай, күҙ ояла" – кешенекен ашарға оял тигән мәғәнәлә.

3. "Ашаған-эскәнең урынында ҡалһын" – йәғни ғәйепләштән булмаһын.

4. "Ашыңды биргәс, ҡашыңды бирмә" – ашатҡанда йөҙөң асыҡ сырайлы булһын.

5. "Боҫло ашты бора баҫма" – аш бешкән өйгә керһәң, буш (ашамай) сыҡма.

6. "Бүре аҙығы – буранда" – запас аҙыҡ тупламаған кешегә ҡарата.

7. "Ҡайғыһыҙ ҡара һыуға һимергән" – ашың булһа ла ҡайғың булмаһын.

8. "Арпа-бойҙай аш булды, алтын-көмөш таш булды" – туҡлыҡ, муллыҡ булһа, алтын-көмөштөң хаҡы бөтә мәғәнәһендә.

Аш-һыуҙарға, туҡланыуға бәйле мәҡәл, әйтемдәрҙә тыйыуҙар, сикләүҙәр ҙә байтаҡ. Улар тураһында һуңғараҡ һүҙ булыр, ә был урында ашҡаҙаныбыҙға таш булып төшкән бер генә ризыҡҡа ҡарата тыуған мәҡәлдәрҙе атап үтәйек. Ул хәҙерге көнитмештә киң таралған һәм һәләкәткә илткән хәрәм ризыҡ – араҡы. Уға ҡарата халыҡ бына ниндәй аҡыллы һөм фәһемле фекерҙәр әйтә: "Араҡы – аш булмаҫ, быуынға таш булыр", "Араҡы яратҡан – аҡылын таратҡан", "Араҡы һүҙҙе оҙайта, ғүмерҙе ҡыҫҡарта", "Араҡы эскән – әжәле етмәй үлер" һ.б.

Күреүебеҙсә, аҫыл фекер алтын һымаҡ төптә ята, уны танырға, күрә белергә кәрәк. Улай ғына түгел, уларҙы ата-бабалар аманаты итеп һаҡларға һәм киләһе быуындарға еткерергә лә кәрәк.

Шулай итеп, мәҡәл һәм әйтемдәрҙе ҡыҫҡаса байҡау ҙа халыҡтың аш-һыуҙарға, ризыҡтарға булған ҡарашын, мөнәсәбәтен ныҡыраҡ аңларға, уның ашауға булған фекерҙәре мәғәнәһенә тәрәнерәк төшөнөргә ярҙам итә.

## §3. Аш-һыуҙарға бәйле йомаҡтар

Йомаҡ – һәр халыҡтың ижадында осрай торған үҙенсәлекле һәм бик боронғо жанр. Ғалимдарҙың фекеренсә, йомаҡ - кешеләрҙең ижтимаги тормошонда уй йомоу, йәғни кинәйәле

һөйләү кәрәклеге нигеҙендә барлыҡҡа килгән. Быны жанрҙың атамаһы үҙе үк күрһәтеп тора.

"Төҙөлөшө яғынан һорау һәм яуап рәүешендә ойошҡанлыҡтан, йомаҡ кешеләрҙең тапҡырлығын, аҡылын-зиһенен һынап ҡарау өсөн бик уңайлы ижад төрө, шуға күрә элекке замандарҙа кешене белеү, уны баһалау ихтыяжы тыуғанда, йомаҡ үҙенә күрә бер аҡыл һынау сараһы булып торған" (13. 8).

Кешеләрҙе аҡылға өйрәтеү, зиһенлелеген арттырыу ҙа йомаҡтарҙың төп функцияларының береһенә инә. Уларҙы сисеү процесында кеше матурлыҡты күрә һәм аңлай белергә өйрәнә, шулай уҡ халҡыбыҙҙың үткәндәге һәм бөгөнгө тормош-көнкүреше, йәшәү рәүеше менән таныша. Юҡҡа ғына ғалимдар йомаҡты "Тормошто, донъяны таныш-белеү курсы" тип атамай. Был һүҙҙәр, һис шикһеҙ, башҡорт йомаҡтарына ла ҡағыла.

"Халыҡ ижадының башҡа төрҙәренән айырмалы рәүештә, йомаҡ үтә ябай, ләкин кешенең көндәлек томошонан айырылғыһыҙ булған конкрет әйбер һәм көнкүрештәр менән эш итә, шул ябай ғына нәмәләрҙе поэтиклаштыра. Кешеләр араһындағы шәхси һәм ижтимағи мөнәсәбәттәр, хәл-ваҡиғалар тураһында ниндәйҙер дөйөмләштерелгән фекер, дөйөм һығымталар сығарыу жанрҙың маҡсатына инмәй. Уның стихияһы – конкрет донъя, конкрет күренештәр. Был конкрет әйберҙәрҙең даирәһе ғәйәт киң: ер һәм күк, тәбиғәт күренештәре, кеше, уның көнкүреше, хеҙмәте һ.б. Үҙ нәүбәтендә ошо конкрет нәмәләр йомаҡтарҙа тағы ла конкретлаштырылып бирелә: жанр өсөн, ғөмүмән, үҫемлектәр, хайуандар, хеҙмәт юҡ. Уның өсөн тик конкрет үҫемлектәр (арпа, көнбағыш...), конкрет хайуандар (һыйыр, һарыҡ...), конкрет хеҙмәт процестары (киндер иләү, балаҫ

һуғыу, иҙән һепереү) ғына бар", – тип яҙа билдәле фольклорсы-ғалимә Ф.А.Нәҙершина (13. 10).

Йомаҡтарҙа киң сағылыш тапҡан ана шул конкрет күренештәр һәм әйберҙәр исемлегенә аш-һыуҙар ҙа инә. Башҡорттарҙа ризыҡтарға һәм аш-һыуҙарға бәйле бик күп йомаҡтар тыуған. Уларҙа халыҡтың донъяны күрә белеү үҙенсәлеге лә, аҡылы ла, поэтик һәләте лә асыҡ сағыла. Шул йомаҡтарҙы күҙаллайыҡ.

Икмәк, икмәк бешереү хаҡында. "Йоморо башлы түрәләр түр башына менәләр", "Алдыңда булһа – моңайтмаҫ", "Туҡмап-туҡмап өйгә индерҙем, маҡтап-маҡтап тышҡа сығарҙым", "Үҙе йәнһеҙ, унһыҙ донъя йәмһеҙ", "Киҫәм-киҫәм ҡаны юҡ, уны белмәгән кешенең һаны юҡ", "Сөсө түгел – әскелтем, тел-геләнгән һыныҡлы, барынан да туҡлыҡлы", "Көлгә күмелә лә көлдөрә-көлдөрә күренә", "Ары ла лап-лап, бире лә лап-лап, күбеп ят" һ.б.

Күреүебеҙсә, йомаҡтарҙа ла, мәҡәлдәрҙәге һымаҡ, икмәккә ҡарата халыҡтың оло ихтирамы, ҙур баһаһы сағыла.

Тоҙһоҙ бер аш-һыу ҙа әҙерләнмәй. Тоҙ ҙа икмәк кеүек ҙур баһалана һәм ҡәҙерләнә. Шуға күрә уның тураһында йомаҡтарҙың ифрат күп булыуы һис тә ғәжәп түгел. Бына шуларҙың ҡайһылары: "Яңғыҙ мине ашамайҙар, минһеҙ яңғыҙ йәшәмәйҙәр", "Үҙе генә ашалмай, унһыҙ башҡа аш бармай", "Үҙем асы булһам да ризыҡтарҙы тәмләндерәм", "Мине ашамайҙар, минән башҡа туй ҙа яһамайҙар", "Әсе була, татлы була, үҙе туҙан саҡлы була", "Үҙе аҡлы, тәме татлы, тышҡа ҡуйһаң эт ашамай", "Һыуҙан тыуа, һыуҙан ҡурҡа" һ.б.

Был йомаҡтарҙа тоҙҙоң нисек барлыҡҡа килеүе лә (һыуҙан тыуа), һәм нисек юҡҡа сығыуы ла (һыуҙан ҡурҡа), уның үтә кәрәкле булыуы хаҡында ла фәһемле фекерҙәр әйтелгән. Был да йомаҡтарҙы халыҡ аҡылы тип аталған мәҡәл һәм әйтемдәргә яҡынайта.

Беҙҙең алдағы яҙмаларыбыҙҙа йомортҡа хаҡында һүҙ булманы. Ә бит ул да башҡорттарҙың туҡланыу системаһында ҙур ғына урын тота. Шуғалыр ҙа йомаҡтарҙа ул ҙур сағылыш тапҡан ризыҡтарҙың береһе. Шуларҙың бер аҙын барлап үтәйек: "Тышы тамаҡҡа ултыра, эсе йөрәккә ята", "Таш келәт, аҡ келәт, аҡ келәт эсендә һары алтын", "Аҡ тирмәнең эсендә һары сәсле ҡыҙ йоҡлай", "Аҡ көмбәҙле бер таш мәсет, инергә ишеге юҡ", "Аҡ һарайым эсендә һары тауығым ултыра", "Таш пулат, көмөш пулат, эсендә һары балауыҙ", "Бауға бәйләнмәй, сөйгә эленмәй" һ.б.

Был йомаҡтарҙа йомортҡаның тышҡы формаһынан алып, (һуңғы йомаҡ) уның туҡлыҡлылығы ла (эсе йөрәккә ята), ашарға ярамаған һәм ярашлы өлөштәре лә (тышы таш, эсе аш, һарыһы алтын) сағыла. Шул уҡ ваҡытта башҡорт этнографияһына бәйләнешле (аҡ тирмә) бирелеп, уның беҙҙең халыҡҡа хас аҙыҡ булыуы һыҙыҡ өҫтөнә алына.

Әлбиттә, башҡорттарҙың төп милли аштары булған һөт ризыҡтары: һөт, ҡатыҡ, ҡаймаҡ, ҡымыҙ, ҡорот, май ҙа йомаҡтарҙа сағылмай ҡалмай. Бына уларҙың ҡайһы берҙәре: "Йәй көнө табаҡ менән, ҡыш көнө ҡалаҡ менән", "Аҡ шишмәнең аҡҡан һыуын сапсаҡҡа ҡойоп ҡатырҙыҡ" (Ҡатыҡ). "Ярлыһы аҫта ҡала тора. байы өҫкә ҡалҡа тора" (Ҡаймаҡ). "Түңәрәк күлдең төбө күренмәй, ҡалҡына ла ҡалынаят" (Ҡаймаҡ, ҡатыҡ).

"Аҡ балаҫ өҫтөнә аҡ мендәр йәйелде" (Ҡаймаҡ). "Бешәләр, бешәләр ҙә ҡойоп эсәләр". "Ауыҙға инә, танауҙан ала". "Ҡабарам, ҡабарам да ҡунаҡ алдына барам". "Ҡылыҡһыҙҙы тилертә, булдыҡһыҙҙы тилмертә". "Шапыр-шопор төпкә төшә, аҡ йылғаһы ағып сыға". (Ҡымыҙ, ҡымыҙ бешеү). "Тоҡос башлы түрәләр түр башына менәләр". "Йоморо-йоморо йомарлам, йомороһоҙ торалмам". "Һуаланым, ҡыҫтым, мөйөшкә инеп боҫтом".

Иң ҡәҙерле һәм туҡлыҡлы һөт ризыҡтарының береһе булған май ҙа йомаҡтар иғтибарынан ситтә ҡалмаған. Уның тураһында бик образлы түбәндәге поэтик юлдар тыуған: "Һары көсөгөм һыуға бата, бер сума ла бер ҡалҡа". "Ары һуҡтым, бире һуҡтым, һары башлы ҡыҙ таптым" (Май яҙыу). "Бештем, бештем дә икегә айырҙым, береһен ҡойҙом, береһен ҡалдырҙым" (Аҡ май яҙыу). "Һары ризыҡ таптым, йәнгә тән таптым" (Май, бал) һ.б.

Күреүебеҙсә, килтерелгән йомаҡтарҙың күбеһе майҙы нисек әҙерләү хаҡында. Иғтибарҙы һуңғы йомаҡҡа йүнәлтәйек. Уның икенсе өлөшөндә кинәйәле мөһим һығымта ята: май менән бал йәнде тотоусы тәндең терәге.

Әлбиттә, йомаҡтарҙа ит һәм иттән бешкән ризыҡ, ашһыуҙар ҙур урын алған.

Иткә ҡағылышлы йомаҡтар араһында үҙенең поэтик эшләнеше яғынан әйтемгә яҡын бер йомаҡ иғтибарҙы йәлеп итә. Бына ул нисек яңғырай:

Йүгерҙем, йүгерҙем дә
Килеп ҡаптым бысаҡҡа;
Төрөлдөм, бөрөлдөм дә
Килеп керҙем усаҡҡа;

Яндым, көйҙөм,
Кәбәндәй өйөлдөм,
Алдығыҙға килдем.

Был йомаҡта иттең ашар ризыҡ булып өҫтәлгә ултырғанға тиклемге бөтә юлы һәм үткәрелгән процестары сағыла: мал йүгерә-йүгерә йөрөп, үлән ейеп тән үҫтерә, унан бысаҡҡа эләгә, унан төрөлөп-бөрөлөп (быныһы ҡаҙы тураһындалыр), усаҡҡа керә һәм табаҡ тулып (кәбәндәй өйөлөп) табынға ҡуйыла. Был йомаҡҡа яуап эҙләүсе малсылыҡты һәм мал яҙмышын мотлаҡ яҡшы белергә тейеш. Йомаҡты ҡойған (уйлап тапҡан кеше) баланың зиһенен генә түгел, ә күңел яҡшылығын да үҫтерергә тырышҡандар, сөнки йомаҡты сисеү процесында уның күҙ алдына малдың аянıс һәм ҡыҙғаныс яҙмышы килеп баҫа. Унан бала хисләнмәй ҡалмай, әлбиттә.

Иттән бешерелгән ризыҡтар ҙа йомаҡтарҙа үҙенсәлекле сағылыш таба. Мәҫәлән: "Ҡыҙыл ҡамыт кейҙем, ҡупшы аҙыҡ ейҙем" (Ҡаҙы). "Эсе тулы ваҡ халыҡ, түрҙә ултыра маҡтанып" (Бәлеш). "Эсе өрөлгән, сите төрөлгән, түбәһендә бер тишек" (Ҙур бәлеш). "Өф итмәгәндә өф иттерә, етешкәнде хуш иттерә" (Ҡурҙаҡ).

Шуныһы ҡыҙыҡ: башҡа ит ризыҡтарына ҡарағанда, билмән тураһында йомаҡтар күберәк тыуған. Уйлап ҡараһаң, билмән башҡорттар тормошона һуңғы дәүерҙә генә, урыҫтар менән аралашыу йогонтоһо булараҡ килеп ингән. Уның халыҡ ижадында традицион милли ризыҡтарҙан да йышыраҡ сағылышын нисек аңлатырға? Беҙҙеңсә, йомаҡ объекты булыуына уның үҙенсәлекле формаһы һәм тәме булышлыҡ иткән.

Беҙҙең милли туҡланыу системаһына һуңлап килеп инһә лә, билмән хәҙер аш-һыу рационында иң хөрмәтле урын биләй. Ул иң ҡәҙерле ҡунаҡ аштарының береһе. Билмән тураһында тыуған йомаҡтарҙың ҡайһы берҙәре генә: "Аҡ алаша батты, ҡолаҡтары ҡалҡты", "Ҡола ҡойоном ҡойоға төштө, ҡолағы ҡарая төштө", "Ҡола атым һыуға төштө, ҡолағы ҡарпая төштө", "Матур-матур ҡыҙҙар таҡта өҫтөнән шыуалар ҙа ҡайнар һыуға сумалар", "Ҙур-ҙур кешеләр таҡта быуалар, киләләр ҙә һыуға сумалар" һ.б.

Билмән яһау тураһында да ла бик мауыҡтырғыс йомаҡтар яралған. Мәҫәлән: “Ҡайсыһыҙ киҫелә, епһеҙ тегелә”, “Йөҙ йылҡы һыуға төштө, Сөләймән ҡыуа төштө” (Билмәндәр, һүмес). “Ҡырҡ йылҡым һыуға төштө, Әбделғәлим ҡыуа төштө” һ.б.

Күреүебеҙсә, билмәндең формаһы ла (ике ҡолаҡлы булыуы), әҙерләнеү тәртибе лә (һыуға төштө), уның башлыса йылҡы итенән әҙерләнеүе лә (ҡырҡ йылҡым һыуға төштө) йомаҡтарҙа киң кәүҙәләнеш таба. Бына шулай образлы һүрәтләнә халыҡ ижадында ит аштары һәм уның бер төрө булған билмән.

Шулай итеп, башҡорт милли аштарының күп төрлөлөгө һәм байлығы йомаҡ жанрында ла киң сағылыш таба. Уларҙа халыҡтың образлы фекере лә, поэтик һәләте лә, аш-һыуға булған мөнәсәбәте лә ярайһы уҡ яҡшы күҙаллана.

## § 4. Башҡорттарҙа табын этикеты

Аралашыу культураһы “этикет” тигән халыҡ-ара термин менән атап йөрөтөлә. Француз теленән ингән был һүҙ йәмғиәттә үҙ-үҙеңде тотоу, кешеләр менән аралашыу ҡағиҙәләре тигән төшөнсә бирә. Ул беҙҙеңсә “әҙәп” тигән әхлаҡи-фәлсәфәүи категорияға тап килә.

Һәр халыҡтың быуаттар буйы формалашҡан һәм ҡанунлашҡан әҙәп ҡағиҙәләре бар. Улар атанан улға, әсәнән ҡыҙға күсә килгән яҙылмаған наказдар рәүешендә йөрөй. Халҡыбыҙҙың боронғо тормошон өйрәнгән ғалимдар һәм әҙиптәрҙең билдәләүенсә, башҡорттарҙың үҙ-ара аралашыуында һәм башҡалар менән мөнәсәбәтендә иң әүәл күҙгә ташланғаны – ихласлыҡ һәм кешегә ышаныусанлыҡ булған. Ә ихласлыҡ үҙ эсенә алсаҡлыҡ, йомартлыҡ, киң күңеллелек тигән төшөнсәләрҙе ала. Был һыҙаттар үҙ сиратында ҡунаҡсыллыҡ тигән матур ғәҙәт тыуыуына сәбәпсе була. Башҡорттар, ысынлап та, ҡунаҡҡа саҡырышырға, йыйындар ойоштороуға әүәҫ.

Ҡунаҡ булышыу, бергәләп йыйындарға йыйылыу кешеләр араһына татыулыҡ индергән, үҙ-ара мөнәсәбәткә йылылыҡ биргән. Беҙҙең халыҡ өсөн ҡунаҡ кеше иң ҡәҙерле һәм изге һаналған. Уға ҡараңғы сырай күрһәтеү, йәбер-золом ҡылыу гонаһ тип ҡаралған. Шуға күрә, балаларҙы бәләкәйҙән үк асыҡ сырайлы, йомарт күңелле, ҡунаҡсыл булырға өйрәткәндәр. Шул нигеҙҙә бик күп мәҡәлдәр һәм әйтемдәр тыуған. Бына уларҙың ҡайһы берҙәре: “Ҡунаҡ килһә, йортҡа йәм”, “Ҡунаҡтың аты ла ҡунаҡ”, “Ҡаҙан ҡайҙа – ут шунда, ҡунаҡ ҡайҙа - ҡот шунда”, “Ҡунаҡ килһә, ҡапҡаң ас, өйөңә инһә, ҡаҙан аҫ”, “Күңеле

киңдең – ҡаҙаны киң”, “Ҡунаҡ килһә ит бешә, ит бешмәһә, бит бешә”, “Ҡунаҡ килһә таптырыр, ат урынына саптырыр”, “Ҡунаҡ ҡәҙерле булһа, ҡаҙан тиҙ ҡайнай”, “Килгәнсе ҡунаҡ ояла, ҡунаҡ килгәс, хужа ояла”, “Бәхетлененң ҡунағы бергә”, “Аштың бәрәкәте ҡунаҡ менән” һ.б.

Күреүебеҙсә, башҡорттар өсөн ҡунаҡ йортҡа ҡот, йәм килтереүсе ҡәҙерле кеше. Шуға күрә һәр кем ҡунаҡҡа ҡарата ихтирамлы һәм иғтибарлы булырға тейеш.

Шулай уҡ ҡунаҡтың үҙенә ҡарата ла байтаҡ мәҡәлдәр тыуған. Уларҙа ҡунаҡҡа килгән кешенең үҙен нисек тоторға тейешлеге хаҡында әйтелә, йәғни әҙәп ҡағиҙәләре һеңдерелә. Мәҫәлән, “Ҡунаҡ булһаң, тыйнаҡ бул”, “Һыйлы ҡунаҡ һыйында, һыйы бөткәс өйөндә”, “Алдыңа килде тип тығынма – ҡоҫорһоң”, “Ҡунаҡ ҡәҙере өс көн, дүртенсеһе үҙ башына”, “Ҡуш ҡуллап ҡаршы алдылар тип, йоҙроҡлап оҙатҡанды көтмә”, “Үҙең бешермәгән ашҡа бешереүсенән алда ҡашыҡ тыҡма”, “Кеше ҡапҡаһын асып керһәң, ябып та сыға бел”, “Ашаған тамаҡҡа ни бармаҫ” (самалабыраҡ аша), “Ашҡа барһаң – ашап бар, туйға барһаң – туйып бар” (йәғни табында саманы бел), “Бер ҡунаҡ - шатлыҡ, ике ҡунаҡ артыҡ, өс ҡунаҡ – йөк”, “Ашҡа килһәң, элек кил, үҙ ҡәҙереңде белеп кил” һ.б.

Шулай уҡ халыҡ иҫкәртә: ҡунаҡҡа йөрөү нисек кенә күңелле булмаһын, кешеләрҙе мәлһеҙ борсоуҙан, мәшәҡәтләүҙән тыйыл. Әгәр ҡунаҡҡа барғанһың икән, ҡаршы саҡырыу кәрәклеген дә онотма. Түбәндәге мәҡәлдәрҙә тап ошо фекер әйтелә: “Кешегә барып ҡаҙы ашағансы, өйөңдә ҡайтып һыу эс”, “Кешелә ашаған аш тупһанан сыҡҡансы”, “Кеше ризығына нәфсеңде һуҙма, үҙ ризығың үҙеңдән”, “Берәүҙең

өйрәгеи ашаһаң, ҡаҙыңдың ботонан тотоп бар", "Бәрәүҙә төш ите ашаһаң, үҙең оса ите әҙерлә", "Байрам ашы – ҡара ҡаршы" һ.б.

Халыҡтың хужаларға ҡарата ла әйтер һүҙе бар. Уларҙа ҡунаҡтан ҡурҡмаҫҡа, аш-һыуҙы йәлләмәҫкә, асыҡ сырайлы булырға кәрәклеге әйтелә: "Аш табылыу – бер бәхет, ашарға иш табылыу – ике бәхет", "Аштың бәрәкәте ҡунаҡ менән", "Ғүмер бөтмәһә, ризыҡ бөтмәҫ", "Ҡыҙғанғанды ҡыҙыл эт ашай", "Ашы булһа, ҡаҙаны табылыр", "Ашыңды биргәс, ҡашыңды йыйырма", "Ашың булмаһа ла ҡашың булһын" (асыҡ сырайлы бул), "Аштың тәме хужанан", "Ашатмаҫтың ашы бешмәҫ", "Ике дошманды бер табынға йыйма", "Татыу табында аш тәмле" һ.б.

Күреүебеҙсә, мәҡәл һәм әйтемдәрҙә башҡорт халҡының үҙенсәлекле милли һыҙаттары: йомарт күңеллелеге, ихласлығы, асыҡлығы, ҡунаҡсыллығы киң сағылыш тапҡан. Мәҡәлдәр булып ойошҡан халыҡ аҡылы кешеләрҙә тап ана шул сифаттарҙы тәрбиәләй. Өҫтә ҡарап үтелгән тапҡыр һүҙҙәр халыҡ ижадының мөһим тәрбиәүи функция үтәүенең асыҡ миҫалы ул.

Дөйөмләштереп шуны әйтергә мөмкин: башҡорт халҡы үҙенең йәшәү рәүешенә, үҙен ураткан мөхиткә, төп кәсептәренә бәйле традицион милли туҡланыу системаһын барлыҡҡа килтергән. Ризыҡтарға, аш-һыуға, туҡланыуға, табын ҡороуға ул һәр саҡ иғтибарлы булған. Шул иғтибарҙы мәҡәлдәргә, әйтемдәргә, йомаҡтарға, йырҙарға һалып киләһе быуындарға изге аманат итеп матур ғәҙәттәр, фәһемле йолалар ҡалдырған.

## Һығымта

Тел ғилемендә терминология, йәғни атамаларҙы өйрәнеү, мөһим һәм актуаль мәсьәләләрҙең береһе булып тора. Телдең терминологик лексикаһын тикшереү бик күп һорауҙарға (тарихҡа, этнографияға, фольклорға бәйле) яуап бирә ала. Телде ана шул тарихи-этнографик юҫыҡта анализлау фәндә «этнолингвистика» тип йөрөтөлә.

Беҙҙең тикшеренеү объектын тәшкил иткән аш-һыу терминдарын күҙаллау ҙа телдең халыҡ тарихына һәм көнитмешенә ни тиклем бәйле булыуын күрһәтә. Башҡа материаль культура төрҙәре менән сағыштырғанда, халыҡтың этник үҙенсәлектәре милли аш-һыуҙарҙа һәм уларҙың атамаларында тотороҡлораҡ һаҡлана. Юҡҡа ғына халыҡ үҙенең мәҡәлендә «Милли аш – милли йөҙ» тимәгән. Шуға күрә тел ғилеменең этнолингвистика өлкәһе был объектты урап үтә алмай.

Башҡорттарҙың милли аш-һыуҙары тураһындағы тәүге яҙма мәғлүмәт XIII быуатҡа ҡарай һәм ул француз сәйәхәтсеһе Вильгельм де Рубрук исеменә бәйле. Әммә башҡорт аштары һәм туҡланған ризыҡтары хаҡында тулыраҡ мәғлүмәттәр XVIII-XIX быуаттарҙа ғына бирелә башлай. Тап ошо осорҙа Рәсәйҙә төрлө тарихи, географик, этнографик йәмғиәттәр барлыҡҡа килә һәм улар Рәсәй халыҡтарының көнкүрешен өйрәнеү эшен киң йәйелдерә, шул иҫәптән башҡорттарҙың йәшәү рәүешен сағылдырған байтаҡ мәҡәләләр донъя күрә. Уларҙа беҙҙең аш-һыуҙар һәм туҡланыу хаҡында ла байтаҡ мәғлүмәттәр бирелә. Шул авторҙарҙан иң әүәл И.Георги, П.Паллас, И.Лепехин,

Н.Попов, В.Зефиров, В.Черемшанский, И.Игнатович, Д.Никольский, В.Арнольдов, йәнә үҙебеҙҙән сыҡҡан тикшеренеүселәр: П.Назаров, Б.Юлуев, М.Байышевтарҙың исемдәрен атап китергә була.

Әммә улар башҡорттарҙың йәшәйешен, шул иҫәптән туҡланыуын да фрагменталь рәүештә генә бәйән итәләр. Ә быны махсус һәм киң планда тикшереүсе С.И.Руденко була. XX быуат башында ул бөтә Башҡортостанды йөрөп сығып, халыҡ көнитмеше тураһында киң мәғлүмәт туплай һәм 1925 йылда "Башкиры" тип исемләнгән ҙур монографик хеҙмәт баҫтырып сығара. 1955 йылда уның икенсе, тулыландырылған баҫмаһы донъя күрә. Был китапта башҡорт милли аш-һыуҙарына айырым бер бүлек бирелгән.

С.И.Руденконан һуң башҡорттарҙың милли аш-һыуҙары, туҡланыу системаһы һәм төп ризыҡтар рационы тураһында үҙебеҙҙең ғалимдар Р.Г.Кузеев, Н.В.Бикбулатов, А.З.Әсфәндиәров, С.Н.Шитова, Ф.Ф.Фатихова, М.Ғ.Муллағолов, Р.М.Йосоповтар яҙып сыҡты. Әммә уларҙың хеҙмәттәре башлыса бер йүнәлештә – этнографик характерҙа булды. Аш-һыу терминдарын лингвистик йәһәттән махсус рәүештә С.Ғ.Ғилманова тикшерҙе һәм бер-нисә мәҡәлә баҫтырып сығарҙы. Әммә был хеҙмәттәрҙә аш-һыу терминдары башлыса семантик планда анализланды һәм иғтибарҙың ҙур өлөшө аш-һыу әҙерләү ысулдарына йүнәлтелде. Тәҡдим ителгән хеҙмәттә иһә беҙҙең маҡсатыбыҙ – аш-һыу терминдарын киңерәк планда, этнолингвистик йүнәлештә тикшереү булды.

Иғтибар иң әүәл башҡорт милли аш-һыуҙарының төрҙәрен билдәләү, йәғни терминдарҙы классификациялау ине.

Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә беҙ башҡорт милли аштарын төркөмдәргә бүлеп ҡараныҡ. Фекеребеҙ нигеҙендә халҡыбыҙҙың төп йәшәйеш кәсептәре ята. Шуларға ярашлы беҙ түбәндәге билдәләмә бирҙек: башҡорт аш-һыуҙары төп өс төрҙән тора: ит, һөт, үҫемлек аштары. Был турала башҡорттарҙың тарихын һәм көнкүрешен өйрәнгән бөтә тикшеренеүселәр әйтеп китә. Был хеҙмәттә башҡорт аш-һыуҙарына киңерәк ҡараш ташланды һәм халыҡтың кәсебенә, көнитмешенә бәйле йәнә бер нисә ашамлыҡ төрҙәре билдәләнде: солоҡсолоҡҡа бәйле – бал, балыҡсылыҡ кәсебенә бәйле балыҡ аштары, һунарсылыҡҡа бәйле – ҡыр кейектәренән әҙерләнгән ашамлыҡтар һәм Уралыбыҙ бүләк иткән тәбиғәт ризыҡтары. Улар тураһында китапта ентекле һүҙ алып барылды.

Тәҡдим ителгән хеҙмәттең икенсе бүлеге йола–байрам аш-һыуҙарын тикшереүгә һәм уларҙың семантикаһын анализлауға бағышланды. Этнолингвистик тикшеренеүҙәрҙә һис ҡасан халыҡтың милли йолаларын урап үтеп булмай. Нәҡ йола күренештәре һәр халыҡтың милли булмышын сағылдырған иң мөһим билделәрҙән иҫәпләнә. Шуға күрә хеҙмәттең был өлөшөнә тейешле иғтибар бүленде һәм башҡорттарҙың милли йолалары, уларҙа махсус әҙерләнгән ризыҡтар тураһында ярайһы киң мәғлүмәт килтерелде. Ундағы төп фекерҙәр түбәндәгеләргә ҡайтып ҡала: башҡорт йолалары бай һәм күп төрлө, улар халыҡ тарихы, кәсептәре һәм көнитмешенә бәйле. Йолаларҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе тикшергән этнограф-ғалимдар уларҙы ике ҙур төркөмгә бүлә: календарь йолалар һәм ғаилә-көнкүреш йолалары. (Фольклорсылар уны киңерәк планда ҡарай.) Һәр йола махсус аш-һыуҙар менән оҙатыла килә. Уларҙы

өйрәнеү халыҡтың менталитетын аңлауға һәм уны башҡа милләттәргә төшөндөрөүгә мөһим бер фактор булып тора. Календарь (йәғни миҙгелдәргә бәйле) йолаларҙың һәр ҡайһыһы билдәләнгән мәлдә атҡарыла. Яңы йыл тыуыуын Науруз байрамы менән. яҙ килеүен Ҡарға бутҡаһы, Кәкүк сәйе менән билдәләһәләр, яҙғы эштәр бөткәс, Һабантуй үткәрелгән, йәйләүҙәргә сыҡҡан осорҙа – Йыйындар, көҙөн – Сөмбөлә байрамы, ҡар ятҡас Һуғым ашы, Ҡаҙ өмәләре уҙғарылған. Йолалар бер-береһенән миҙгел һыҙаттары менән генә түгел, башҡарылыу тәртиптәре менән дә айырылған.

Әйтеп үтеүебеҙсә, башҡорт милли йолалары һәм байрамдары һәр ваҡыт күмәкләп туҡланыу, һый, мәжлес менән оҙатыла. Күп байрамдарҙа бишбармаҡ, ҡаҙы, тултырма, ҡуллама, ҙур бәлеш, бал, май, ҡаймаҡ, ҡымыҙ, сәй кеүек иң тәмлеләрҙән һәм ҡәҙерлеләрҙән һаналған ризыҡтар һәм эсемлектәр ҡуйыла. Әммә махсус аш-һыуҙар менән оҙатылған байрам-йолалар ҙа халҡыбыҙҙа бихисап. Шуларҙың ҡайһы берҙәрен атап үтәйек: “Науруз байрамы”. Уны көн менән төн тиңләшкән мәлдә (28 мартта) үткәрәләр. Ул көндө һәр хәлле ғаиләлә Науруз ашы бешерелә. Ул аштың нисек әҙерләнеүе тураһында хеҙмәттә мәғлүмәт бирелде. Шулай уҡ “Кәкүк сәйе”, “Ҡарға бутҡаһы”, “Көпшә йыйыны”, “Ямғыр бутҡаһы”, “Ҡурмас һыйы”, “Нардуған байрамы”, “Һөйһөн килтереү”, “Йыуаса көнө”, “Бирхауай ите”, “Бала бағыу”, “Нигеҙ ҡороу”, “Ҡарта ашы” һ.б. йолалар һәм уларҙа әҙерләнгән махсус аш-һыуҙар тураһында һүҙ алып барылды. Бүлек аҙағында башҡорт милли аш-һыуҙары терминдарының һүҙъяһалышы хаҡында байтаҡ

ҡына фәнни күҙәтеүҙәр килтерелде. Унда түбәндәге фекерҙәр әйтелде:

Аш-һыу терминдарының семантикаһы (һүҙъяһалышы) ябай ғына күренеш түгел. Ул бик күп компоненттарҙы һәм факторҙарҙы үҙ эсенә ала.

Һүҙъяһалыш тел ғилеменең морфология бүлеге менән тығыҙ бәйләнештә, сөнки һүҙъяһалыш процесы күп осраҡта тамыр һәм аффиксаль морфемаларҙың мөнәсәбәттәшлеге, йәғни һүҙ яһаусы нигеҙҙәрҙең бер-береһе менән яҡынлашыуҙары, ишләшеүҙәре, ҡабатланыуҙары йәки һүҙ яһаусы аффикстар менән ҡушылыуҙары һөҙөмтәһе булып тора: юҡҡа ғына һүҙъяһалыштың иң продуктив һәм киң таралған төрҙәренең береһе морфематик күренеш тип аталмай.

Башҡорт телендәге аш-һыу терминдарының байтағы тик тамырҙан (нигеҙҙән) тора. Әммә улар тел составының ҙур өлөшөн биләмәй. Һүҙъяһалышта төп урынды аффиксация ысулы алып тора. Аффиксация һөҙөмтәһендә тамыр һүҙгә (нигеҙгә) һүҙ яһаусы аффикстар ҡушылып, яңы һүҙҙәр барлыҡҡа килә. Был – бигерәк тә исемдәрҙең, сифаттарҙың, ҡылымдарҙың һәм рәүештәрҙең яһалышында иң продуктив ысул булып иҫәпләнә. Мәҫәлән: а) яһалма исемдәр: аш-лыҡ, көл-сә, йәй-мә, ҡабарт-ма; б) яһалма сифаттар: йом-шаҡ, бал-лы, май-лы, йәбеш-кәк; в) яһалма ҡылымдар: файҙа-лан, аш-а, беш-ер; г) яһалма рәүештәр: заман-са, яңы-са, эҫе-ләй һ.б.

Башҡорт телендә һүҙъяһалыш ысулдары һәм алымдары үрҙә күрһәтелгәндәр менән генә сикләнмәй, әлбиттә. Беҙ уларҙың төп ҡанундарына ғына туҡталып үттек. Әйткәндәребеҙ

киләһе тикшеренеүҙәргә этәргес мәғлүмәт булыр тигән фекерҙә ҡалабыҙ.

Өсөнсө бүлек тулыһынса милли аш-һыу һәм ризыҡтарҙың халыҡ ижадында сағылышын асыҡлауға тәғәйенләнде. Ашамлыҡтар һәм уларҙы ҡулланыу тәртибе хаҡында мәғлүмәттәрҙе фольклорҙың бөтә жанрҙарында ла табырға мөмкин. Әммә ул фекерҙәрҙең иң аҫылдары һәм фәһемлеләре мәҡәл-әйтемдәрҙә, йомаҡтарҙа киң сағылыш тапҡан. Шуға күрә, тәҡдим ителгән хеҙмәттә тап ошо жанрҙарға төп иғтибар бүленде. Мәҡәл һәм әйтемдәрҙә табын культураһы хаҡында ла байтаҡ ҡиммәтле фекерҙәр бар. Шуға күрә халыҡ аҡылына таянылған табын культураһы (этикеты) айырым параграфта ҡаралды.

Шулай итеп, халыҡтың аш-һыуҙарын, уларҙың атамаларын, туҡланыу тәртибен һәм йолаларын тикшереү уның милли менталитетын асыуға ҙур өлөш индерә ала. Был хеҙмәт тап шул йүнәлештә башҡарылды.

## Һылтанмалар


1. Арнольдов В.А. Пища башкир // Журнал русского общества охраны народного здравия. СПб., 1895, №5.
2. Башҡорт халыҡ ижады. I том. Йола фольклоры. /Төҙөүселәре Ә.М. Сөләймәнов, Р.Ә. Солтангәрәева. – Өфө, Китап, 1985.
3. Вәлиев Ю.Ф. Ашҡаҙан сәғәт кеүек эшләһен // Башҡортостан, 2002 йыл, 13 февраль.
4. Гильманова С.Г. Ареал и структура названий пищи в башкирском языке // Ареальные исследования по башкирской диалектологии и ономастике Башкирии. - Уфа, 1988.
5. Гильманова С.Г. Названия ритуальной и обрядовой пищи у башкир // Мате риалы и исследования по лексике башкирского языка. - Уфа, 1990.
6. Гильманова С.Г. Наименования молочных продуктов в башкирских говорах // Вопросы лексикологии и лексикографии башкирского языка. - Уфа, 1983.
7. Георги И.Г. Башкирцы. Описание всех обитающих в Российском государстве народов. - СПб., 1799. ч.III.
8. Гумилев Л.Н. Древние тюрки.- М., 1967.
9. ГариповТ.М. Башкирское именное словообразование. - Уфа: БФАН СССР, 1985.
10. Ишбаев К.F. Башҡорт теленең һүҙъяһалышы. - Өфө, 1994.
11. Игнатович А. Башкирская бурзянская волость // Архив исторических и практических сведений. – Кн.V, 1863.
12. Казанцев И.М. Описание башкирцев. – СПб.,1866.
13. Лепехин И.И. Дневные записки путешествия по разным провинциям Российского государства в 1770 г. СПб., 1772. ч.III. гл. II.
14. Мамин-Сибиряк Д.Н. Повести и рассказы.- Уфа, 1978.
15. Нәҙершина Ф.А. Алтын ҡумта.- Өфө, 1985.
16. Никольский Д.П. Башкиры. - СПб., 1983.
17. Назаров П.К. Этнография башкир. // Этнографическое обозрение. Издание этнографического отдела Императорского общества Любителей Естесствознания, Антропологии и Этнографии. - М., 1890, №1.
18. Паллас П.С. Путешествия по разным провинциям Российского государства. - СПб., ч. II. кн.I.
19. Попов Н.С. Хозяйственное описание пермских губерний по гражданскому и естественному ее состоянию. СПб., 1813, ч.III.

20. Рубрук В. Путешествие в восточные страны. Изд. Н.Суворина. - СПб, 1911.
21. Руденко С.И. Башкиры. Опыт этнографической монографии.- М., 1925.
22. Зефиров В. Взгляд на семейный быт башкирца // Оренбургские губернские ведомости, 1851, №4, 5.
23. Шамаев А.Г. Кумыс. - Уфа, 1995.
24. Шитова С.Н, Гадельгареева Р.Г. Злаки в повседневной, праздничной и обрядовой пищи башкир в конце XIX – начале XX вв. // Хозяйство и культура башкир в XIX – начале XX вв. - Уфа, 1989.
25. Эдуардо Гарсия, уругвай яҙыусыһы // Курьер Юнеско. - 2001, ғинуар.
26. Ярослав Гаворка. Путь к долголетию.- М., 1996.

Йөкмәткеһе


Инеш.....3

I бүлек. Башҡорт милли аш-һыу төрҙәре.....14

§ 1. Малсылыҡ кәсебенә бәйле аш-һыуҙар.....18

§ 2. Игенселеккә бәйле аҙыҡтар.....44

§ 3. Һунарсылыҡ һәм балыҡсылыҡ ризыҡтары.....55

§ 4. Ҡортсолоҡҡа бәйле аш-һыуҙар.....62

§ 5. Тәбиғәттән йыйылған ризыҡтар.....66

§ 6. Баҡсасылыҡ ризыҡтары.....67

II бүлек. Башҡорт байрам-йолалары һәм уларға бәйле аш-һыуҙар

§ 1. Халыҡ һәм йола.....70

§ 2. Календарь йолалар һәм уларға бәйле аш-һыуҙар.....73

§ 3. Ғаилә-көнкүреш йолалары һәм уларға бәйле аш-һыуҙар...91

§ 4. Аш-һыуға ҡағылышлы терминдарҙың яһалышы.....111

III бүлек. Милли аш-һыуҙарҙың һәм табын этикетының халыҡ ижадында сағылышы

§ 1. Туҡланыу системаһы.....120

§ 2. Аш-һыуҙар тураһында мәҡәл һәм әйтемдәр.....125

§ 3. Аш-һыуҙарға бәйле йомаҡтар.....133

§ 4. Башҡорттарҙа табын этикеты.....140

Һығымта.....143

Һылтанмалар.....149

**Фаниля Салаватовна Аминева**

# ЛЕКСИКА ПИТАНИЯ В БАШКИРСКОМ ЯЗЫКЕ

Этнолингвистическое исследование

Редактор Бадретдинова Н.Х.

Изд. лиц. № ИД 03913 от 02.02.01.
Подписано в печать 03.02.03.
Бумага писчая. Формат 60x84 1/16.
Отпечатано на ризографе.
Гарнитура Journal, Times New Roman.
Усл.печ.л. 6,4. Уч.-изд.л. 6,6.
Тираж 300 экз. Заказ 014.
Цена свободная.

Издательство Башкирского института развития образования
450005, Уфа, ул. Мингажева, 120.